ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

7-13 июль (майай) 2018

№27 (809)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреКле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был уҡыу йортонда...**

ауыл хужалығын һаҡлау тураһында ғәм һалалар



5,6

**Хәҙер балалар велосипед түгел,**

атай-әсәйенән ук-ян һорай икән...



8-9,16

**Һәр кем үҙенең милләтенең...**

тыуған еренең патриоты була ала



10

**Урмандарға керһәм,**

аҙаштиһәм...



12-13

ТВ-программа 14

***Александр Македонский кемдер икенсе берәүҙе ғәйепләп һөйләгәндә бер ҡолағын ҡаплар булған. Унан ни өсөн шулай эшләүен һорағас, ул: "Икенсе ҡолағымды ғәйепләнеүсене тыңлар өсөн һаҡлайым", - тип яуап бирер булған.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау министрлығында халыҡ медицинаһы менән шөғөлләнеү өсөн рөхсәт биреү тәртибе раҫланды. Ғөмүмән, һеҙ халыҡ табиптарына ышанаһығыҙмы, уларҙың хеҙмәтенән файҙаланаһығыҙмы?

***Шәмсинур БУЛӘКОВА, юғары категориялы табип, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:*** Борондан килгән, йылдар буйы һыналған халыҡ дауалау сараларына ышанам. Элек бит махсус белемле табиптар, дауаханалар булмаған, бигерәк тә ауыл ерҙәрендә, ә кеше сирләмәй тормай, шунан ул ни эшләгән, тип уйлайһығыҙ? Халҡыбыҙҙың имселәре, бағымсыларына мөрәжәғәт иткән, ә ундай халыҡ табиптары һәр ауылда булған: үләндәр менән дауалаған, кимәлйегән, сыҡҡан быуынды ултыртҡан, һөлөк һалған, яман ҡанды сығарған (хиджама), яңы һуйылған мал тиреһенә уранған, йәш үләнгә ятҡан һ.б. Беҙ бәләкәй саҡтарҙа ла бар ине әле ундай белемсе әбей-бабайҙар. Шуны һаман хәтерләйем: бер шулай аяҡ быуыным сыҡты. Мине үҙебеҙҙең ауылдағы ябай ғына бер инәйгә алып килделәр. Уның шундай һәләте барлығын белмәй ҙә инем. Ул, ҡурҡмаһын, типтер инде, мине алдаштырып, хәбәрен көйләп һөйләй-һөйләй аяҡты майлап, һыйпап ултырҙы ла ҡапыл ғына нык итеп тартып, быуынды урынына ултыртты ла ҡуйҙы, һиҙмәй ҙә ҡалдым, ауыртманы ла. Бына шундай имселәргә нисек ышанмайһың? Тик йәл, хәҙер ундай имселәр юҡ дәрәжәһендә. Ваҡытында улар тәжрибәһен өйрәнеп ҡалыусылар булмаған бик. Дөрөҫ, хәҙер ҡайһы бер поликлиникаларҙа остеопат тигән һөнәр эйәләре эшләй башланы. Улар йүнәлтмә буйынса уҡып ҡайтып, умыртҡа һөйәген, аяҡ-ҡул быуындарын дауалай. Үләндәрҙең шифалы көсөнә лә ышанмау мөмкин түгел, тик уларҙың үҙенсәлектәрен белергә, ҡулланыу ҡағиҙәләрен тотоу кәрәк, юғиһә, ҡайһы бер үләндәрҙән аллергия булыуы бик ихтимал. Шулай уҡ сама белеү талабын теүәл үтәү ҙә мотлаҡ, сөнки һәр бер дауа кеүек үк, дозаны теүәл үтәгәндә генә унын шифаһына өлгәшергә мөмкин, ә инде файҙаһы күберәк тейһен тип, самаһыҙ ҡулланыу кире һөҙөмтә биреүе бар. Үләндәр менән дауалаусы халыҡ табиптары беҙҙә лә бар, улар бик күп сирләләрҙе, хатта рәсми медицина әһелдәре ҡул һелтәгән өмөтһөҙ ауырыуҙарҙы ла аяҡҡа баҫтырғанын беләбеҙ. Быны, ниһайәт, медицина үҙе лә танырға мәжбүр. Халыҡ табиптарына дауалауға рөхсәт биреү тураһындағы ҡарар тап шул турала һөйләй ҙә инде. Документҡа ярашлы, былдай рөхсәт мөҙҙәте биш йылға иҫәпләнгән, ул ғәмәлдән сыҡҡас, килешеүҙе оҙайтырға мөмкин. Дауалау менән төбәк биләмәһендә генә шөғөлләнергә була. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән килгән табиптар республикала үҙҙәренең эшмәкәрлеге менән шөғөлләнә алмай. Уларҙың Башҡортостандан ситтә бирелгән рөхсәт ҡағыҙҙары бында яраҡһыҙ. Рөхсәт алыу өсөн ғариза тултырырға, медицина белемен раҫлаған (әгәр булһа) документтар, медицина эшмәкәрлеген алып барыуға лицензия (булһа) күсермәләрен, медицина ойошмаһынан күрһәтмә алырға кәрәк. Әгәр кеше дауаларға теләй, ләкин унын махсус медицина белеме юҡ икән, ул эшмәкәрлеген табип күҙәтеүе аҫтында алып барырға тейеш. Быныҥ өсөн ул медицина ойошмалары, шәхси медицина практикаһы менән шөғөлләнгән табиптар менән килешеү төҙөй ала. Халыҡ табибы ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән кешене дауалар алдынан унын яҙма ризалығын алырға бурыслы. Бынан тыш, табиптарға күмәк кешеләргә сеанстар үткәреү тыйыла.

(Дауамы 2-се биттә).

*АФАРИН!*

# УРАЛ БАТЫР БӨРККӘН ТЕРЕҺЫУҒА...

## йөрәк тауышын ҡушты балалар

**"Урал батыр" эпосын башҡарыусылар бәйгеһендә иң ҡыҙығы һәм иң көтөлгәне - беренсе тур, йәғни әҫәрҙе яттан һөйләүсе балаларҙы тыңлау. Мин иртән иртүк уларҙың төрлөһө төрлө урында ышыҡ табып, йәки бер ниндәй ығы-зығыға иғтибар итмәйенсә, тамашасылар араһында тырыша-тырыша эпос һүҙҙәрен ҡабатлағанын күҙәтергә яратам. Гүйә, улар ҡобайыр геройҙары менән килешеү төҙөй: "Мин хәҙер сәхнәгә сығам, һине халыҡ алдына сығарам, тимәк, һин дә һәр һүҙеңде, һәр хис, энергияңды йәлләмәҫкә тейешһең!" Һәм, ысынлап та, йыш ҡына шулай була: бөтә ғәм халыҡ алдында Урал, Шүлгән, Йәнбирҙе ҡарт, Зәрҡум, Ҡатил батша "телгә килә". Бигерәк тә Һомай, Айһылыу, Ҡатил ҡыҙы тамашасыға "асылырға ярата", улар шулайтып әҫәрҙең төп идеяһын еткерергә "тырыша"...**

(Дауамы 11-се биттә).



12+

УЙЛЫҒА -УЙ

**Әүәле, йәй еттеме, Ағиҙелдән көнө буйы кәмә менән туристар аға ине. Беҙ күрше әхирәттәрем Рәшиҙә, Мәстүрә, Маһинур, Рәйләләр яр башына сығып баҫабыҙ ҙа, "Эй, турист, турист!" тип быларға һөрәнләйбеҙ. Ҡайһы бер кәмәләрҙән беҙгә яуап һөрәне лә ишетелгеләй. Уларға беҙ "Айда суда", тип ҡысҡырабыҙ. Башҡа төрлө һүҙҙәргә урыҫсабыҙ юҡ.**

# БЫНА БЕҘҘЕҢ БРЕНДТАР!



Шулай бер көндө мин һөрәнләүҙән арып, йүгереп өйгә ҡайтып индем. Хәҙер бер сынаяҡ сәй һөрпөлдәтәм дә кире яр аҫтына йүгерәсәкмен. Сөнки унда минең иң кесе һеңлем Лилиә кипкән ҡоротон имеп йөрөп ҡалды, әсәй сабый баланы янғыҙ ҡалдырмаҫҡа ҡушҡайны. Табынға ултырып та өлгөрмәнем, Лилиә шар итеп ҡалды, ҡысҡырып илай. Әсәм: "Бар янына йөһәтерәк, ҡорт-мазар саҡтымы икән?"- тип тынысһыҙлана. Яр аҫтына төшһәм, ҡырсында Лилиәне бер төркөм туристар уратып алған, ҡулындағы шайыҡҡа буялып бөткән ҡоротон алмаҡсылар. Лилиә ике ҡуллап ҡоротона сат йәбешкән, күҙ йәштәре йылға булып аға... Туристар минә ниндәйҙер һорауҙар бирә башланы, мин ни, телдәрен аңламағас, йүгерттерел әсәмде алып килдем. Сит кешеләр унан ниҙер һорай, әсәм аңлата, тегеләр яуапты блокноттарына яҙа, шунан Лилиәнең йәшен һөртөп, фотоға төшөрә башланылар. Туристар тәки Лилиәнең ҡулынан шайыҡлы ҡоротто алды һәм уны ялап та, тешләп, сәйнәп тә, имеп тә ҡараны, шунан уны пакетҡа төрөп алып, кәмәләренә ултырып, ары аҡтылар. Әсәм уларҙың сит ил ниместәре икәнен әйтте. Һорауҙарына яуаптарҙы ла ул нимес телендә аңлатты, сөнки әсәйем, ҡала ҡыҙы, урыҫсаны ла, нимессәне лә һыу кеүек эсә торғайны. Башҡортсаһын иһә бөрйәндәрҙең үҙҙәренән арттырыбыраҡ ебәрә ине...

Күптән түгел Бөрйән районында үткән ағинәйҙәр йыйынында Рәшиҙә Ғиззәтуллинаның фәһемле сығышын тыңлап ултырғанда ҡылт итеп хәтеремә ошо ҡорот ваҡиғаһы иҫемә төштө. Рәшиҙә ҡорама ҡороу һөнәрен донъя сәнғәте кимәленә күтәреү хаҡында телмәр тотһа ла, районыбыҙҙа үткенсе туристарҙың иғтибарын йәлеп итерҙәй, килем килтерерҙәй халыҡ кәсептәрен үҫтереү кәрәклеге хаҡында ла бик урынлы фекерҙәр әйтте. Шул иҫәптән - ҡорот тураһында ла.

Мәсьәләгә бына шулай киңерәк тә ҡарай алабыҙ бит, тип уйлай йөрөйөм хәҙер. Ҡорамаларыбыҙға, балаҫтарыбыҙға, кейеҙҙәребеҙгә, камзулдарыбыҙға, еләндәребеҙгә, таҫтарҙарыбыҙға, билбау, сарыҡтарыбыҙға, балсыҡ көршәктәребеҙгә, туҫтаҡ төптәренә, һауыт ситтәренә, һандыҡ көпләмәләренә төшөрөлгән арҡыс-торҡос ҡуласалар, шаҡмаҡ йәки өсмөйөшлө һындар, биҙәктәр, нағыштар - улар бит барыһы ла беҙгә әллә күпме тарихи, фәлсәфәүи, хатта космогоник мәғлүмәттәр еткерә алырҙай тәрән сакраль мәғәнәгә эйә. Уларҙың береһе лә сәнғәт өсөн генә уйланылмаған, ә донъя ҡоролошо, йыһан төҙөлөшө, тарихи үткән һәм киләсәккә тормош тураһында ниҙер һөйләй, нимәгәлер иғтибарҙы йүнәлтә. Был һүрәттәрҙең серенә төшөнөүҙе еңел түгел, белгестәр аңлатмалары кәрәк... Һәм иң мөһиме - быларҙың барыһы ла беҙҙең көнкүреш әйберҙәрендә, кейемдәребеҙҙә, биҙәүестәребеҙҙә сағылыш тапҡан, юғалмаған, һаҡланып ҡалған. Бына ҡайҙа ул туристарҙы шаҡ ҡатыра торған брендтар!

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Башҡортостан Республикаһы һаулыҡ һаҡлау министрлығында халыҡ медицинаһы менән шөғөлләнеү өсөн рөхсәт биреү тәртибе раҫланды. Ғөмүмән, һеҙ халыҡ табиптарына ышанаһығыҙмы, уларҙың хеҙмәтенән файҙаланаһығыҙмы?*



(Башы 1-се биттә).

***Зөлфиә СИБӘҒӘТУЛЛИНА, балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе:*** Бына әле генә бер ваҡиғаға шаһит булындым. Апайым бер нисә көн буйы ҡан баҫымын көйләй алмай аптыранды. Көн дә ауыл медпунктына укол ҡаҙатырға йөрөй, әллә ниндәй таблеткалар эсә. Бәхетенә, Өфөнән ауылға һөлөк һалыусы бер танышы ҡайтҡанын ишетеп ҡала. Ике көн һөлөк һалдырғандан һуң, ҡан баҫымы көйләнеүе тураһында хәбәр итте...

Һөлөктөң файҙаһы тураһында мин ишетеп кенә түгел, үҙем һалдырып та беләм. Бер нисә йыл рәттән Бөрйән районынан халыҡ табибы Марат ағай Ишмөхәмәтов Өфөгә килеп, таныштарын дауалап китә торғайны (ике йыл элек вафат булып ҡуйҙы, ауыр тупраҡтары еңел булһын). Уның һөлөк менән дауалауы арҡаһында күптәрҙең юғары ҡан баҫымы, варикоз, һалҡын тейҙереп өҙлөгөүҙәрҙән, остеохондроз, тире, күҙ-ҡолаҡ һәм башҡа сирҙәрҙән арыныуы, хатта бала таба алмаған ҡатын-ҡыҙҙарҙың әсә булыу бәхетенә өлгәшеүе тураһында беләм. Марат ағайҙың һөлөк тураһында һөйләгәндәрен бер ҡағыҙға яҙып та ҡуйғанмын: "Һөлөктөң тәнгә ебәргән шыйыҡсаһы составында йөҙгә яҡын матдә бар, - ти торғайны Марат ағай. - Шуларҙың 82-һенең кеше һаулығын нығытыуға булышлыҡ итеүен фән иҫбатлаған. Тағы ла бер үҙенсәлек - һөлөк ҡандың сифатын яҡшырта, онкологик сирҙәрҙән профилактик сара булып тора, кешене ябыҡтырыуға һәләтле, ауырны таҙарта, төрлө зәхмәт, рәнйеүҙән аралай. Элекке замандарҙа уҡ земство табибтары кешене сихырҙан, күҙ тейеүҙән дауалау өсөн үҙҙәре менән һөлөк йөрөткән..."

Марат Рәжәб улы үләндәрҙе лә, башҡа халыҡ медицинаһы алымдарын да яҡшы белә ине. Уның үҙебеҙҙә үҫкән үләндәр теҙмәһенән төҙөлгән бер рецебын йылына өс тапҡыр ҡулланып, организмымды таҙартып алам, уны таныштарыма ла кәңәш итәм. Уның "Халыҡ медицинаһы кәңәштәре" ("Советы народной медицины") тигән китабы иһә һәр саҡ минең ҡул аҫтында. Марат ағай "Беҙҙең организм үҙен-үҙе дауалай белә торған система ул, тик быныӊ өсөн аҙ ғына булһа ла ынтылыш эшләү кәрәк. Кеше үҙ һаулығын үҙе хәстәрләргә тейеш", тип ҡабатларға ярата ине. Гәзиттәрҙә, "Киске Өфө" гәзитендә лә, уның эскелек, тәмәке кеүек алама ғәҙәттәр, дөрөҫ туҡланмау, хәрәкәтләнмәү арҡаһында кешенең үҙ-үҙен ауырыуға һабыштырыуы тураһында мәҡәләләре күп баҫылды. Ғөмүмән, дауаханаға барып, табиптар менән һаулыҡ серҙәре тураһында рәхәтләнеп ултырып һөйләшеп булмай. Ә халыҡ табиптары иң тәүҙә йылы һүҙе, матур кәңәштәре менән дауалай. Шуға ла мин гел генә "Ниңә беҙҙең дауаханаларҙа рәсми табиптар менән бергә халыҡ табиптары ла эшләмәй икән?" тип уйлайым. Тормошҡа ашмаҫ хыялмы икән был, юғиһә?..

***Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА, шағирә, журналист:*** Рәсми рөхсәттең булыу-булмауы халыҡ табиптарына юлды бер ваҡытта ла быуып торманы. Халыҡ үҙе һынап белгән, үҙенә шифаһы тейгән имселәргә йөрөүҙән туҡтағаны юҡ әле. Минә лә ғаиләм менән күптән түгел ана шундай яҡшы даны алыҫтарға таралған халыҡ табибы менән осрашырға, танышырға тура килде. Мин уның хаҡында "Башҡортостан" гәзитенә лә яҙып сыҡҡайным. Шишмә районында йәшәүсе Рәшит Рәйес улы Мөфтәхов тигән уҙаман ул. Быуын ултыртыу, умыртҡа бағанаһын дауалау менән генә шөғөлләнмәй ул, башҡа ғәжәйеп һәләттәре лә бар. Тик Рәшит Рәйес улы махсус дауалау менән шөғөл итмәй, эшләп тә йөрөй, шунлыҡтан дауалау менән ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән кешеләр булһа, ваҡыты барҙа, үҙенең ял көндәрендә генә шөғөлләнә. Башҡортостан, Рәсәйҙән генә түгел, сит илдәрҙән дә тәғәйен уға төбәп дауаланырға киләләр һәм үҙ аяҡтарына баҫып ҡайтып китәләр. Ысын дауалаусыны шарлатандарҙан айырып торған бер сифат та бар: имсе үҙ хеҙмәттәре өсөн түләү талап итмәй, рәхмәт йөҙөнән хәләнсә үҙең белеп барыбер әжерен ҡайтараһың бит инде. Улар аҡсаға түгел, һеҙмәтә өсөн эшләй, ә шарлатандар фәҡәт такса буйынса ғына ҡабул итә. Белмәйенсә барып эләгеүҙән һаҡ булығыҙ, хәҙер ундайҙар күп булыр, моғайын.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин өс йөҙҙән ашыу кешене дәүләт наградаһы менән бүләкләне, улар араһында ун парламентарий. Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса төбәктәр палатаһы комитетының беренсе урынбаҫары, Башҡортостандан сенатор Лилиә Ғүмәрова II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" орден миҙалы менән бүләкләнде.

✔Рәсәйҙә 2018-2020 йылдарға коррупцияға ҡаршы эш итеү буйынса милли план раҫланды. Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған тейешле указ хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылып сыҡҡан. Указда Федерация Советына, Дәүләт Думаһына, Юғары судҡа, Иҫәп палатаһына, Үҙәк банкына һәм Үҙәк һайлау комиссияһына ошо милли программаны тормошҡа ашырыу буйынса кәңәштәр бар.

✔Башҡортостанда дүрт федераль трассала юл ҡатламы хәүефһеҙлек талаптарын боҙа. Был осраҡты республика прокуратураһы хеҙмәткәрҙәре тикшереү эштәре барышында асыҡланы. Атап әйткәндә, боҙоуҙар М-5 "Урал", М-7 "Волга", Р-240 "Өфө-Ырымбур", "Өфөнөң көнбайыш урау юлы" автомобиль юлдарында асыҡланған. "Федераль юл агентлығының "Урал буйы" федераль автомобиль юлдары идаралығы" етәксеһе исеменә был боҙоуҙарҙы бөтөрөү тураһында йөкләмә бирелгән.

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин сит ил паспорты биреү өсөн дәүләт пошлинаһын 3,5 меңдән 5 мең һумғаса арттырыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Милли водитель таныҡлығының яңы өлгөнөн биреү өсөн, шул иҫәптән юғалғандың йәки яраҡһыҙ булғанды алмашына, дәүләт пошлинаһы 3 мең һум тәшкил итә.

✔Башҡортостанда хәҙерге хаҡтар буйынса 2019 йылдың тәүге яртыйыллығына ваҡытынан алда яҙылыу башланды. Акция 31 августҡа тиклем бөтә почта бүлексәләрендә дауам итә. 1 сентябрҙән төп яҙылыу кампанияһы башлана һәм тариф 7 процентҡа күтәрелә. Шулай уҡ "Изгелек ағасы" хәйриә акцияһы сиктәрендә һәр кем балалар йорттары, мәктәп-интернаттары, шулай уҡ оло йәштәгеләр һәм ветерандар йорттары адрестарына мабуғат баҫмаларына яҙҙыра ала.

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

# ТАҒЫ НИҘӘР КҮРЕР ИКӘН...

## баҡсасы баштары



**Хәтерендәлер, баҡсасы дуҫ, әле яңыраҡ ҡына беҙҙе ашыктырып-йәһәтләп, баҡса участкаларыбыҙҙы хосусилаштырырға өндәнеләр, был гәмәлде еңелләштереү, тиҙләтеү һәм, ябайлаштырып, волокитанан ҡурсалау юлы - "Дача амнистияһы" уйлап таптылар хатта. Бындай "хәстәрлек"кә күнекмәгән ябай халыҡ мәлйерәп төштө: бына ығы-зығыһыҙ ғына милексе лә булдыҡ, тип ҡыуанды. Хәҙер ҡала шау-шыуынан, газлы һауанан ҡасып, баҡсабыҙҙа рәхәтләнеп эшләп, ял итеп, көн дә мунса инеп ятһаҡ та була, их!**

Тик иртәрәк ҡыуанғанбыҙ, ахыры: ул мәлдә беҙ башы-тояғыбыҙ менән дәүләт-чиновник тоҙағына төшкәнебеҙҙе белмәй инек әле. Шул уҡ ваҡытта былтыр, 2017 йылдың 29 июлендә Рәсәй президенты В.Путин тарафынан ҡул ҡуйылған "Үҙ ихтыяждары өсөн граждандарҙың баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек менән шөғөлләнеүе тураһында" яңы федераль закон барлығын да күптәребеҙ белмәгәндер, сөнки ул 2019 йылдың 1 ғинуарынан ғына көсөнә инәсәк. Дөрөҫ, был законда баҡсасы күңеленә хәүеф һалырҙай әллә нәмә лә юҡ, киреһенсә, ҡайһы берәүҙәрҙең фекеренсә, ул ошоға тиклем ойоштороу йәһәтенән туғыҙлап төрҙә атап йөрөтөлгән баҡса хужалыҡтары атамаларын ябайлаштырып, уларҙың эшмәкәрлеген тәртипкә килтерәсәк, игенә аҡсаларын йыйыуҙа асыҡлыҡ индереп, уны ҡулаҡсаһыҙ банкта асылған махсус иҫәпкә күсереү мөмкинлеге бирәсәк һ.б.

Яңы закондың атамаһынан уҡ күренеүенсә, дачаларында ял итергә яратыусылар, ергә ереген, картуф-кәбеҫтә ундырып, тир түгергә әрһеҙҙәр хәҙер маҡсаттарына һәм милек мөнәсәбәттәренә ярашлы, баҡсасылар һәм йәшелсәселәр ширҡәттәренә бүленәсәк. Йәғни, тәүгеләре биләмәләрендә нигеҙе булған капиталь төҙөләш ҡоролмалары: йорт, мунса, һарай йә иң яҡшыһы - күп ҡатлы коттедж төҙөп ултырта һәм шунда йәшәү урыны күрһәтелеп, теркәлә аласаҡ. Тик йәшелсәселәргә бындай уңайлыҡтар тәтемәйәсәк. Улар йәйге сезонға иҫәпләнгән йә ышыҡ өсөн ваҡытлыса төҙөлгән ҡоролмалар, эш ҡоралдарын ҡуйып һаҡларлыҡ будкалар менән генә сикләнәсәк. Дөрөҫ, был законға тиклем әллә ҡасан уҡ төҙөгән йорто бар, ә үҙе йәшелсәсе ширҡәте ағзаһы икән, шул йортоноң рәхәтен күрһен, әйҙә, уға бәйләнеүсе булмаясаҡ, тип вәғәҙәләй законға аңлатма биреүселәр. Ҡарап ҡарарбыҙ...

Интернетта яңы закондың баҡсасы тормошона ярайһы ғына мәшәҡәт һәм ҡатмарлыҡтар килтерәсәген фаразлауҙар ҙа байтаҡ. Закон бар икән, тимәк, уны гәмәлгә индереүгә, теүәл үтәүгә булышлыҡ итергә тейешле норматив акттар ҙа эшкә ҡушыласаҡ. Был хаҡта законда бер ни ҙә әйтелмәй, ләкин алдан күрәҙәлек ҡылырға әүәҫтәр социаль селтәргә сәстәр үрә тороплоҡ хәбәрҙәр һала башланы. Шуларҙың иң мәғәнәһеҙе - икенсе икмәгебеҙ булған картуфҡа ҡағылышлы. Йәнәһе, баҡсасы, Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 10.12 статьяһына ярашлы, үҙ баҡсаһында үҫтереп алған картуфын киләһе йыл орлоҡ сифатында ҡулланырға тейеш түгел, ә орлоҡ һатыусы махсус магазиндан барып һатып алған картуфты ғына сәсергә тейеш. Шулай итмәгән хәлдә контроллек итеүсе органдар гәйепле баҡсасыға... 500-ҙән алып 1000 һумға тиклем штраф сәпәйәсәк! Әйткәндәй, баҡсаңда үҫтергән йәшелсә-емеште лә урамға сығарып һатыу тыйыласаҡ. Бының өсөн баҡсасы шәхси эшҡыуар сифатында теркәлергә, унан ғына артып ҡалған продукцияһын сауҙа селтәренә тапшырырға һәм килеме хаҡында отчет бирергә, һалым түләргә бурыслы. Быны күптәр бер генә һүҙ менән "абсурд" тип атаны ла инде.

Тағы бер хәбәр: артабан баҡсасы бәҙрәфе өсөн дә яуап тоторға мәжбүр буласаҡ икән. Бынығын инде халыҡ үҙе лә яҡшы аңлай, бер кем дә түтәл йә алмағастар араһына алып барып ултыртмай бит ул будканы. Был "офис" баҡса биләмәһендәге башҡа ҡоролмаларҙан 8-12 метр арала һәм ундырышлы тупраҡ менән ер аҫты һыуҙарынан алыҫта урынлашырға тейешле. Ул ғына нимә, ә бына һеҙҙең бәҙрәф ниндәй төргә "эйә": "пудр-клозет"мы ул, әллә "люфт-клозет"мы? Бынығын баҡсасы 3-5 меңгә тиклем штраф түләгәс кенә төшөнөр, моғайын.

Ә бына бер баҡсасы (Краснодар өлкәһе) үҙ баҡсаһында үҫеп ултырған ағасты ҡырҡып (йә ҡороғандыр ул, йә ҡамасаулап ултырғандыр инде) енәйәт яуаплылығына тарттырылған, тип тә яҙалар әле! Һирәк йә ҡырҡырға тыйылған ағас булғандыр, күрәһең. 5-50 мең штраф түләп ҡотолһа, ярай ҙа...

Ҡый үләне лә "киммәтләнеп" киткән дәбаһа! Үҙ биләмәңдән күршегә сығып китергә уйлаһа ул тынлауһыҙ үләндәр, баҡса хужаһы тағы сығарып һаласаҡ кәмендә мең ярымын.

Утын мәсьәләһе лә уғата ҡатмарлаша. Уны күршеңдән һатып алһаң да 5 мең штраф, үҙең ҡырҡып яҡһаң да - шул уҡ сумма плюс бысҡыңды тартып аласаҡтар.

Баҡсасы халҡы яҡшы белә: унда йыйылған ҡыйһайҙан уны яғып ҡына ҡотолоп була, ләкин был бик хәүефле эш. Шуға күрә ошоға тиклем йә ямғыр һибәләп торғанда, йә көҙ ҡар күҙе төшә башлағас, унда ла ҡасып-боҫоп тигәндәй яндырып ҡотола инек. Янғындар йышайғас, сүп-сар яндырыу бөтөнләй тыйылды һәм был бик дөрөҫ тә. Тик бына сүпте ҡайҙа итергә? Уны хатта үҙ биләмәңдәге ергә күмеү ҙә штраф менән янай, шуға күрә коммуналь хеҙмәттәргә ҡараған махсус транспорт ҡына ярҙам итер итһә, тик был эште кем ойоштора һәм уға баҡсасыларҙың барыһы ла ризалашырмы?

Ҡыҫҡаһы, күңелгә шом һалырлыҡ, аптырауҙан сәстәр үрә тороплоҡ ошондай хәбәрҙәр бар халыҡ телендә лә, интернет доньяһында ла. Әммә бындайыраҡ һорау-мәсьәләләргә яуап бирған бер генә пункт та юҡ әлеге закон һәм дә санитар нормалар йыйынтығында. Фәҡәт штраф та штраф, әйтерһең дә, муйынға уралған шарф... Күрәһең, штраф һәм һалымдар менән бюджет тултырырға самалай беҙҙең чиновниктар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ПОЧТА ЙӘШНИГЕ ҺӘМ...

**Үәт бәлә. Мин йәшәгән тирәләге почта йәшниктәре берәм-берәм юғала башланы. Хатта юл аша урынлашҡан почта бүлексәһенең тышына эленгән йәшникте лә алып маташҡандар, тик ҙур ҡаҙау бирешмәгәнме, әллә сигнализация ҡабынып, угрыларҙы ҡурҡытканмы, ул йәшник ҡыйшайып эленеп тороп ҡалған.**

Мин ул почтаға фатир хаҡын түләргә йөрөйөм. Берҙән-бер генә ҡыҙыҡай эшләп ултыра унда. Сәләмемә лә, һорауыма ла яуап бирмәй. Ҡарашы ла ҡаты ғына. Тыштағы бер ҡаҙаҡта торған йәшник тә юғалғас, "Үҙегеҙ алдығыҙмы, әллә урлап киттеләрме шуны?" тип ҡыҙыҡһынғайным, "Любопытной Варваре нос оторвали", тип екерҙе. Ҡыйын булды. Йәш кенә бала оло инәйгә шулай тиһен әле. Шулай ҙа яйлап оноттом был хәлде.

Бер ай ваҡыт үткәндер, почтабыҙ ишегенә "Почта эшләмәй. Отпуск" тигән иғлан эленде. Ай үтте, әммә почта бүлеге асылманы. Алыҫтағы почтаға йөрөй башланым.

Шулай бер аҙыҡ-түлек магазинына инһәм, беҙҙең почтала эшләгән теге ҡыҙыҡай баҫып тора. Янына килеп: "Һаумыһығыҙ. Ҡасан беҙҙең почта асылыр икән?"- тип һораным. Шунда ҡыҙ илай яҙып: "Почта ябылды. Мин эшһеҙ ҡалдым", - тип яуап бирҙе. "Бошонмағыҙ, һеҙ йәш кешегә эш табылыр ул", - тип йыуатҡан булдым уны. Шунда: "Яңы эш урыныңыҙҙа кешегә ягымлыраҡ, йомшағыраҡ булығыҙ", - тип әйтергә кәрәк ине лә бит...

Шулай итеп, беҙҙең урамда "Башинформсвязь" ябылды, почта ябылды, почта йәшниктәрен алып китеп бөттөләр. "Өфө-матбуғат" киоскыһында башҡортса баҫмалар юҡ. Хәрриәт! Ҡаланың сиге лә түгел, Беренсе май урамы бит әле! Теге почталы ҡыҙыҡай эшһеҙ ҡалыуының сәбәбе лә, әлбиттә, ҡырыҫлығында түгел, оптималләштереү һылтауылыр. Бөтөн һорауҙарға ла бер яуап: аҡса юҡ!

# ...ЙӘШЕРЕН ҺӨЙӨҮ

**Телевизорҙан "Башҡортостандың 100 исеме" тигән тапшырыу бара, аҙна һайын ҡарайбыҙ. Бөгөн дә әхирәтем менән экран алдындабыҙ. Беҙгә 75-әр йәш.**

Композитор, дирижер Нариман Сабитовҡа арналған тапшырыу барышында балет бейеүсеһе Илдус Хәбиров үҙенең иҫтәлектәрен һөйләй. Шул ваҡыт әхирәтем, әҫәрләнеп: "Эх, нисек ғашиҡ инем мин был бейеүсегә йәшлегемдә!" - тине. Унан ары йырсы Салауат Аҫҡаров хәтирәләре менән бүлеште. Әхирәтем тағы: "Ах! Шундай яраттым бит мин был йырсыны!"- тип уфтанды. Уға эйәреп, мин дә йәшлектәге билдәле шәхестәребеҙ тураһында уйландым. Ә бит яҡын барырға ла ҡыйып булмаған, һоҡланып ҡарап туймаған, һәләтенә иҫебеҙ киткән хөрмәтле шәхестәребеҙ күп ине. Тотош илебеҙ халҡы ғашиҡ ине шағирҙарыбыҙға, йырсыларыбыҙға, артистарыбыҙға. Үтеп китте инде ул заман. Бөгөнгө фанаттарҙың беҙ кисергән хис-тойғолар менән бер уртаҡлығы ла юҡ. Сөнки талантлыбыҙ шундай гүзәл ине, ә уларҙы һөйөүселәр бик тыйнаҡ ине. Уларға булған хистәребеҙ әле лә үтмәгән, һаман уларҙы күреп-ишетеп, йылы тойғолар кисерәбеҙ.

Күптән түгел "Башҡорт йыры" бәйгеһендә Бөрйән һылыуы Гөлнара Вәлиева күңелдәргә үтеп инерлек итеп романс башҡарҙы. "Йәшерен һөйөү" тип атала был әҫәр. Күҙҙәрҙән йәштәр ҡойолорлоҡ, күңелдәр ҡубып күтәрелерлек булды. Икенсе юлы шул уҡ йырҙы нәҙек тауышлы ҡыҙ башҡарҙы һәм... эште боҙҙо. Матур һын, юғары тауыш, ә хистәр юҡ. Телевизорымды һүндереп уҡ ҡуйҙым. Әммә ул йырсыны гәйепләмәйем мин, "Был әле ысын һөйөү кисермәгән бала", тип аҡланым үҙемсә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда тағы ла күберәк ғаиләләр тәүге сабыйы тыуғанда 300 мең һум күләмендә түләүгә иҫәп тота ала. Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышында ғаиләлә тәүге баланың республикабыҙ биләмәһенән ситтә тыуыуы ла мөмкин тип аңлатты-лар. Бынан тыш, таныҡлыҡтың ғәмәлдәге ваҡыты 6 айҙан 9-ға тиклем арттырыла.

✓Башҡортостан Республикаһы Экология министрлығының Өфө территориаль идаралығы пляжға үтеү өсөн аҡса алыу осраҡтарын асыҡлаған. Һыу инеү урынына үтеү түләүле була алмай. Һәр кеше дөйөм ҡулланылыштағы һыу объектына инергә һәм уны бушлай шәхси һәм көнкүреш ихтыяждарында ҡулланырға хоҡуҡлы. Һыу инеү урынына үтеү өсөн аҡса алыу йәки һыу буйын рөхсәтһеҙ кәртәләү осраҡтары тураһында (347) 218-04-40, (347) 218-04-55 телефондары буйынса хәбәр итеү һорала.

✓Өфөлә Спорт һарайы алдындағы майҙанда (Р. Зорге урамы, 41) ер еләге йәрминкәләре башланды, улар көн һайын эшләйәсәк.Өфөләргә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына республикала һүтланып һәм ҡыҙарып бешкән ер еләген Шаран районының "Шаран баҡсалары" ауыл хужалығы кооперативы тәҡдим итә. Йәрминкәнең эш ваҡыты - иртәнге сәғәт 10-дан 4-кә тиклем.

✓Башҡортостанда Рәсәй ҡымызының 46 процентын етештерәләр - ул 3 мең тоннанан ашыу. Иң яҡшы оҫталарҙы асыҡлау һәм уларҙың тәжрибәһен киң таратыу өсөн 13 июлдә "Йоматау" шифаханаһында ҡымыҙ бешеүселәрҙең республика конкурсы үтә. Былтыр конкурс Дәүләкән районында уҙғарылды, ул саҡта Йоматау оҫтаһы Рушан Нәбиуллин еңеүсе булды. Ул төп бүләкте - башҡорт тоҡомло айғырҙы алды.

✓2018 йылдың 12-15 июлендә Өфө районы биләмәһендә Николаевка ауылында йәштәрҙең XXVIII "ТУРФЕСТ-2018" асыҡ республика туристик фестивале үтә. Ҡатнашыуға ғаризалар 8 июлгә тиклем ҡабул ителә. Фестивалдә республика райондары һәм ҡалаларының учреждениеларынан йәштәр, профсоюздар командалары (командала ҡатнашыусыларҙың йәше 35-тән артмаҫҡа тейеш), ҡала-район, шулай уҡ сиктәш төбәк предприятиеларының эшләүсе йәштәре ҡатнаша ала.

**✓ Йылы һыу биреүҙе туҡтатыу ремонтҡа бәйле. Ҡышын йылыла һәм йылы һыу килеп торған фатирҙа рәхәтләнеп йәшәргә теләгәндә, йәйге ремонт осоронда ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарға түҙергә лә мөмкин.**



*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# АСТАНАЛА, СӘФӘРҘӘ



**2-3 июлдә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация Астанала "Глобаль Ебәк юлы. Ебәк юлы илдәре ҡалалары мэрҙары саммиты"ның беренсе форумында ҡатнашты. Сара "Бер пояс, бер юл" инициативаһының - 5, Ҡаҙағстан баш ҡалаһының 20 йыллығына бағышланды. Форумда 60 илдән 2000-дән ашыу кеше, шул миҫәптән Ебәк юлының 11 иленән 70 мэр, 150-нән ашыу сит ил спикеры һәм модераторы ҡатнашты.**

Ике көн буйы йыйылыусылар төбәк иҡтисади партнерлығы, йәлеп ителгән илдәрҙең иҡтисади үҫеше, мәҙәни алмашыуҙарҙы нығытыу, башҡа өлкәләрҙәге бәйләнештәр, шулай уҡ тыныслыҡ булдырыуға, тотороҡло үҫешкә ярҙам итеү ысулдарын ҡараны. Шулай уҡ Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов туғандаш ҡалала заманса торлаҡ төҙәлөшө үҙенсәлектәре менән танышыу маҡсатында "Йәшел квартал" торлаҡ комплексында булды. Был Европа кимәлендәге уникаль комплекс ҡала уңайлыҡтары мнән бер рәттән ҡаланан ситтәге тормоштоң экологик таҙалығын берләштерә. Торлаҡ яһалма һыу сығанағы һәм парк зонаһы эргәһендә урынлашҡан. Квартал эсендәге барлыҡ ҡоролмалар LEED экологик һәм энергия һаҡлау төҙөлөшөнөң донъя стандартына тура килә. Төҙөлөштә энергия һаҡлаусы стеклопакеттар, юғары тиҙлектәге тауышһыҙ лифттар, "Аҡыллы йорт", биналарҙы интернет аша һаҡлау һәм видеокүҙәтеү системалары ҡулланылған. Территорияла барлыҡ социаль-көнкүреш инфраструктура объекттары бар.

Артабан Ирек Ялалов LRT - еңел рельслы транспорт проекты презентацияһында булды. Был экологик, заманса дизайнлы, юғары уңайлылыҡлы һәм хәүефһеҙ транспорт төрө урамдарҙа ла, урам-ол селтәрендә лә ҡулланыуға тәғәйенләнә. Ирек Ишмөхәмәт улы бындай проекттарҙың көнүҙәк булыуын билдәләп, шундай эстакада төҙөүгә ыңғай баһа бирҙе. Форум сиктәрендә уҙғарылған түңәрәк ҡорҙа ҡала хакимиәте башлығы Өфөнөң төп ҡаҙаныштары менән таныштырҙы. Сара барышында шулай уҡ Ирек Ялалов Астана ҡалаһы акимы Асет Исекешев менән осрашты һәм ҡаланың 20 йыллығы менән ҡотланы, төҙөлөш, транспорт, инвестициялар, төҙөкләндереү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәләрендәге артабанғы хеҙмәттәшлек мәсьәләләре буйынса фекер алышты. Шулай уҡ Ирек Ишмөхәмәт улы Үзбәкстан Республикаһының Сәмәрҡәнд ҡалаһы хакимы Фуркат Рәхимов, Һиндостандың ҡайһы бер ҡалалары мэрҙары менән осрашып, уларҙы Өфөнөң иҡтисади, сәнәғәт һәм мәҙәни ҡеүәте менән таныштырҙы, киләсәктә хеҙмәттәшлек урынлаштырыу буйынса һөйләшеүҙәр алып барҙы.Баш ҡала делегацияһы шулай уҡ "Аҡбуҙат" Башҡорт этномәҙәни берекмә активистары менән осрашты. Форум йомғаҡтары буйынса Ебәк юлы илдәренең Ҡала мэрҙары клубы, эшҡыуарҙар, журналистар, шағирҙар ассоциациялары, ҡатын-ҡыҙҙар һәм йәштәр ойошмалары платформалары булдырыу планлаштырылды.

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация 2-3 июлдә Астанала үткән "Global Silk Road" Ебәк юлы илдәре ҡалалары мэрҙарының I форумында ҡатнашыу сәбәпле, оператив кәңәшмәне уның беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов алып барҙы. Был юлы иғтибар көндәлек мәшәҡәттәргә һәм хәстәрҙәргә бүленде.**

# ҠАБАТЛАҒАНДАН...

## доға иҫкермәй

Ниһайәт, селлә башланыу менән һыу инеү миҙгеле лә асылды. Әлеге ваҡытта баш ҡалала рөхсәт ителгән 9 һыу инеү урыны - ял зонаһы бар. "2 июлгә ҡарата ҡотҡарыусылар тарафынан һыуҙа 20 кеше ҡотҡарылған, шул иҫәптән 4 бала, - тип белдерҙе Салауат Сәхи улы. - 5 кеше (3 бала) рөхсәт ителмәгән урында һыу төшкәндә ҡотҡарылды. Элек унда "Шарлауыҡ" ял зонаһы эшләнә, быйыл, ҡуртымға алыусы булмағанлыҡтан, был урын ябылды, әммә халыҡ ғәҙәт буйынса ял итергә барыбер шунда йөрөй. Тимәк, бында ла өҫтәмә ҡотҡарыу посы булдырыу мотлаҡ. Сөнки тап рөхсәт ителмәгән урында һыу инеүселәр араһында бәхетһеҙлек осраҡтары күҙәтелә. Бөгөнгә һыу ингәндә батып үлгән ике осраҡ теркәлде, икеһе лә рөхсәт ителмәгән зонала. Күп ваҡыт граждандар тыйыу билдәләренә күҙ йома йәки күрмәмешкә һалыша һәм үҙ ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя". Салауат Хөсәйенов ҡыҙыҡһыныусы хеҙмәттәргә был мәсьәлә буйынса саралар күреү, башҡа ведомстволар менән берлектә рейдтар ойоштороу, контролде көсәйтеү бурысын йөкмәтте.

Муниципалитетта әле миҙгелдә башҡарыла торған ремонт эштәре ҡыҙыу темптар менән тормошҡа ашырыла. Быйыл 549 күп фатирлы йортта капиталь ремонт яһала. Ул графикка ярашлы, милексәләрҙең төбәк операторында тупланып барған аҡсаһына башҡарыла. Әммә ремонт эштәрендә төп ике проблема бар: халыҡ коммуналь хеҙмәттәр өсөн ваҡытында түләмәй һәм бөгөнгә милексәләрҙән 2 миллиард 460 миллион һум бурысы бар. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда был һан 350 миллион һумға күберәк. "Әле киләһе йылытыу миҙгеленә әҙерләнәбеҙ. Ошондай бурыстар булғанда уның ниндәй сифат менән башҡарылыуы мөмкин? Был хаҡта халыҡҡа аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк", - тип белдерҙе Салауат Сәхи улы. Икенсе төп мәсьәлә: "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" программаһын тормошҡа ашырыу барышындағы сетерекле мәлдәр. Планлаштырылған 52 юл участкаһында ла ремонт эштәре алып барылыуға, эш төнөн дә туҡталмауға һәм юлдар мөмкин тиклем асыҡ булыуға ҡарамаҫтан, автомобилселәр яңы һалынған ҡатлам йәки юлға яңы ғына эшләнгән билдәләр өҫтөнән үтеүҙән һаман дауам итә. Уларҙы хатта тыйыу билдәләре лә, махсус бондар ҙа туҡтатмай. Һөҙөмтәлә эш сифаты юғала, юлдарҙың һәм билдәләрҙең ҡулланыу ваҡыты ҡыҫҡара. Шулай уҡ Салауат Сәхи улы юл билдәләрен эшләүҙе тиҙләтеү бурысын да ҡуйҙы һәм быны төнгө ваҡытта юл билдәләре булмауы хәрәкәтте ауырлаштырыуы менән аңлатты. Шулай уҡ эҫе ваҡытта ҙур машиналарҙың ҡалаға инеүен һәм уларҙың күпер ҡоролмалары аша үтеүен сикләү зарурлығын белдерҙе. Атап үтелгән программа сиктәрендә юлдарҙа, бигерәк тә ҡатмарлы участкаларҙа, транспорт ағымы көслө булған ерҙәрҙә тиҙлек режимын иҫкәртеү маҡсатында өҫтәмә рәүештә 21 видеокамера ҡуйыласаҡ. Уларҙағы мәғлүмәттәр ЮХХДИның махсус хеҙмәттәренә тапшырыласаҡ.

Кәңәшмәлә ҡаралған төп мәсьәләләрҙең береһе булып уҙған йылытыу миҙгеленә йомғаҡ яһау һәм алдағыһына бурыстар билдәләү торҙо. Дөйөм алғанда, миҙгел уңышлы тамамланған һәм әлеге ваҡытта яңы миҙгелгә әҙерлек эштәре бара. Селлә ваҡытында йылы һыу биреүҙе туҡтатыу ремонтҡа бәйле һәм ул алдан билдәләнгән графикка ярашлы башҡарыла. Әлбиттә, граждандарҙың ҡәнәғәтһеҙлеген дә аңларға мөмкин, әммә ҡышын йылыла һәм йылы һыу килеп торған фатирҙа рәхәтләнеп йәшәргә теләгәндә, йәйге ремонт осоронда ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарға түҙергә лә мөмкин. Бер рәхәттең бер михнәте ошо булалыр инде, күрәһең. Был йәһәттән Салауат Хөсәйенов йылы һыуҙы туҡтатыу нормативтарын үтәүҙе, ә инде ремонт эштәрен башҡарғандан һуң участкаларҙы төҙөкләндереүҙе лә онотмаҫҡа кәрәклеген тағы бер тапҡыр иҫкәртте.

"Өфөводоканал" МУП-ы генераль директоры Ильяс Ғилмитдиновтың сығышы предприятиеның ҡала халҡын һыу менән тәьмин итеүҙең сифатын һәм ышансылылығын күтәреү буйынса алып барылған эшмәкәрлегенә арналды. Артабан сығыш яһаусы "Башҡортостан Республикаһы буйынса федераль янғынға ҡаршы хеҙмәттең 22-се отряды" ФГКУ отряды начальнигы Ришат Мансуровтың сығышы ла һыуҙың тормошобоҙҙа ҙур урын алып тороуына тағы бер ишараланы. Мәҫәлән, йыл башынан баш ҡалала 335 янғын сыҡһа, шуларҙың 245-е янғынға ҡаршы һыу менән тәьмин итеү сығанаҡтарын ҡулланып һүндерелгән. Йәғни ҡалала һыу селтәрҙәре, шул иҫәптән гидранттар ни тиклем тармаҡлы һәм күберәк, шул тиклем һәйбәтерәк. Шуға ла Салауат Сәхи улы сығышты йомғаҡлап, һыуһыҙ районда һәм юлдаш-ҡасабаларҙа этаплап янғын пирстары төҙөү мөмкинлеген асыҡларға, предприятие һәм учреждениелар территорияларында булған урам гидранттарының торошон күҙәтеүҙе көсәйтергә ҡушты.

Тәү ҡарашҡа оперативкала күтәрелгән мәсьәләләр аҙнанан-аҙнаға, йылдан-йылға күсеп килгән һәм күтәрелгән бер үк көндәлек проблемалар кеүек. Ирекһеҙҙән, шундай бер хәҡиҡәт иҫкә төшә: бер ауылда (ҡалала) дин әһеле йыйылған халыҡҡа аҙна һайын бер үк вәғәҙе һөйләй икән. Күпмелер ваҡыттан һуң бер кеше түҙмәгән: "Килгән һайын бер үк нәмәне һөйләйһегеҙ, ялҡытты инде. Икенсе нәмә тураһында һөйләгеҙ", - тип ҡәнәғәтһеҙлек белдергән. Дин әһеле уға: "Мин һөйләгәндәрҙе берәйегеҙ булһа ла үтәнә, икенсе нәмәләр тураһында һөйләрмен", - тип яуап биргән. Оперативкала күтәрелгән күп мәсьәләләр уны тормошҡа ашырыусыларға ғына түгел, күпселектә беҙгә, ябай граждандарға ҡағыла: тапама, урлама, ватма, емермә, зыян итмә һ.б. Барыбыҙ ҙа ҡуйылған талаптарҙы үтәһәк ине лә, бәлки, ҡала хакимиәтендә лә иғтибар күберәк икенсе юҫыҡҡа йүнәлтелер ине...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓27-29 июлдә Учалы районының Баҡшай яланында икенсе тапҡырға "Ай, Уралым, Уралым" этно-фестивале ойошторола. Асыҡ һауала үткәреләсәк фестиваль программаһына милли кейем тегеүселәрҙең конкурс-дефилеһы, фольклор коллективтары сығышы, оҫталыҡ дәрестәре, спорт ярыштары, милли уйындар, "Баҡшай мәргәне-2018" бәйгеһе ингән.

✓ Башҡортостан буйынса "Рәсәй Ҡыҙыл Тәреһе" дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы янғында зыян күргәндәргә аҙыҡ-түлек йыйылмаһы, гигиена кәрәк-яраҡтары, урын-ер әйберҙәре формаһында гуманитар ярҙам күрһәтеүен дауам итә. Гуманитар ярҙамды Өфөләге Карл Маркс урамы, 53 адресы буйынса урынлашҡан "Ҡыҙыл Тәре" офисында алырға була. Өҫтәмә һорауҙарҙы (347) 251-64-11 телефоны буйынса бирергә йәки redcrossufa @bk.ru электрон почтаға юлларға мөмкин.

✓Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһы төбәк бүлексәһенең конференцияһы уҙҙы, унда партия ағзалары Башҡортостандың алтынсы саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауға үҙ кандидатураларын тәҡдим итте. Берҙәм һайлау округы буйынса дөйөм республика исемлеген төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкләй. Шулай уҡ тәүге өсәүгә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаты Оксана Савченко һәм Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ингән.

✓Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы ҡумаҡ халыҡ ял иткән һәм һыу ингән урындарҙа һыуҙың сифатын күҙәтеүҙе дауам итә. Миҙгел башынан бөтәһе 75 мониторинг урынынан алынған 257 һыу пробаһында санитар-химик, микробиологик, паразитологик һәм вирусологик күрһәткестәр тикшерелгән. Патоген һәм шартлы патоген микроорганизмдар асыҡланмаған, тип белдерҙеләр ведомствола. Йылға-күлдәрҙәге һыуҙың һәм тупраҡтың сифатын лаборатор күҙәтеү дауам итә.

✓Лондондағы Forest Lane паркында 200-ҙән ашыу башҡорт һәм татар мәҙәниәтен үҙ итеүселәр традицион һабантуйға йыйылды. Лондонда милли байрамды "Заман" Бөйөк Британия татарҙары һәм башҡорттары ассоциацияһының инициативалы ағзалары быны инде бер нисә йыл рәттән уҙғара.

**✓ *Йылытыу 2057,45 һумға ҡәҙәр ҡимmәтләнә, ул алдағынан 79,13 һумға күберәк. Электр плиталары булған йорттар өсөн электрға киловатт өсөн - 2,11 һум; электр плиталары булмаған йорттарға киловатт хаҡы 3,01 һумғаса артҡан.***



БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Бөтә яҡлап та алға киткән илдәрҙә генә ҡулланыусылар йәмғиәте үҫешә, Рәсәйҙә был процесс яй бара, ти белгестәр. Ҡулланыусылар йәмғиәтендә ваҡлап һатыу итеү нөктәләре урынына ҙур супермаркеттар барлыҡҡа килеүе, кешеләрҙең әйберҙе кәрәк булған өсөн түгел, ә "күңел өсөн" күпләп һатып алыуы, буш ваҡытта ял итеү өсөн магазиндарға сығып йөрөү ғәҙәте хас, тип яҙыла. Был күренеш беҙҙең өсөн ят та тойолмай кеүек бит хәҙер, ниҙер етештереү урынына һатып алып ҡуйыуҙы хуп күрәбеҙ. Ыҙалап һыйыр көткәнсе, әҙер май-ҡаймағын алам, тип фекер йөрөтә күптәр. Ҡулланыусылар яҡшы үҫешкән илдә генә йәшәй ала, тип уйлап, сеймал сығанағы сифатында тороп ҡалмаҫбыҙмы бер мәл? Ошо турала борсолоп уйланып йөрөгән мәлдә, "Бирәм тиһә ҡолона - сығарып ҡуя юлына", тигәндәй, Башҡорт дәүләт аграр университетының сығарылыш йылы студенты Дилә НАЗЫРБАЕВА менән әңгәмәләшергә тура килде. Вуздың "Аҙыҡ технологиялары" факультетында белем алған йәш белгес менән һөт аҙыҡтарын етештереүселәр, ҡулланыусылар һәм юғары уҡыу йорто хаҡында ла әңгәмәләштек.**

# БЫЛ УҠЫУ ЙОРТОНДА...

## ауыл хужалығын һаҡлау тураһында ғәм һалалар



➔ **Башҡорт дәүләт аграр университеты тураһында кемдән белеп, ни өсөн тап ошо йүнәлештәге факультетҡа уҡырға инергә булдың?**

- Башҡорт дәүләт аграр университеты тураһында атайым әйтеп, документтарымды ошонда тапшырырға булдым. Ул үҙе лә ошо вузға уҡырға ингән булған, ләкин әрме хеҙмәтен үтәргә киткәндән һуң, кире уҡып бөтөргә мөмкинлек тапмаған. Шуға ла минә, уҡырға ин, мотлаҡ юғары уҡыу йортон тамамла, тип алып килде. Тәүҙә вуздың иҡтисад бүлегенә уҡырға ингәйнем, һуңынан "Аҙыҡ-түлек технологиялары" тигән факультетҡа күсеп, быйыл бына бакалавр дипломын алам. Һөнәр алыштырыуымдың сәбәбе шунда: һөт продукциялары етештереүҙең төбөнә төшөнгөм килде. Ҡалала тыуып үҫкәс, мин был өлкәлә бер нәмә лә белмәй инем, шуға ҡыҙыҡ тойолдо. Үҙем дә һөттән яһалған ашамлыҡтарҙы бик яратам. Бынан тыш, иҡтисадсы һөнәрен үҙләштереүселәр былай ҙа күп, ә инженер-технологтарға бөтә ерҙә ҡытлыҡ.

"Аҙыҡ-түлек технологиялары" факультетына уҡырға инеү өсөн химия фәнен яҡшы белергә кәрәк, сөнки уҡып бөткәнсе ул кәрәк була. Дөйөм алғанда, бер дәресте лә ҡалдырмай, ҡушылған эштәрҙе ваҡытында үтәп барһаң, Башҡорт дәүләт аграр университетында уҡыуҙың бер ҡыйынлығын да тоймайһың. Әгәр ҙә инде йыр-бейеүгә әүәҫ булһаң, йәки берәй спорт төрө менән шөғөлләнһәң, бигерәк тә яҡшы. Уҡыуҙан тыш үҙен әүҙем күрһәткән студенттарға университет юғары стипендия түләй, ул минималь эш хаҡынан да күберәк килеп сыға. Мин баскетбол буйынса ярыштарҙа университет намыҫын яҡлайым. Тағы ла яҡшы өлгәшкән студенттарҙы университет менән килешеү төҙөгән сит ил юғары уҡыу йорттарына, ҙур хужалыҡтарға тәжрибә тупларға, эшкә өйрәнергә ебәрәләр. Мәҫәлән, минең ике төркөмдәшем ярты йылға Германияға барып ҡайтты, Америка һәм Ҡаҙағстанға ла барырға була. Үзбәкстан, Тажикстан, Нигерия илдәренән йәштәр белем ала.

Эшкә алыусыларҙың, хәҙерге йәш белгестәргә вуздарҙа практик белем етерлек бирелмәй, тип һанауын, эшкә төшкәндә тәжрибә талап ителеүен беләм. Был йәһәттән мин уҡыған бүлектә зарланырлыҡ түгел, ике йыл дауамында берәр ай республиканың һөт продукциялары етештереүсе заводтарында эшләйбеҙ. Мин Белорет май-сыр комбинатында практика үттем, магистр дипломын алғас, эшкә килергә лә саҡырҙылар. Төркөмдәштәрем Туймазы һәм Саҡмағош һөт заводтары, Стәрлетамаҡ һөт комбинаты, Мәләүез һөт-консерва комбинаты, Белорет май-сыр комбинаты, Ҡарлыман һөт-консерва заводында тәжрибә туплаңы. Өфө, Ҡырмыҫҡалы һөт продукциялары эшкәртелгән заводтарға экскурсияларға йөрөп, яңы ҡоролмалар менән танышып, эш айышына төшөнөп, буласаҡ коллегаларыбыҙ менән аралашып торабыҙ.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ҠЫҪҠАСА

# ӘЙ, ХАҠТАР, ХАҠТАР...

✓ **Башҡортостанда, бөтә илдәге кеүек, 1 июлдән торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә тарифтар арта.** Республикала йәшәүселәрҙең был өлкәгә сығымдары уртаса 5,9 процентҡа күтәрелеүе билдәле инде. Һыуыҡ һыу тәьминәте хеҙмәттәре өсөн кубометрға 23,77 һум урынына 25 һум (1,23 һумға күберәк) түләргә тура килә, һыу тараҡыс өсөн хеҙмәт хаҡы 23,82 һумдан 29,78 һумғаса (5,96 һумға күберәк) күтәрелә. Йылытыу 2057,45 һумға ҡәҙәр ҡимmәтләнә, ул алдағынан 79,13 һумға күберәк. Электр плиталары булған йорттар өсөн электрға киловатт өсөн 2,01 һум урынына - 2,11 һум; электр плиталары булмаған йорттарға киловатт хаҡы 2,87-дән 3,01 һумғаса артҡан.

✓ **Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн компенсация түләүҙәре күләме индексациялана, тип хәбәр итә Башҡортостан Хеҙмәт министрлығы.** Әле 810 мең кеше торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә социаль ярҙам саралары ала. Былтыр компенсацияны түләүгә ике кимәлдәге бюджеттан 7,810 миллиард һум бүленгән. Ағымдағы йылдың беренсе кварталында - 1,957 миллиард һум. Ярҙам саралары алыусылар иҫәбенән һәм түләнгән аҡса күләменән сығып иҫәпләгәндә, республикала уртаса түләү күләме артҡан килә сыға. Атап әйткәндә, 2016 йылда бер ғаиләгә уртаса пособие күләме айына 2053,67 һум булған, ә 2018 йылдың 1 майына ул 2197,88 һумға еткән. Тарифтар күтәрелер алдынан 2018 йылдың 1 июленән түләүҙәр күләме ҡануниәткә ярашлы индексацияланған. Әлеге ваҡытта айырым граждандар категорияларына торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәре сығымдарына бер нисә компенсация төрө бар.

✓ **1 июлдән Рәсәйҙә торлаҡ һатыуҙың яңы схемаһы эшләй башлай.** Граждандар аҡсаһын туранан-тура төҙөүсегә түгел, ә банк аша бирә ала. Аҡсаларҙы махсус иҫәпкә йүнәлтәләр һәм уны төҙөлөш тамамланғансы "туңдыралар". Девелоперҙар проект хаҡынан 85 процентҡа тиклем күләмдә кредит ала, шул уҡ ваҡытта өлөшләтә ҡатнашыу килешеүҙәре буйынса фатирҙар һата. Төҙөлөш тамамланғас, төҙөүсе өлөшсөләрҙең аҡсаһын ала йәки уның менән банктан алған бурысын ҡаплай. Был механизм Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса өлөшләтә төҙөлөштән баш тартыу сиктәрендә әҙерләнгән. Күсмә осорға өс йыл бүленгән. 2018 йылдың 1 июленән уҡ девелоперҙар банк оҙатыуына ирекле күсә ала. Белгестәр фатирҙар алдағы йыл ярымда 10-15 процентҡа ҡимmәтләнер, ә төҙөүселәрҙең кәмендә яртыһы баҙарҙан китер тип иҫәпләй.

✓ **Киләһе йылда пенсияның уртаса күләме 15,4 мең һумға етә.** РФ Хеҙмәт министрлығы етәксеһе Максим Топилин "Известия" гәзитенә биргән интервьюһында ошо хаҡта хәбәр итте. 2019 йылда эшләмәгән пенсионерҙың пенсияһына өҫтәмә айына яҡынса мең һум йәки йылына 12 мең һум тәшкил итергә тейеш. Ағымдағы йылдың аҙағына, Топилин һүҙҙәренсә, пенсияларҙың күләме 14 мең 414 һумға тиклем арта. "Әгәр бер ни ҙә эшләмәһәк, пенсия системаһы параметрҙарын үҙгәртмәһәк, пенсия йәшен арттырмаһаҡ, пенсия системаһының федераль ҡаҙнанан алынған страховка иғәнәләре һәм трансферттар иҫәбенә ресурстары һәм мөмкинлектәре юҡ, шуға күрә эксперттар, төрлө профессиональ төркөмдәр тикшергән ҡарарҙы ҡабул иттек. Был - берҙән-бер сығыу юлы". Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн пенсия йәшен һигеҙ йылға оҙайтыуҙары хаҡында һөйләгәндә, Максим Топилин бының ҡатын-ҡыҙҙарҙың оҙаҡ йәшәүе менән бәйле булыуын аңлатты.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Стенокардия

❖ Тигеҙ күләмдә лаванда сәскәһе, розмарин япрағы, рута һәм һары умырзая үләнен алып, 1 балғалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан эҫе һыу ҡойоп, һыуынғансы тәнәтергә. Һөҙөргә һәм иртән ас ҡарынға, кисен йоҡлар алдынан эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

### Нервылар өсөн

❖ 1 л һыуға 60 г кипкән йәки 200-300 г әле генә өҙөлгән лаванда сәскәләре һәм япраҡтарын һалып, 10 минут ҡайнатырға, һөҙмәйенсә йылы һыулы ваннаға өҫтәргә һәм 10 минут ятырға. Көн һайын хәл яҡшырғансы дауам итергә.

### Артрит

❖ Артрит аҙып китмәһен өсөн 1,5 стакан эҫе һыуҙы 5 г ваҡланған лавр япраҡтарына ҡойорға, 5 минут талғын утта ҡайнатырға, термоста 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көн дауамында йотомлап эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләп, 3 көн дауаланырға. Йылан саҡҡанда лавр япрағын сәйнәп яраға һалалар. Лавр япрағы төнәтмәһе менән сәсте сайҡаталар.

### Һаҙ еләге

❖ Һаҙ еләге (морошка) тире яман шеше үҫешен туҡтата. Еләкте ашарға, һытып тирегә һөртөргә кәрәк. Һаҙ еләгенән һут та эшләйҙәр: еләкте иләктән үткәреп, 2 өлөш һутҡа 1 өлөш шәкәр ҡушырға.

### Пиодермия

❖ Пиодермия - тиренең эренле шеше. Тигеҙ күләмдәге медицина спирты менән иҙелгән һарымһаҡты яраға һыларға, марля менән бәйләргә. Тәүлегенә 2-3 тапҡыр алыштырырға. Һауыҡҡансы дауаланырға.

### Бешеү

❖ Бешкән тирелә ҡалған әҙҙе түбәндәгеcә дауалайҙар. 3 кишер һабағына кистән 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, иртән һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 10 көн. Бынан тыш, йәрәхәтләнгән урындарға ошо уҡ төнәтмә менән компресс эшләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

### Яҡуптың яҙмышы

Төндә юлға сыҡҡан Яҡуп бара торғас арый һәм баш аҫтына таш һалып, йоҡларға ята. Төшөндә ул ер менән күк араһында һыҙылып юл асылыуын, фәрештәләрҙең шул юл аша берсә ергә төшөп, берсә күккә күтәрелеп йөрөүҙәрен күрә.

Алла уға: "Һинә һәм нәҫел-ырыуыңа фатихамды бирәм. Был ерҙәр һинеке буласаҡ һәм һинән һуң да уға вариҫтарың хужа буласаҡ", - ти. Яҡуп уянғас, матур төш күреүенә бик ҡыуана һәм имен-аман әйләнеп ҡайтһа, был ергә ҡорам төҙөргә һәм булған мөлкәтенең ун өлөшөн Алла юлында тотонорға ант итә. Ул таштка май һөртөп, билдә ҡуя һәм был ерҙе Алла Йорто тип атай. Хәҙерге Иерусалим ҡалаһы тап шул ерҙә ҡалҡып сыға.

Яҡуп Харранда йөшәүсе ағаһына килгәс, уға Рәхилә исемле төҫкә һылыу төпсөк ҡыҙын кәләш итеп алырға теләүен әйтә. Ағаһы 7 йыл һарыҡ көтһән, ҡыҙымды бирәм, ти. Яҡуп 7 йыл һарыҡ көтә, ләкин ағаһы уны алдай. Төҙә оло ҡыҙ кейәүгә сығырға теләйеш, тип, Рәхилә урынына көслөк менән төҫкә йәмһеҙ оло ҡыҙы Лияны бирә. Шулай ҙа Яҡуп тағы ла 7 йыл һарыҡ көтөп, Рәхиләне ала һәм ике ҡатынынан да бик күп балалары тыуа. Ул Харранда 20 йыл йәшәй. Атаһын бик һағына һәм тыуған яғына ҡайтырға Лабандан рөхсәт һорай. Аллаһы Тәғәлә Яҡупка атаһы еренә ҡайтырға ҡуша һәм ауырлыҡтар тыуһа, ярҙам итергә вәғәҙә итә. Яҡуп ғаиләһен алып юлға сыҡҡас, бер аҙҙан Айсу ағаһына алдан хәбәрселәрен ебәрә. Ағаһының көнсөллөгө арҡаһында сит-ят ерҙәргә йәшәргә китһә лә, уның менән ярашҡыһы килә. Хәбәрселәре әйләнеп килеп, Айсуҙың 400 кеше менән уға ҡаршы сығыуын хәбәр иткәс, Яҡуптың күңелен ҡурҡыу баҫа һәм Алланан, ярҙам ит, тип, вәғәҙәһен үтәүен һорай. Үҙе Айсуға бүләккә ҙур һарыҡ көтөүен әҙерләй. Айсу ҡустыһын күргәс, 7 тапҡыр ергә ятып сәләмләй һәм уны ҡосаҡлап илай. Оҙаҡ йылдар үткәс, туғандар шулай итеп яраша. Юлда Яҡуп ҡалдырған таш урынында ҡалҡып сыҡҡан Иерусалим ҡалаһы янында Яҡуп Шахаим ерен һатып ала һәм уға Алла Йорто тигән исем бирә, данлыҡлы Әл-Акса мәсетен төҙөй. Рәхилә тағы бер ир баланан һуң донъя ҡуйғас, уны Афратта (хәҙерге Вифлеем) ерләй. Рәхилә ҡәбере унда әле лә бар.

### Йософ тарихы

Ибн Касир раҫлауынса, Яҡуптың израилдәр быуынын барлыҡҡа килтергән ун ике улы булған. Ҡайһы бер ғалимдар Яҡуптың улдарынан Йософ ҡына бәйғәмбәр булған тиһә, икенселәре бөтөн улдары ла бәйғәмбәр булып, израилдәрҙең нәҫел-нәсәбен башлап ебәргән, тип иҫәпләй.

"Йософ атаһына: "Төшөмдә 11 йондоҙҙо, Ҡояшты, Айҙы күрҙем һәм уларҙың барыһы ла ҡаршымда тубыҡланып миңә баш эйҙе", - тип һөйләгәс, атаһы: "Эй, улым! Был төшөңдө ағайҙарыңа һөйләй күрмә, югиһә, Шайтан уларҙы һиңә ҡаршы ҡотортоп, көнләштереп, берәй хаслыҡ ҡылып ҡуйыуҙары бар. Шайтан - кешенең иң яман дошманы. Төшөңдә үҙеңде данлыҡлы, барыһы ла һиңә буйһонор абруйлы хаким итеп күргәнһең икән, тимәк, Алла һине һайлап алыр һәм һиңә дан, абруй килтерер бындай төштәрҙең мәғәнәһен юрарға өйрәтер. Һәм олатайҙарың Ибраһим менән Исхаҡҡа хөрмәт күрһәтеп, уларҙы бәйғәмбәр иткән кеүек, Алла һине лә бәйғәмбәр итеп, кешеләр өсөн саҡырыу биреп, нәҫелеңә хөрмәт күрһәтеүен тамамлар. Алланың аҡылы сикһеҙ һәм эштәре изге, Уның ғилеме тәрән. Ул ҡолдары араһынан иң лайыҡлыларҙы ғына һайлай", - тип аңлата.

Яҡуптың улына төшөн ағайҙарына һөйләмәҫкә, сер итеп тоторға ҡушыуында ла мәғәнә бар. Ҡайһы бер хәҙистәрҙә, уйыңды серҙә тота белеү мораҙыңа ирешергә ярҙам итә, тиелә. Сер тотоу яҡшы, сөнки даланлы кешенән башҡалар һәр саҡ көнләшә. Йософтың ағалары ла атайҙарының уны үҙҙәренә ҡарағанда ныҡ яратыуынан көнләшеп, уны үлтерергә йәки өйгә ҡайтып етә алмаҫлыҡ алыҫ ергә олаҡтырмаҡсы булалар. Улар Яҡуптың үҙҙәрен генә яратыуын теләйҙәр.

(Дауамы бар).

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЫЛ УҠЫУ ЙОРТОНДА...

## ауыл хужалығын һаҡлау тураһында ғәм һалалар

(Башы 5-се биттә).

**➔ Вузда һөт аҙыҡтары теорияһын ғына өйрәнәһегеҙме, әллә практик дәрестәр ҙә буламы?**

- Беҙҙә лекцияларҙын тыш практик һәм лаборатор дәрестәр ҙә үткәрелә. Лекцияларҙа теорияһын өйрәтәләр, ә практик дәрес ваҡытында үҙебеҙ һөт продукттарын эшләп ҡарайбыҙ. Мәҫәлән, сыр, йогурт, туңдырма эшләп ҡарағаныбыҙ булды. Әле квалификация имтиханын тапшырғанда туңдырма эшләп күрһәттек. Уны әҙерләү өсөн миксер, фризер аппараттары, һыуыткыс, кәстрүл һәм кәрәкле ингредиенттар булыуы шарт. "Һөт һәм һөт продукциялары технологияһы" тигән предметтың практик дәресе ваҡытында лаборатор бүлмәнән һөт бирәләр, шуны пастеризациялайбыҙ, һарҡытып һөҙөбеҙ һәм ул гомогнезация процесын үтә, йәғни ике градусҡа тиклем һыуытыла һәм әҙер булғансы яй ғына болғап торола. Туңдырманы әҙерләү дүрт сәғәттән ун ике сәғәткә тиклем барырға мөмкин. Һуңынан тәмләткес өсөн шоколад, емеш-еләк ҡушып, матур итеп биҙәп ҡуйбыҙ. Беҙ туңдырманы ғәҙәттә, дүрт дәрес дауамында эшләйбеҙ, уҡытыусыларыбыҙ ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Светлана Канарейкина, техник фәндәр кандидаты Лилиә Ибәтуллина, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Фәнүс Ғафаров барыһын да ентекле өйрәтә, продукцияның химик составын, һелтеләлеген билдәләргә, тикшереүҙәр үткәрергә лә беләбеҙ. Бынан тыш, Башҡорт дәүләт аграр университетының Сыр цехы бар, шунда ла студенттарға буласаҡ һөнәрҙәренең айышына төшөнөргә, оҫтарырға мөмкинлек бар.

**➔ Бөгөн магазиндарҙа һатылған һөт продукцияларының сифатына ла байҡау яһайһығыҙмы дәрестәрҙә?**

- Эйе, дәрестәрҙә генә түгел, үҙем ҡулланырға алғанда ла иғтибар итергә күнеккәнмен. Башҡортостанда етештерелгән һөт продукттарының сифаты яҡшы ғына, етештереүселәр бөтә талаптарға ла яуап бирергә тырыша. Ғөмүмән алғанда, етештереү цехы ҙур заводтар етештергән продукттар сифатлы була. Сөнки бөтә илдә билдәлелек яулаған, сит илгә лә продукцияларын сығарып һатҡан заводтар үҙҙәренең абруйы тураһында ныҡ хәстәрлек күрә, улар сифатҡа ныҡ иғтибар итә. Ҡулланыусыларҙың хоҡуктарын яҡлау өлкәһе хеҙмәттәре лә уларҙы йыш тикшереп тора. Һатып алыусыға продукцияның сығарылған көнө ниндәй булыуға иғтибар итергә кәрәк. Мәҫәлән, һөт ете көн һаҡланырға мөмкин, ультрапастеризацияланған һөт ярты йыл һаҡлана, тиҙәр инде, әммә ул күп тапҡыр эшкәртелгәс, файҙаһы ҡалмайҙыр, тип уйлайым.

**➔ Һинең ҡарамаҡҡа, бөгөн ауыл хужалығы өлкәһендә хәл ителергә тейеш иң мөһим проблема ниндәй?**

- Республиканың һөт продукциялары етештереүсе заводтарын барып күргәнем булғас, үҙем практика ла үткәс, беләм: һәр өлкәлә лә юғары белемле белгестәр етешмәй. Ауыл ерендә лә халыҡ һаны кәмей, бөтәһе лә ҡала шарттарында йәшәргә теләй, ауыл хужалығы өлкәһендә эшләргә теләүселәр һирәк. Шуға Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттарының төп бурысы - ауыл хужалығын яңынан аяҡҡа баҫтырыу булырға тейеш. Был йәһәттән, мин бер уңышыма шатмын - Белорет май-сыр комбинатында практика үткәндән һуң мине унда эшкә саҡырҙылар, шуға диплом эшем дә ошо заводҡа бағышланған. "Һөт продукциялары ассортиментын төрләндереү ниәтендә Белорет май-сыр заводын яңыртыу" тип атала фәнни тикшеренеү эшем һәм айран, ҡатыҡ, сей ҡатыҡ етештереүҙе яйға һалырға тәҡдим итәм. Был проектым тормошҡа ашһын өсөн биш йыл кәрәк буласаҡ, шулай ҙа ниндәйҙер эштәр эшләнһә, бик яҡшы булыр ине, сөнки республикабыҙҙың төрлө ҡалаларында урынлашҡан һөт заводтары иғтибарға мохтаж. Бынан тыш, һөт продукцияларын етештереүгә




ҡағылышлы хәл ителәһе мәсьәләнең берене - производство өсөн һөт һатып алыу, сеймал йыйыуҙы яйға һалыу. Әлеге лә баяғы шул Белорет май-сыр комбинатына Белорет, Әбйәлил, Учалы райондарынан йыйылған һөт әҙ, производствоны киңәйтеү өсөн сеймал да күберәк талап ителәсәк, ә ауыл ерендә фермалар ғына түгел, мал көтөүсе шәхси хужалыҡтар ҙа һирәгәйҙе. Башҡорт халҡының һөттән эшләнгән милли ризыҡтарын етештереү технологияһын да өйрәнеп ҡалырға кәрәк, уны белгән оло быуын кешеләре һирәгәйгәс, был да проблемаға әйләнеп бара хәҙер...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт дәүләт аграр университетында студенттарға белем биреү генә түгел, республикаың ауыл хужалығы өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе хәстәрләү тураһында ла ғәм һалалар икән. Бөгөн был вуз Башҡортостанға инженер-технологтарҙан тыш, мал табибы, агроном, урман хужалығы эшселәре, механизаторҙар һәм башҡа бик файҙалы һәм мөһим һөнәр эйәләрен әҙерләй. Йәш белгестәрҙең ауыл хужалығы өлкәһендәге көнүҙәк проблемаларға ҡарата битараф булмауы, уларҙы хәл итеү өсөн тырышып белем алыуы, тәжрибә туплауы маҡтауға лайыҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ



# БЕҘҘЕҢ БЫУЫНҒА...

## ауырлыҡ күп төштө

**Миңә 89 йәш. Ил-йортобоҙҙа барған хәлдәргә ҡарайым да, ирекһеҙҙән, үҙебеҙ йәшәгән осорҙо иҫләп алам. Көнө-төнө колхозға бушлай эшләнек. Хатта иркенләп бала бағып ултырырға ла бирмәнеләр - бушанып, 70 көн үтәме-юкмы, эшкә сығырға ҡушалар ине. Балалар баҡсаһы тигән нәмәне лә ғүмерҙә лә күрмәнек. Сәңгелдәктәге сабыйҙың ауыҙына иҙелгән икмәкле марля ҡаптыраһың да эшкә йүгерәһең...**

Хәҙерге ҡатын-ҡыҙҙарға барыбер ҙә анһат: 3 йыл декрет ялында, өйҙә ултыра. Әле күп бала тип иҫәпләнгән 3 бөртөк кенә булманы бит беҙҙәкеләр: бишәү-алтау, унан ары унауһы ла артыҡ түгел ине, шөкөр. Хоҙай күпме биргән - шунса таптыҡ, бер ҙә аборт тип йүгермәнек. Ниндәйҙер ташламалар булмауға ла ҡарамаҫтан. Әле бына өс бала үҫтергәндәргә льготалы пенсия түләй хөкүмәт, башҡа төрлө льгота-мәҙәрҙәр ҙа бар, тиҙәр.

Бына шулай, беҙ, ауыр тормош кисергән өлкән быуын, бәләкәй генә пенсияға ҡарап тороп ҡалдыҡ. Уның да уңлы-һуллы тартып алыу яғын ғына ҡарап торалар. Әле бына социаль хеҙмәткәргә килеп иҙән йыуған өсөн 250 һум түләй инек, март айынан 310 һумға күтәреп ҡуйҙылар. Ни өсөн? Беҙҙең иҙәндәребеҙҙең майҙаны "үҫеп" киткәнме икән әллә? Беҙҙең быуын, тыл һәм хеҙмәт ветерандары, фашистарҙы еңгәс, илде аяҡҡа баҫты-

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Башҡорт халҡы борон-борондан Уралдың төрлө мәғдән һәм аҫылташтарға бай булғанын белгән һәм Рәсәйгә ҡушылмаҫ борон уҡ, йәғни бында тәүге тау заводтары барлыҡҡа килгәнгә тиклем уҡ мәғдәнселек кәсебе менән әүҙем шөғөлләнгән. Башҡорттар Уралдың ҡайһы төбәгендә ниндәй мәғдән ятҡылығы барлығын яҡшы белгән һәм һәр яҡлап уларҙы файҙаланған.**

# БАШҠОРТТАРҘА...

## мәғдәнселек кәсебе

Мәҫәлән, борон Яйыҡ буйындағы Әтәс тауы (хәҙер унда Магнитогорск ҡалаһы урынлашҡан) башҡорттарға килгән яуҙарҙы ҡайтарырға ярҙам иткән. Был тауҙа тимер мәғдәне ятҡылығы булған, тимер булған ерҙә магнит тәьҫире көслө була. Ошоно яҡшы белгән башҡорттар дошмандарға ҡаршы һуғышта бик оҫта файҙаланған. Яу килә ҡалһа, башҡорттар уларға ҡаршы дағаһыҙ аттар менән сыҡҡандар һәм сигенгән булып, дошманды Әтәс тауына йәлеп иткәндәр. Башҡорттар еңелде, тип йән-фарман сабып килеп еткән дошман яуы тауға етеү менән хәлһеҙләнгән дә ҡуйған. Сөнки тауҙағы көслө магнит дошман аттарының тимер дағаларын ергә тартҡан. Уларға һуғышырға мөмкинлек бирмәгән. Ошо мәлдә инде дағаһыҙ аттарҙағы башҡорттар дошман яуын еңел генә ҡыйратыр булған.

Әйткәндәй, борон ата-бабаларыбыҙҙың мәғдән ятҡылыҡтарын яҡшы белеүе тураһында топонимик атамалар ҙа асыҡ һөйләй. Баҡырлы тауы, Батыртау, Баҡырүҙәк, Баҡырҡаҙыған һ.б. атамалар башҡорттарҙың баҡыр мәғдәнен сығарыуы, иретеүе тураһында һөйләһә, Тимерарҡа, Тимерҡая, Тимертау атамалары тимерҙе лә күптән үҙләштергәндәре хаҡында бәйән итә.

Башҡорттар үҙҙәре алтынды биҙәнеү әйбере рәүешендә ҡулланмаһа ла, был ҡиммәтле металды бик күпләп сығарған. Алтын тауы, Алтынташ тауы, Алтынсай йылғаһы, Алтынтапҡан үҙәне тап ошо хаҡта һөйләй. Ата-бабаларыбыҙ алтын менән сауҙа



иткән. XVII быуаттың икенсе яртыһында хатта башҡорттарҙың алтын, көмөш сығарыу менән шөғөлләнгән мәғдәнселек үҙәктәре булған. Уны ата-бабаларыбыҙ батша хөкүмәтенән йәшереп тотҡан.

1668 йылда Долматов монастыры монахы оло йәштәге бер башҡорт ҡатынынан Иртәш күлендәге (хәҙер ул Силәбе өлкәһенә ҡарай) башҡорттарҙың мәғдән иретеү ҡаласығы тураһында ишетеп ҡала. Монах ҡала хаҡында Мәскәүгә былай тип хәбәр итә: "в горе в вершине Уфы, Чадены и Яику реки... и домницы, и ямы в том месте есть..., а езде от Катайского острогу - 11 дней. Около той горы, речки названием Тасмы, устьями сошлись в Ай-реку, а длина той горы верст 7, поперек в версту, в вышину сажень на 200 и более. На ту гору проложены дороги великие. Теми дорогами ездят многие башкирцы, этот камень берут и плавят золото и серебро, ту руду они продают в Уфу русским людям по 13 рублей пуд. Есть и город каменный на берегу озера Иредяша в полднище пути, и башни великие и палаты каменные, башкирцы его скрывают, а так же некто служилый человек видел на острове Иртяш - озера этот город в саморостном камени. Вокруг него ров, а за тем городом сделаны домницы исстари, видны плавильная руда и шлак. В длину городище 100 сажень, а поперек 50 сажень" (1 ҡаҙна сажины - 2 метр 14 см -).

Тимәк, башҡорттарҙың "таш ҡаласығының" оҙонлоғо 200 метр тирәһе, киңлеге 100 метр тирәһе булған. Бейек башнялары һәм йорттары ла таштан булған. Был урынды башҡорттар урыҫтарҙан йәшереп тотҡан. Батша хөкүмәте махсус экспедиция ойоштора, әммә башҡорттарҙың мәғдән иретеү ҡаласығын таба алмай ҡайта.

Башҡорттар борон-борондан нефтте лә яҡшы белгән һәм файҙаланған. Уны ата-бабаларыбыҙ ер майы тип атап йөрөткән. Сөнки нефть ҡайһы бер урындарҙа ергә сығып ятҡан. Майташ, Майғаҙы атамалары тап ошо нефть ятҡылыҡтары хаҡында һөйләй. Башҡорттар нефтте төрлө тән сирҙәре дауалағанда май рәүешендә ҡулланған. Ә инде нефтле һыу ауыҙ боҙолғанда, тамаҡ шешкәндә, сайҡатыу өсөн ҡулланылған. "Сию смолистую воду потребляют не токмо для полоскания и пития во время молочницы во рту и чирьев в горле, но и рачительно собирают нефть и употребляют оную во многих случаях как наружно средство", - тип яҙып ҡалдырған академик А.С.Паллас (ул XVIII быуаттың 60-сы йылдарында Академик экспедициялар мәлендә Башҡортостанда булып китә). Шулай уҡ башҡорттар ер майы менән арба тәгәрмәсен майлағандар, йәғни борон уҡ нефтте техник йәһәттән дә ҡулланғандар.

Батша хөкүмәте Академик экспедицияларҙы Уралдың ҡаҙылма байлыҡтарын өйрәнеү өсөн ойоштора. Артабан Башҡортостанда хөкүмәт күпләп тау заводтары төҙөй башлай. Тау заводтары эшенә башҡорттар ҙа әүҙем йәлеп ителә. Был йәһәттән Ғәйнә улысы башҡорттары (хәҙерге Пермь крайы) ҙур уңыш ҡаҙана. Улар үҙҙәренең аҫаба ерҙәрендәге мәғдәнлектәрҙән заводтарға мәғдән ташыу менән кәсеп итә. 1773 йылда ғәйнә башҡорто мәғдәнсе Исмәғил Тасимов Рәсәйҙә тәүге тау ғилеме буйынса уҡыу йорто асыу инициативаһы менән сыға. Әбей батша Екатерина II башҡорт мәғдәнсеһенең идеяһы хуплай һәм тау училищеһы асырға бойора. Исмәғил Тасимов дуҫтары менән училищеға ун йыл тирәһе финанс ярҙам күрһәтеп тора.

Минзәлә башҡорттары (хәҙерге Татарстандың Әлмәт районы), тархандар, аталы-уллы Надир Ураҙмәтов менән Йосоп Надиров 1754 йылда нефть эшкәртеүҙән алынған килемдең бер өлөшөн ҡаҙнаға түләргә һәм нефттән алынған кәрәсинде ирекле хаҡ менән Рәсәйҙә һатырға тигән шарт менән нефть заводы төҙөү өсөн хөкүмәттән рөхсәт ала. Әммә уларҙың ниәте тормошҡа ашмай ҡала, завод төҙөлөп бөтмәйенсә, 1757 йылда, батша хөкүмәте Надир Ураҙмәтовтың нефть эшкәртеүгә хоҡуғын кире тартып ала. 1758 йылда Надир Ураҙмәтов донъя ҡуйыу сәбәпле нефть заводы төҙөү идеяһы бойомға ашмай тороп ҡала.

Шулай итеп, башҡорттар борон-борондан Уралдың ҡаҙылма байлыҡтарын яҡшы белгән һәм элек-электән мәғдәнселек кәсебендә ҙур оҫталыҡҡа эйә булған. XVIII быуатта барлыҡҡа килгән Урал тау заводтары сәнәғәтенең үсешенә башҡорт мәғдәнселәре ҙур өлөш индергән.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**

---

рыу маҡсатында ҡулдан килгәнсә, хатта бер ниндәй хеҙмәт хаҡы алмай эшләнек, өҫтәүенә, өй һайын берәр башмағыбыҙҙы тотороп ебәреп, 8-әр кило май, йөн, тире кеүек шәхси хужалығыбыҙ продукциялары менән илгә ярҙам иттек. Ә бит үҙебеҙ ҙә аслы-туҡлы инек. Өҫтәүенә, Никита Хрущев килеп, аттарҙы, кәзәләрҙе бөтөрҙө, яңғыҙ һыйыр менән торғоҙоп ҡалдырҙы. Бер талай кукуруз икмәге ашатып йүнкетте халыҡты. Аҙаҡ та рәхәтләнеп мал көтөп, уға бесән эшләп йәшәй алманыҡ: тыйыу өҫтөнә тыйыу булып ҡына торҙо.

Исмаһам, ҡартайған көнөбөҙҙә беҙҙе хәйерсе аҡсаһына тилмертмәһендәр, күрһәткән хеҙмәттәребеҙҙең әжерен донъялыҡта ҡайтарһындар ине лә бит. Хәйер, кем генә ишетһен инде беҙҙең зарҙарҙы. Ишеткәне лә ни ҡылһын? Йән әрнегәндән, эсем бушап ҡалһын, хәҙерге быуын беҙ үткән ауырлыҡтар тураһында белеп, бөгөнгөгә шөкөр итһен тип кенә яҙам инде был юлдарҙы...

**Бәширә УСМАНОВА,**
**тыл һәм хеҙмәт ветераны.**
**Әбйәлил районы Буранғол ауылы.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Себер тарафтарына Зәйнулла Рәсүлевтың эшмәкәрлеге менән бергә, Нәҡшбәндиә туғанлығының Хәлидиә тармағы йоғонтоһо үтеп инеүе, себер татарҙары хандары хакимлығы осоронда был яҡтарҙа Ислам тәғлимәтенең тарала башлауы шулай уҡ Нәҡшбәндиә суфыйҙары менән бәйле булыуы айҡанлы, айырым ҡыҙыҡһыныу уята. Көнсығыш Себерҙә киң таралған риүәйәткә ярашлы, Хажи Баһауетдин Нәҡшбәнд яҡынса 1366 йыл тирәһендә Иртыш йылғаһы буйлап Ислам динен таратыу өсөн мәжүсиҙәр араһына үҙенең бер нисә арҡаҙашын ебәрә. Был миссионерҙарға ярҙамға ҡыпсаҡ хакимы Шәйбән хан тарафынан 1700 яугир бирелә. Күрәһең, был риүәйәт 1570 - 1598 йылдарҙағы Себер ханлығы хакимы Күсем хандың, шәйбәнид нәҫелдәренән булған Бохара хакимы Абдулла хан ебәргән Нәҡшбәндиә туғанлығы шәйехтәре ярҙамына таянып, үҙ илендә Ислам динен тарата башлауы тураһындағы өҙөк-йыртыҡ һәм бигүк асыҡ булмаған мәғлүмәттәр нигеҙендә барлыҡҡа килгән.

Зәйнулла Рәсүлевтың педагогик һәм мәғрифәти эшмәкәрлеге, ҡаҙаҡтар араһында Ислам белемен үҫтереүе, татар һәм башҡорттарҙың киңәйә барыусы урыҫ контроленә ҡаршылыҡ күрһәтеүенә булышлыҡ итеүе сәбәпле, урыҫ сәйәсәтенә ҡапма-ҡаршы килә, һәм 1906 йылда хөкүмәт тарафынан Ҡаҙағстанда татарҙарҙың йоғонтоһон сикләүсе саралар күрелә башлай, әммә уларҙың һөҙөмтәһе тураһында мәғлүмәт юҡ. Зәйнулла ишанға урыҫ властарының терәге булған руханиҙар нәфрәт менән ҡарай: Ҡаҙағстанды христианлаштырыуға өмөт иткән Рус православие сиркәүе миссионерҙары Зәйнулла ишан тураһында айырыуса ытырғаныс менән һөйләр булған.

Зәйнулла Рәсүлев булышлығында нәшер ителгән ҡайһы бер ҡыйыу публикацияларҙы сиркәү ҙә, хөкүмәт тә үҙҙәрен мыҫҡыллау рәүешендә ҡабул итә. 1908 йылда ул Волга булғарҙары, башҡорттар, Ҡаҙан татарҙары, ҡаҙаҡ һәм үзбәк тарихы буйынса "Талфик аль-ахбар" тигән китапты нәшерләргә ярҙам итә. Был тарихи әҫәр, башҡорт милләтенән булып, Бохарала белем алған, Хиджазда (Сәғүд Ғәрәбстанында) йәшәгән, тыуған иленә йыл һайын йәй айҙарында ҡайтып йөрөгән шәйех Морат Рәмзи тарафынан яҙылған. Көслө милләтселек рухы менән айырылып торған был китапта урыҫтар Йәджүж һәм Мәджүж (Гог һәм Магог) менән сағыштырыла, мосолман төркиҙәр берҙәмлеккә өндәлә. Баҫылып сығыу менән үк М. Рәмзиҙең был әҫәре цензура тарафынан император Александр III кәмһетеүсе, мосолмандарҙы урыҫтарға ҡаршы ҡотортоусы китап, тип баһалана. Пантөркилек һәм Ислам идеялары менән һуғарылған ошо китапты нәшер итеүҙе Зәйнулла Рәсүлевтың үҙ ҡанаты аҫтына алыуы иғтибарҙы йәлеп итә. З. Рәсүлев китап авторының, мосолмандарҙы христианлаштырыу өсөн аң-белемде тик урыҫ ҡулынан ғына алырға мөмкинлек биреп, уларға белем һәм ғилем алыуҙың башҡа юлдарын ябыу урыҫ властарының төп маҡсаты, тигән фекере менән, һис шикһеҙ, килешкән булырға тейеш.

**(Дауамы бар).**

✓ *Быйылғы сараға беҙгә юл һәм йәшәү хаҡын ҡаҙаҡ дуҫтарыбыҙ үҙҙәре түләне. Улар былтыр беҙҙе шундай шарт менән саҡырып ҡуйғайны. Был ошондай бер генә осраҡ. Ә күпме уңайлы осраҡтарҙан ситтә тороп ҡалырға тура килә...*



# ХӘҘЕР БАЛАЛАР

## атай-әсәйенән уҡ-ян

**Төрлө һөнәр эйәләре булған, төрлө ҡараштар менән йәшәгән, донъяны төрлөсә ҡабул иткән ир-егеттәрҙе бер төшөнсә бәйләй, уларҙы бергә уйларға, бер фекерҙе бүлешергә һәм бергә хәрәкәт итергә мәжбүр итә. Ул да булһа, милли мәҙәниәт. Һүҙем артист, хореограф, уҡытыусы Урал Мортазин, ҡул һуғышы тренеры, хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәре Рушан Хәсәнов, шәхси эшҡыуар Денис Өмөтбаев, шундай уҡ шәхси эшҡыуар Юлай Ғәлиуллин һәм "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәре Артур Батыршиндар хаҡында. Күптән түгел Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Алма-атала үткән фестивалгә саҡырылып, күргәҙмә сығыштар яһап ҡайттылар. Ул ғына ла түгел, төрки спорт уйындарында ҡатнашып, Юлай Ғәлиуллин традицион яндан уҡ атыу буйынса икенсе урынды яулаған һәм алты егеттең өсөүһе финалға үтеү бәхетенә ирешкән. Был сәйәхәт хаҡында үҙ ауыҙҙарынан ишетеү өсөн егеттәрҙе редакцияға ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ.**

**Гәзит уҡыусыларҙы фестиваль, уның ҡылыҡһырламаһы, ойошторолошо һәм һеҙҙең күргән-кисергәндәр менән таныштырып үтәйек әле?**

**Юлай Ғәлиуллин:** "Оло дала - күсмәнделәр донъяһы" тип аталған Халыҡ-ара фестиваль быйыл өсөнсө йыл уҙғарылды. Йыл да уның исеме лә, тематикаһы ла үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, күсмән халыҡтар тарихын өйрәнеү - иң үҙәктә тора. Йәғни, бында күсмән халыҡтар үҙҙәренең тарихи мәҙәниәтен тергеҙеп, шул өлкәләге спорт уйындарында көс һынашып, сәнғәт өлгөләре менән алмашып, башҡаларҙа һаҡланған уйын төрҙәрен ҡарап, тәжрибә бүлешергә йыйыла.

**Денис Өмөтбаев:** Йыл һайын был сараға ундан да кәм булмаған ил вәкилдәре килә. Тәүге йылдарҙа сарала булғар, молдаван кеүек ҡыҙыҡһыныусылар ҙа булһа, быйыл бары тик ысын күсмәнделәр - башҡорттар, бүрәттәр, ҡалмыҡтар, алтай, дағ халҡы, тывалар, маджарҙар, ҡаҙаҡтар үҙҙәре һәм украиндар ҡатнашты.

**Артур Батыршин:** Һәр ил, һәр төбәк үҙҙәрен танытыу өсөн ниндәйҙер бер күренеш алып килгәйне. Кемдәрҙер йыр-бейеү, икенселәр хәрби уйындар, өсөнсөләр берәй халыҡ кәсебен тамаша ҡылдырҙы. Яҡуттар, мәсәлән, тимерселәрен алып килгән. Тимер иретеү мейестәре, һуҡҡыстары, иҙгестәре, хатта күмерҙәрен дә үҙҙәре менән йөрөтөп, уҡ башаҡтары эшләү буйынса ҡыҙыҡлы оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте улар. Беҙ әлеге көндәрҙә уҡ атыу, уҡ-ян эшләүҙе тергеҙеү өҫтөндә эшләһәк, яҡуттар тап ошо мәлдә тимерселектәрен аяҡҡа баҫтырып ята икән.

**Рушан Хәсәнов:** Фестивалдә төрки халыҡтары өсөн ғәҙәти булған спорт төрҙәре буйынса ярыштар уҙғарылды. Көрәш, бәйге, уҡ атыу, ауҙарыш, таш күтәреү, асау һәм башҡалар. Беҙҙең халыҡта юғалып өлгөргән уйындарҙың береһе ауҙарыш һәм асау хаҡында әйтә биреп үтәйек. Ауҙарышта ат өҫтөндә йөрөп, бер-береңде аттан ауҙарып төшөрәһең, һәр хәлдә, шул маҡсатта көс һынашаһың. Ә асау тигәне ул беҙҙенсә тай өйрәтеү. Уйлап ҡараһаң, беҙ үҙебеҙ ҙә тай өйрәтмәй тормайбыҙ бит, әммә ошо егетлекте артыҡ ғәҙәтигә генә әйләндергәнбеҙ. Ә ҡаҙаҡтар ошо эште бер экстремаль күренеш итеп ойоштора белдә. Манеж эсендә бер-нисә тай йөрөй һәм шулай уҡ бер нисә егет бер-бер артлы ҡороҡланған тайҙарға ташланып, уларҙы буйһондорорға итә. Кем дә кем тай өҫтөндә оҙағыраҡ йөрөй ала - шул енеүсе. Бында егеттәрҙең таҫыллыҡтары, ҡыйыулыҡтары, ныҡышмаллыҡтары хайран итерлек булды.

**Денис Өмөтбаев:** Дүрт тайҙы өйрәткәндәрен ҡарап, күҙәтеп торҙом һәм ҡайһы бер ҡыҙыҡ ҡына үҙенсәлектәрен аңғарҙым. Үҙем дә тай өйрәткәндә ҡатнашҡан кешемен. Тик быларҙың тайҙары беҙҙәкеләр кеүек арт һанын сойорғотоп һелтәмәй. Һыбайлыны алып ырғытырға маташмай тайҙары, ә бары баш бирмәй, түңәрәк буйлап ҡына саба. Сөнки уларҙа аттарҙа өйөр инстинкты һаҡланған, йәғни аттарҙы ҙур өйөрҙәрҙә генә көтәләр, беҙҙәге кеүек, бәләкәй төркөмдәрҙә йөрөтмәйҙәр. Айырым йөрөп өйрәнгән тай, әлбиттә, ҡото осоп, ныҡ ҡарыша, ә көтөүҙә йөрөп, далала сабышып өйрәнгән тайҙар ҡасып ҡына ҡотолмаҡсы. Бына бит, малдарҙа ла ниндәйҙер айырым һыҙаттар һаҡланған һәм улар ҙа халҡының үҙгәрештәрен ҡабул иткән. Һәр хәлдә, был егетлек төрөн беҙҙә лә индереү кәрәктер, тип уйлайым.

**Урал Мортазин:** Бер венгр тай өйрәткәндә ҡарап торҙо ла, ҡыҙышып китеп, тайға менеп ҡарамаҡсы булды. Әммә тайҙы ҡороҡлап биргәйнеләр, уға яҡын да бара алманы. Уның егетлеген аттан ҡурҡыу һәм һаҡланыу инстинкты еңде. Ә дөрөҫөрәк итеп әйткәндә, ҡанында йылҡыға яҡынлыҡ булмаған халыҡтарҙа уны ҡороҡлау антылышы ла, һәләтлеге лә булмайҙыр ул.

**Баштан уҡ асыклап китәйек әле: башҡорт күсмә халыҡмы, әллә ултыраҡмы? Ғалимдар беҙҙе "ултыраҡ" тип иҫбатлай, ә һеҙ әле "күсмәнде" тип ҡыйыу атайһығыҙ. Кем ул беҙ, асылда?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Күсмә халыҡ булыу ул донъя буйлап күсеп йөрөү тигәндә аңлатмай. Һеҙ берәҙәк булып йөрөгән сиғандар тормошон күҙ алдына килтермәгеҙ, зинһар. Бына, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар үҙҙәрен "көшпәнде" тип атай. Улар үҙ ерҙәренән ары күсеп ҡайҙа киткән? Беҙ ҙә шулай, мал артынан йәйләү-ҡышлау араларында күсеп йөрөп ғүмер иткән халыҡ. Төрки халыҡтарҙың күсмәнделеге ана шунан ғибәрәт. Уралдан Иртыш, Арал буйҙарына саҡлы аҫаба ерҙәребеҙҙә йәйләү-ҡышлау алмаштырып йөрөгәнбеҙ. Ә асылда һәр ырыуҙың үҙ ерҙәре, документлы майҙандары булған. Аҫаба, ерле халыҡ булыуыбыҙ ныҡлы билдәле була тороп, ни өсөн бөгөн "күсмәнде" тигән һүҙҙән ҡурҡабыҙ һуң беҙ? Быны аңламағандар ғына бәхәс ҡуптара, минеңсә.

**Фестиваль сиктәрендә үткән ниндәй хәрби уйын төрҙәрендә ҡатнаштығыҙ?**

**Денис Өмөтбаев:** Башҡорт атлы гәскәрен күрһәтеү маҡсаты менән барған инек бит инде был фестивалгә. Унан башҡа, һыбай һөңгө, сыбыртҡы менән, ҡылыс, хәнйәр менән эш итеү, ҡул һуғышы күнекмәләрен күрһәттек. Әйткәндәй, башҡортта бысаҡ менән алышыу төрө бик үҫешкән булған. Тимер эшкәртеү тыйылғас ҡына был ҡорал бер аҙ популярлығын юғалтҡан. Ә заманында күп алыштар алдынан иң башта хәнйәр һуғышы үткәрер булғандар. Алдар батыр ҙа бит Азов походы мәлендә черкес батыры менән хәнйәр һуғышында еңеп, дан ала.

**Артур Батыршин:** Башҡорт атлы гәскәре күргәҙмәһен күрһәткәндән һуң, уҡ атыу ярыштарында ла ҡатнашып өлгөрҙөк. Беренсе көндә традицион яндан уҡ атыу ярышында өс башҡорт уҡсыһы финалға үттек. Рушан һыбай уҡ атыу ярышында ҡатнашты. Икенсе көндә инде финал ярыштарында беҙҙең Юлай ағай 2 тапҡыр традицион яндан уҡ атыу буйынса украин чемпионын үтеп, икенсе урынға лайыҡ булды. Еңеүҙе ҡырғыҙ уҡсыһы яуланы.

**Ошондай сараларға йөрөү, ҡатнашыу өсөн ниндәйҙер хөкүмәт ярҙамы бармы һеҙгә? Ҡайҙалыр барып, милләтебеҙҙе күрһәтеп ҡайтырҙан алда ниндәй әҙерлек үтәһегеҙ, ниндәй ҡаршылыҡтар булырға мөмкин һәм башҡа этаптарҙы үтеү хаҡында бәйән итһәгеҙ ине?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Үкенескә күрә, әлегә республикабыҙҙа этноспорттың "э" хәрефе лә юҡ. Шунан ғына ла сығып уйлағыҙ инде, ниндәй ярҙам хаҡында һүҙ барырға мөмкин? Быйылғы сараға беҙгә юл һәм йәшәү хаҡын ҡаҙаҡ дуҫтарыбыҙ үҙҙәре түләне. Улар былтыр беҙҙе шундай шарт менән саҡырып ҡуйғайны. Был ошондай бер генә осраҡ. Ә күпме уңайлы осраҡтарҙан ситтә тороп ҡалырға тура килә...

**Рушан Хәсәнов:** Аттарҙы ла беҙгә саҡырыусылар үҙҙәре бирҙе. Бындай сараларҙа ат та ат хаҡы тора ул. Бәхеткә күрә, барлыҡ сығымдарыбыҙҙы ла ойоштороусылар үҙҙәре күтәрҙе, икенсе төрлө булғанда, улай күмәкләп, ихласлап барыу хаҡында уйларға ла түгел ине. Һәр хәлдә, бик ныҡ көсәнгәндә генә бер-ике кешене ебәрә ала инек. Ә былай бер команда - алты һыбайлы булып ҡатнашып ҡайттыҡ. Ҡаҙаҡтар аттарҙы беҙгә һәм мадъярҙарға ғына бүлде. Мадъярҙар егерме алты кеше килгән, уларға дүрт ат, ә беҙҙең алтыбыҙға алты ат бирҙеләр. Башҡа бер халыҡҡа ла менге аттар булманы, һәр кем үҙ йүнен үҙе күрҙе. Шулай уҡ парадта ла иң беренсе сафта мадъярҙары, икенсе итеп башҡорттарҙы ҡуйҙылар.

**Артур Батыршин:** Ошо тәңгәлдә ни өсөн ҡаҙаҡтар үҙҙәре аҡса түләп, беҙҙе фестивалгә саҡырыуҙарын да асыклап китәйек. Арттырып әйтмәйбеҙ, башҡорттарҙың даны күсмәнде халыҡтар араһында киң таралған. Һәр ерҙә беҙҙе яугир халыҡ, абруйлы халыҡ тип ҡаршы алалар. Шулай уҡ улар беҙҙе бары тик иҫәп өсөн генә түгел, ә аныҡ хәрби күнекмәләр күрһәтә, башҡорт атлы гәскәрен һынландыра алырыбыҙға өмөтләнеп тә саҡыралар. Сөнки улар бына нисәмә йылдар инде "Төньяҡ амурҙары" клубы ағзаларының Бородино яланында ла, сит илдәрҙә лә төрлө реконструкцияларҙа ҡатнашҡанын күреп-ишетеп йөрөйҙәр бит.

**Урал Мортазин:** Мадъярҙарҙың беҙгә мөнәсәбәте оҡшаны. Сөнки улар тарихты яҡшы беләләр, өйрәнгәндәр һәм беҙҙең борон-борондан килгән бәйләнеш хаҡында һөйләйҙәр. "Беҙҙә башҡорттар нигеҙ һалған ауылдар бөгөн дә һаҡлана", тип, туғандарын күргәндәй һөйөнөштөләр. Бик тулҡынландырғыс булды уларҙан шундайҙы ишетеү.

**Юлай Ғәлиуллин:** Әйтеп үтергә кәрәк, мадъярҙар күсмәнде халыҡтар араһында хәрби уйындар күрһәтеү буйынса иң беренсе урында торалар. Уларҙың кейемдәре лә, ҡоралдары ла, ат-әйәр йыһаздары ла боронғо хәрбиҙәрсә һәм күнекмәләрҙе лә бик күпкә алдан башлағандар. Ә бит һыбайлы хәрби уйындарҙа ҡаҙаҡтар менән ҡырғыҙҙар ҙа оҫта, әммә беҙҙе тап шул мадъярҙар менән тиң итеп ҡаранылар фестивалдә. Был да төптө юҡтан ғына түгел. Хатта иғландарҙа айырым хөрмәт менән республикабыҙҙы "Башҡорт иле" тип атанылар. Үҙенә күрә матур мөнәсәбәтте күрһәтә ошо ла.

**Һәр берегеҙҙең өҫтөндә сынъяһау милли кейемдәр. Улай бөтөн әҙерлекте, кейемдәрҙе, атрибутиканы үҙегеҙҙең елкәлә күтәрер, әҙерләр булғасыйыҙ, өҫ-башығыҙ яҡынса ниндәй суммаға төшә?**

**Рушан Хәсәнов:** Тулыһынса кейенәм тиһәң, әлбиттә, ҡиммәткә төшә. Был костюмдар бер көнлөк кенә эш түгел. Иң ябай кейем иң кәмендә 50 мең тирәһенә барып баҫа. Ә инде һыбайлының милли кейемен йыя башлаһаң, бында эйәр-йүгәне һәм башҡалары ла инә, 400 меңдән дә кәм булмай.

**Юлай Ғәлиуллин:** Беҙҙең әлеге кейгән кейемдәр һуғышсылар кейеме түгел, яугирҙыҡы ла түгел, беҙ әле, дөрөҫөн әйткәндә, ябай халыҡ кейемендә, һунарсылар, көтөүселәр образында ғына йөрөйбөҙ. Бына кольчуга эшләтергә тиһәң - утыҙ, күн күлдәк тектереүгә утыҙ биш мең аҡса кәрәк. Маҡсатыбыҙ иһә хәрби кейемдәрҙе йыйып алыу. Кейем генә түгел, ҡылыс, ҡалҡан, эйәр-йүгән һәм, әлбиттә, хәрби хәрәкәттәргә өйрәтелгән аттар кәрәк.

**Денис Өмөтбаев:** Нимәһе ҡыҙыҡ булды, кейемдәребеҙ хәрбиҙәрсә булмаһа ла, башыбыҙҙа-

*Юлай Ғәлиуллин: Күсмә халыҡ булыу ул донъя буйлап күсеп йөрөү тигәндә аңлатмай. Һеҙ берәҙәк булып йөрөгән сиғандар тормошон күҙ алдына килтермәгеҙ, зинһар. Бына, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар үҙҙәрен "көшпәнде" тип атай. Улар үҙ ерҙәренән ары күсеп ҡайҙа киткән? Беҙ ҙә шулай, мал артынан йәйләү-ҡышлау араларында күсеп йөрөп ғүмер иткән халыҡ. Төрки халыҡтарҙың күсмәнделеге ана шунан ғибәрәт. Уралдан Иртыш, Арал буйҙарына саҡлы аҫаба ерҙәребеҙҙә йәйләү-ҡышлау алмаштырып йөрөгәнбеҙ. Ә асылда һәр ырыуҙың үҙ ерҙәре, документлы майҙандары булған. Аҫаба, ерле халыҡ булыуыбыҙ ныҡлы билдәле була тороп, ни өсөн бөгөн "күсмәнде" тигән һүҙҙән ҡурҡабыҙ һуң беҙ? Быны аңламағандар ғына бәхәс ҡуптара, минеңсә.*

ғы бүректәребеҙ ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Ситтән беҙ бүре баштары кейеп йөрөгән кеүек күренәбеҙ икән. Әсе көндә баштарына йөнтәҫ башлыҡтар кейеп йөрөгән төркөм менән фотоға төшөргә теләүселәр аҙ булманы.

**Белеүебеҙсә, ошондай сараларға сыҡҡанда өйҙән үк милли, хәрби кейемдәрҙә сығып китәһегеҙ, шулай бит? Юлда осраған халыҡ нисек ҡарай һеҙгә? Һорауҙар бирәләрме?**

**Фестивалдең ойоштороло- шонда нимәләр айырыуса оҡшаны, ә нимәләрҙе һеҙ икенсерәк итеп күрергә теләр инегеҙ? Шул хаҡта һөйләшәйек әле.**

**Артур Батыршин:** Әгәр беҙ унда ҡунаҡ булып ҡына барһаҡ, "Ҡунаҡ булһаң - тыйнаҡ бул" йәки "Ҡунаҡ - хужаның ишәге" тигән күркәм әйтемдәрҙәге ҡағиҙәләргә буйһоноп, барыһын да оҡшатып, тик ыңғайҙы ғына күреп йөрөр инек. Әммә беҙ унда бәйгеселәр булып барҙыҡ һәм сәмле ярыштарҙа ҡатнаштыҡ. Ингәс тә: "Арағыҙҙан кемегеҙ иң олоһо?" - тип һоранылар һәм мин икәнде белгәс, алдыма баш ҡуйып, шуны өлөшләп бүлдереп, матур теләктәр әйттереп, һәр кемгә тараттырып сыҡтылар. Үҙенә күрә бер ололау йолаһы булды был, бик оҡшаны.

**Юлай Ғәлиуллин:** Бындай ҙур сараларҙы ойоштороу өсөн ҙур тәжрибә лә һәм ул хеҙмәтте белгестәр, оҫталар башҡарыуы ла зарур. Беҙҙә, мәҫәлән, мәҙәни сараларҙы ойоштороуға Халыҡ ижады үҙәге кеүек профессионалдар коллективы бар. Ә улатеклерәк итеп өйрәнеү фарыз. Айырым милләт булып формалашҡанға тиклемге инештәребеҙҙе аҡтарырға ине. Андрештың әйткәндәре лә нигеҙһеҙ түгел бит, беҙ совет иле тарихы аша ғына белдек үҙебеҙҙе һәм ярай әле яңы тикшеренеүҙәр башланып китте. Шулай ҙа сит илдәрҙә, сит халыҡтарҙа ятҡан архивтар беҙҙең хаҡта күберәк мәғлүмәттәр һаҡлай ул. Тарихсыларыбыҙ ситкә сығып та эҙләнһен ине, тиməксемен.

Башҡортто оҙаҡ йылдар ҡырайсы-йырсы итеп кенә һүрәтләп килделәр, ләкин беҙҙең халыҡта ниндәй уйҙырмалар ҙа, яһалмалыҡ та, үҙгәртеп һүрәтләү ҙә булмаясаҡ.

**Денис Өмөтбаев:** Тарихты өйрәнеүҙең ысулдарын популярлаштырыу өсөн тарих факультеты студенттарына шундай кәңәш бирер инем. Практикаға мәктәпкә барғансы, Урта Азия илдәренә йүнәлтмә алып, билдәле йылъяҙмалар һаҡланған китапханаларға, музейҙарға, архивтарҙа ултырып ҡайтһындар ине. Был улар өсөн байраҡ та, фәһемлерәк тә практика булыр ине.



# ВЕЛОСИПЕД ТҮГЕЛ,

## һорай икән…

**Денис Өмөтбаев:** Өфөнән сығып китеп, ике самолет алыштырып, Мәскәү аша Ҡаҙағстанды урап ҡайтҡанда шул милли кейемдәребеҙҙә булдыҡ. Әлбиттә, бындай төркөмдә берәү ҙә иғтибарһыҙ үткәрмәй. Кешеләрҙең күҙ ҡарашындағы хистәрҙе әйтеп аңлатырлыҡ түгел. Кемдер ҡурҡыу, кемдер һоҡланыу менән ҡарай, берәүҙәр бөтөнләй аптырауға төшә.

**Юлай Ғәлиуллин:** Хәтеремдә, бер ҡатын "О, господи!" тип ҡысҡырып ебәргәйне аэропортта. Шул мәлдә футбол чемпионаты барғас, бәлки, берәй илдең көйәрмәндәре тип уйлаусылар ҙа булғандыр. Милли кейемдәрҙә юл йөрөүҙең башы нимәнән булды? Былтыр беҙ Өфөлә милли кейем парады үткәрелгән көндө юлға сығып киттек. Йәнәһе, парадта ҡатнаша алмағас, әйҙә, милләттәштәребеҙгә теләктәшлек күрһәтеп, юлға шул кейемдәрҙә сығайыҡ, тип ҡарар иттек. Үҙебеҙсә шулай парад эшләнек инде.

Унан һуң, юлда халыҡтың ҡыҙыҡһыныуын күреп, артабан да шулай йөрөргә ҡарар иттек. Был, икенсе яҡтан, уңайлы ла, багажда кейемебеҙҙең ауырлығы ҙур, ауыр ҙа. Ә былай бөтөн йөгөн үҙ өҫтөңдә һәм бер атрибутың да йөмшәймәй, боҙолоп ҡуйыр тип борсолмайһың.

Йәғни, беҙ яуға барҙыҡ, уйын сиктәрендәге генә булһа ла яу ине был. Ҡаҙағстанда этника бик яҡшы үҫешкән. Миҫалға ябай тирмәләрен генә алғанда ла, унда барыһы ла ысын, боронғоса. Улар ҙур, киң итеп, ҡалын кейеҙҙән, ел-ямғырға бирешмәслек йыһыл, ныҡ итеп яһалған. Уларҙың эсендә лә бөтөн тейешле йыһаздары бар. Стеналарында балаҫтар, ерҙә келәмдәр, ятыр-ултырыр урындар. Аш-һыу бүлеге ағы ла, ҡорал һаҡлау урындары ла бар. Ҡыҫҡаһы, инеп йәшәп алып китмәле итеп һәр ваҡ-төйәгенә саҡлы теҙелгән. Һәм фестивалдә ҡатнашыусыларҙың береһе лә тирмәһеҙ ҡалманы.

**Рушан Хәсәнов:** Ҡаҙаҡтарҙың ҡунаҡсыллығын айырым билдәләп үтәйек әле. Ҡунаҡты ашатыу уларҙа айырым урында тора. Күп сараларҙағыса, "Исем өсөн тамаҡ ялғатайыҡ та, үҙ йүндәрен үҙҙәре күрер", тигән төшөнсә юҡ. Ашатыу үтә лә сифатлы, һыйлы, туҡлыҡлы. Ҡымыҙ, шубат (дөйә һөтөнән яһалған эсемлек), ит әҙәлмәне алдан. "Ҡаҙаҡтың ите бөтмәй" тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатлап, ҡаршыға ултырып, боронғоса, ҡыҫтап ныйлайҙар икән улар.

**Урал Мортазин:** Тағы ла бер йолаларын күҙәттек - был йола элек беҙҙә лә булған. Тирмәгә инеүселәрҙе сараларҙа шундай үҙәктәр юҡ, бары ҡыҙыҡһыныу күрһәткән, теләк белдергән кешеләр ярҙам итә ойоштороу эштәрендә. Был тәңгәлдә айырым халыҡтың менталитетынан да һәм сараға мөнәсәбәтенән дә тора ул ойоштороу нескәлектәре. Мәҫәлән, мадъярҙар быйыл ҡоролтай үткәрәсәк һәм унда барыһы ла минутыныҡы минутына тура килеп торасаҡ. Беҙ сара үткәрәбеҙ икән, беҙҙеке сәғәте сәғәтенә тура килләсәк. Ә ҡаҙаҡ дуҫтарыбыҙҙың сараһы, шаяртыбыраҡ әйткәндә, көнө көнөнә тура килгәс ярай әле. Был ғәйепләп әйтеү түгел, ә күҙәтеүҙәрҙән сығып мәрәкәләү генә.

**Шундай сараларҙа, моғайын да, тарих тураһында ла һөйләшмәй булмайҙыр. Ситтән килеүселәр башҡорт тарихын беҙгә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белә, тинегеҙ…**

**Артур Батыршин:** Венгрҙар делегацияһы етәксеһе Андреш Биро "башҡорт" этимологияһы тураһында һөйләне. Бик борон замандарҙа Уралдан таралып киткән хәрби йолаға ярашлы, төрки халыҡтар араһындағы иң дәһшәтле яугирҙарҙы башҡорт тип атай башлағандар. Мадъяр Андреш: "Был төшөнсәнән сығып ҡарағанда, беҙ ҙә башҡорт, сөнки беҙ яугирҙар, һеҙ ҙә башҡорт, сөнки һеҙ ҙә яугирҙар", - тип әйтте ышаныслы итеп.

**Денис Өмөтбаев:** Был тәңгәлдә тарихты тағы ла төплөрәк, енләнеләр. Был шулай ҡулай ҙа, уңайлы ла ине. Менталитетын да үтә ябай, баҫалҡы, шым, оялсан, баҙнатһыҙ итеп һүрәтләнеләр. Йәнәһе, донъяға бер талабы юҡ, моңһоҙ, ҡымыҙ эсеп, ҡурай тартып, тәбиғәт ҡосағында көн итеп тик ятҡан. Ысынында, башҡорттоң тарихы тик ҡылыс менән генә яҙылған. Былы үҙебеҙҙең арала, ил эсендә күҙгә элмәскә тырышалар ҙа, төрки халыҡтар араһына сыҡ әле - үҙҙәре үк шуны һөйләп торалар. Беҙҙең тураһағы тарихи хәтерҙе улар нығыраҡ һаҡлай булып сыға, тимәк.

**Рушан Хәсәнов:** Бер хәлде һөйләп киткем килә. Ниндәйҙер сит өлкәләге концертта башҡорттарҙың хәрби бейеүен ҡараған бер мәрйә ханым килеп: "Откуда у башкир военные танцы, где они воевали, они же живут по середине России?" - тип һорай икән. Шулай итеп, йылдар буйына бейеп-йырлап ҡына йөрөп, мәҙәниәтте бер яҡлы ғына күрһәтеп, беҙ ҡайһы берҙәр өсөн "совет власы тарафынан күҙе асылған халыҡ" булып ҡалғанбыҙ һаман.

**Юлай Ғәлиуллин:** Сәмәрҡәнд, Бохара, Ҡытай, Хива кеүек илдәрҙең яҙмаларында өйрәнергә кәрәк башҡорт тарихын. Уларҙа быуаттар буйына теүәл һаҡланған архивтар бар һәм Башҡорт илен дә улар ниндәйҙер сәйәси күҙлектән сығып түгел, ә ҡыҙыҡһыныу менән, сәйәхәтсе булараҡ өйрәнгән. Тимәк, бер

**Ҡырғыҙстанға, Ҡаҙағстанға, унан башҡа яҡтарға ла ошондай сараларға йөрөйһөгөҙ. Ниндәй телдә аралашаһығыҙ, гәҙәттә? Төрки мөхитен тояһығыҙмы, ул беҙҙекенән нимәһе менән айырыла?**

**Урал Мортазин:** Бына, мәҫәлән, Алма-Атала рәхәтләнеп башҡортса һөйләшеп йөрөп ҡайттыҡ. Ҡалала ҡайҙа ғына инеп башҡортса хәбәр ҡушһаң да, һине аңлайҙар, яуап бирәләр. Ә беҙҙең баш ҡалала шулай мөмкинме?

**Артур Батыршин:** Үкенескә ҡаршы, беҙ рәхәтләнеп рус һүҙҙәрен әҙәби телгә, телмәргә, яҙмаларға индереп бөткәнбеҙ. Әйтерһең, беҙҙең телебеҙҙә ниндәйҙер һүҙҙәр булмаған йәки тәржемә итеп, ныҡытып ҡуйылмаған. Ҡаҙағстанда йәшәп, иркен рәүештә туған телдә һөйләшә алыуҙың да бер азатлыҡ билгеһе икәнен төшөндөм. Ошо урында беҙгә лә туғандаш халыҡтарҙан үрнәк алыу фарыздыр. Уларҙың үҙҙәрен үҙ ерҙәрендә ысын хужа, төп милләт вәкиле итеп тойоуҙары айырым-асыҡ күренеп тора. Был уларҙың ҡанына һеңгән, хатта бәләкәй малайҙарының ҡылыҡтарына ҡарап та аңғарырға була быны. Ә беҙ ниңәлер "күп милләттең береһе" тигән нарыҡлауға күнгәндән-күнә барабыҙ.

(Дауамы 16-сы биттә).

БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

**Өфө амфитеатрында "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале барған мәлдә сарала ҡунаҡ сифатында сығыш яһаусы Мордовияның "Оуме" ("Йән"- "Душа") музыкаль коллективы сығышын да тамаша ҡылыу бәхете эләкте. Мөмкинлектән файҙаланып, ансамбль етәксеһе Ежевика СПИРКИНАға бер-нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# ҺӘР КЕМ ҮҘЕНЕҢ МИЛЛӘТЕНЕҢ...

## тыуған еренең патриоты була ала



**➔ "Евразия йөрәгенә" эләгеү - бәхетле осраҡмы, әллә маҡсатлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһеме?**

- Был тормошта бер нәмә лә осраҡлы түгел. Дуҫыбыҙ - легендар Deep Forest төркөмөн ойоштороусыларҙың һәм уның составында Гремми премияһын яулаусыларҙың береһе булған Эрик Мукеның былтыр ошо сарала ҡатнашыуынан фестиваль тураһында бер аҙ хәбәрҙәр инек, сөнки бер-беребеҙҙең ижадын даими күҙәтеп барабыҙ, уңыштарына шатланабыҙ. Ә быйыл Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы үҙебеҙҙе был сараға саҡырҙы. Бәхетҡә, ойоштороусылар интернеттан Рәсәйҙә беренсе тапҡыр Пятигорскиҙа уҙғарылған, бөтә донъяға танылған "Womad" фестивалендәге сығышыбыҙҙы ҡарағандар икән. Ул билдәле музыкант Питер Гэбриэл ҡатнашлығында ойошторолған сара булды. "Евразия йөрәге" фестивален ойоштороусыларҙың күләмле фестивалдәрҙең промоутеры һәм директоры Александр Чепарухинды белеүҙәре, уны тик ыңғай фекерҙәр менән телгә алыуҙары лә сәйер тойолдо. Әлбиттә, үҙебеҙ хеҙмәттәшлек иткән, коллективыбыҙҙың яҙмышына үҙ өлөшөн индергән кешеләр хаҡында матур һүҙҙәр ишетеү күңелгә май булып яғылды.

**➔ Тимәк, быға тиклем ниндәйҙер кимәлдә Башҡортостан тураһында хәбәрҙәр булғанһығыҙ, баш ҡала менән танышып өлгөрҙөгөҙмө? Бынан ары, "Өфө", тигәндә, тәү сиратта, күҙ алдығыҙға нимә килеп баҫыр тип күҙаллайһығыҙ?**

- Был сәфәребеҙ - республика һәм Өфө ҡалаһы менән беренсе танышыу булһа ла, Башҡортостан менән дуҫлығыбыҙ Википедияға бәйле. Эрҙән Википедияһында мәҡәләләр яҙыусы егеттәр БашВики вәкилдәре менән дуҫ. Белеүемсә, Рәсәйҙә беренсе юзер-төркөмдә башҡорттар ойошторһа, икенсе махсус статусты эрҙәндәр алды һәм бында башҡорт википедистарының ярҙамы ҙур булды. Был үҙе үк төбәк менән хеҙмәттәшлеккә этәрә. Үҙебеҙ өсөн Өфөнө былтыр, әйтеп үтеүемсә, дуҫыбыҙ Эрик Муке "Евразия йөрәге" фестивалендә ҡатнашып, уның менән республика баҫмаларының береһендә донъя күргән әңгәмәнән һуң асҡайныҡ, быйыл ул яңы төҫтәрҙә балҡыны.

Артистар өсөн, әлбиттә, тәү сиратта техрайдерҙың тулыһынса үтәлеүе мөһим. Өфөлә сәхнәнең ҙур булыуы ғына түгел, заманса суперпрофессиональ ҡорамалдар менән йыһазландырылыуы, майҙансыҡта порталдар өсөн яуаплы тауыш режиссерынан тыш, сәхнәлә мониторинг саундын күҙәтеүсе тауыш режиссеры булыуы ла аптыратты. Күләменән, ойоштороусыларҙың музыканттарға мөнәсәбәтенән, тамашасыларҙың һәр сығыш яһаусыны йылы ҡаршы алыуынан сығып, сараны Ҡазанда үткән "Донъяның барлыҡҡа килеүе" ("Сотворение мира") фестиваленә тиңләр инем.

Реакцияларына ҡарағанда, тамашасы күңеленә хуш килдек, тип уйлайым. Гәмәлдә беҙ ихлас күңелдән сығыш яһайбыҙ, беҙ юғарыла, бейектә, ә тамашасы бары тик тыңлаусы ғына, тип түгел. Сығышыбыҙ символик туй һымаҡ: әйтерһең дә, икенсе ярыу менән танышабыҙ. Был юлы Өфө ҡалаһының күп милләтле ярыуы менән таныштыҡ һәм шундай уҡ йылы ярыу алдыҡ. Һуңынан социаль селтәрҙәрҙә әллә күпме яҙҙылар, яңы дуҫтар өҫтәлде, улар менән артабан да дуҫ булып ҡалырбыҙ, яңынан-яңы композициялар менән ҡыуандырырбыҙ, тип уйлайым.

Былар барыһы ла: изге күңеллелек, ихтирам аураһы, тауыш, ойоштороу, көнкүреш райдеры буйынса унайлы шарттар - музыканттар өсөн бик мөһим. Беҙҙе баш ҡаланың йәшеллеккә төрөнгән райондарының береһендә Hilton ҡунаҡханаһына урынлаштырҙылар. Хәҙер инде Өфө - кешеләре һәр саҡ йылмайып йөрөгән йәшел ҡала булып күҙ алдында тора. Башҡорттар иһә - изге күңелле, менталитетында үҙенән көлә белеү элементтары күҙәтелгән халыҡ.

**➔ Һәр сәфәр - аралашыу, яңы танышлыҡтар, яңы идеялар һәм яңы илһам сығанағы. Сығыш яһаусылар араһында, йөрәктәрҙә оскон ҡабыҙҙы, тип әйтерлек башҡарыусыны йәки төркөмдә тапҡаныҙмы, ишеттегеҙме, күрҙегеҙме?**

- Һәр сәфәрҙең асылын тулыһынса асып ҡылыҡһырлайһығыҙ. Ысынлап та, әгәр ул уңышлы булһа, яңы идеяларға этәрә, дәртләндерә. Беҙҙе тамашасының сығышыбыҙҙы нисек ҡабул итеүе, уларҙың фекерҙәре илһамландыра, артабан үҫергә, донъяны һоҡландырырға этәргес көс булып тора. Өфөлә башҡорттарҙың милли музыка ҡоралы - ҡурай менән таныштыҡ. Әйе, уның тауышы илһамландыра, теләһә ниндәй көйҙә башҡара алырлыҡ ҡурайсыларығыҙ булыуы һоҡландыра. Музыкант булараҡ әйтәм, милли музыка ҡоралдарында быны эшләүе бик ауыр, сөнки уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ ҡорололошо, көйләнеше бар. Ҡурайҙы тыңлағандан һуң, уны үҙебеҙҙең композицияларҙа ҡулланыу идеяһы тыуҙы, хатта ниндәй урында яңғыраясағын да ишетәм. Ысынлап та, был мондо, тембрҙы онотоу мөмкин түгел. Хәҙер Эрик Мукеның ни өсөн ошо милли музыка ҡоралы тураһында иҫе китеп һөйләгәнен аңлайым.

Үҙебеҙ сығыш яһағандан һуң, тәүҙә тыныс ҡына, һуңынан ҡыҙыҡһынып, аҙаҡ инде һоҡланып, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөнөң сығышын ҡараным. Уның көйҙәргә нисек итеп милли элементтарҙы индереп ебәреүе оҡшаны. Шәхсән минең өсөн был да үҫештең бер төрө: фольклор көйҙәре менән генә сикләнеп ҡалырға кәрәкмәй, милли музыканы үҫтереү принцибы мөһим. Ниндәйҙер элементтарҙы үҙебеҙгә алып, "Ойме" төркөмөнөң яңы материалында ҡулланырмын тип уйлайым. Сөнки беҙ хәҙер, экспедицияларыбыҙҙа фин-уғыр ареалынан сыҡҡан кеүек, ижадыбыҙҙа ла фольклор төркөмө сиктәренән сығабыҙ. Эрҙә, мөкшә, шокша йырҙарынан тыш, программала башҡа телдәрҙә лә йырҙар яңғыраясаҡ. Мәҫәлән, күптән түгел нигеҙендә авар мотивтары ятҡан трек яҙҙырҙыҡ һәм авар телендә йырлайбыҙ. Шулай уҡ лезгинка ритмдарын да ҡулланабыҙ. Даргин, венгр, вепс телдәрендәге трекtar эшләнә.

"Арғымаҡ" төркөмөнөң сағыу сығышын ҡарағандан һуң, ҡурай менән генә түгел, башҡорт фольклоры менән дә яҡындараҡ танышыу теләге тыуҙы. Башҡортостанда эрҙәндәр ҙә йәшәй, шуға күрә, берлектә экспедиция үткәреп, эрҙән йырҙарын һәм фольклорын йыйып, бер үк ваҡытта башҡорттарҙың музыка фольклоры, этнографияһы менән дә танышырға мөмкин.

Беләһегеҙме, экспедициялар ваҡытында эрҙәндәр, мокшалар менән аварҙарҙың, даргиндарҙың бик күп уртаҡлыҡтарын таптыҡ. Башҡорттар беҙгә яҡынырaҡ, шуға уртаҡ нәмәләр күберәк булыр, тип уйлайым. Гәмәлдә, бихисап халыҡ һәм милләт йәшәп, һәр береһе үҙе телендә һөйләшеп, илдең мәҙәни код тип аталған дөйөм уртаҡлыҡтар ярҙамында берләшеп тороуын күҙәтеүе ҡыҙыҡ. Рәсәй шуның менән көслө лә инде.

**➔ Туған телгә һөйөү, илһөйәрлек тәрбиәләүҙә мәҙәниәттең һәм сәнғәттең роле ниндәй? Һеҙҙең өсөн нимә ул туған тел?**

- Юлымда бары тик ыңғай йөгонто яһаған кешеләр осрауы менән бәхетлемендер. Милләтем буйынса эрҙән булһам да, 6 йәшемдә балалар баҡсаһындағы ниндәйҙер байрамға милли костюм кейеүҙән баш тартҡанымды, миңә оҡшамай, тип яуаплағанымды иҫләйем; 11 йәшемдә "Торама" милли ансамбле етәксеһе Владимир Ромашкинға үҙ телемдә йырламайым, нимәгә ул миңә, тигәнем хәтерҙә... Һәм ҡапыл, 16 йәшемдә, инде үҙемдең автор йырҙарымды яҙа башлағанда, Ромашкин миңә рус текстарын эрҙән теленә тәржемә итергә тәҡдим итте. Тап ошо ваҡытта һынылыш булды тиергә мөмкин. Әлбиттә, Мордовия Республикаһында тыуыуым, бик йыш ауылда булыуым, эрҙәндәрҙең характер үҙенсәлеген, темпераментын һеңдереп үҫеүем дә булышлыҡ иткәндер. Әммә, үкенескә күрә, мин ҡала балаһы һәм ул ваҡытта мәктәптә туған тел уҡытылманы, ғаиләлә лә үҙ телебеҙҙә һөйләшмәнек. Хәҙер, глобалләшеү процестары барғанда, был хаҡта хыялланыу һәм быға саҡырыу ҙа ауыр. Әммә мин туған телдәрҙе үҫтереүгә һәм нығытыуға, һаҡлап ҡалыуға этнос эсендәге никахтар ярҙам итә, тип иҫәпләйем. Шулай уҡ Эстония, Финляндия миҫалы ла фәһемле: уларҙа ғаиләлә бер нисә телдә һөйләшәләр, шул уҡ ваҡытта тәүге урында туған тел, йәғни әҙсәлек һөйләшкән тел тора. Артабан инде күпселек һөйләшкән тел. Өҫтәүенә, практика күрһәтеүенсә һәм раҫлауынса, ике тел белгән балалар өсөнсө телде лә еңел үҙләштерә. Был баланың аналитик һәләтен дә үҫтерергә ярҙам итә. Мине ғаиләлә туған телемдә һөйләшергә өйрәтмәнәләр, мәктәптә уҡытманылар, ә бына хәҙер миңә туған телем бик ныҡ кәрәк. Даими рәүештә скайп аша дәрестәр алырға тура килә. Ә телде олоғая бара өйрәнеү ғаҡышсытырмаса ауырыраҡ, өсөнсө - инглиз теле лә ауырлыҡ менән бирелә.

Әле туған телдәрҙе өйрәнеүҙе ирекле итеү тураһында һүҙ алып баралар. Минеңсә, был, рус кешеһе милли телдәрҙе өйрәнергә тейеш, тигәнде аңлатмай. Был мәсьәләне һәр республика үҙе көйләргә, халыҡтар үҙҙәре хәл итергә тейеш. Бында проблема туған телдәрҙең нисек уҡытылыуында. Мәҫәлән, Дағстанға йәки Сергиев Посадҡа барып, ойошторған экспедицияларыбыҙ буйынса OYMEexpeditions күргәҙмәһе, эрҙә һәм мокшалар менән таныштырҙыҡ икән, байрамдар, милли уйын ҡоралдары тураһында һөйләйбеҙ, шаяртабыҙ, көлдөрәбеҙ һәм барыһы ла еңел генә килеп сыға - бер ниндәй рәсмилек юҡ. Тамашасылар йәйләп ниндәйҙер һүҙҙәрҙең эрҙә телендә нисек булыуы менән ҡыҙыҡһына башлай, рәхмәт нисек була, һаумыһығыҙ... Ҡыҙыҡһыналар һәм ошо һүҙҙәрҙе өйрәнәләр. Шуға күрә, телдәрҙе өйрәнеү нигеҙендә уйын элементтары, еңеллек, уҡытыусы менән уҡыусы араһындағы диалог булырға тейеш, ә материалды ҡоро ғына аңлатыу түгел. Кино ла, анимациялар ҙа, комикстар ҙа, тетрҙар ҙа - барыһы ла милли телдәрҙе өйрәнеүгә булышлыҡ итергә тейеш. Һәм, әлбиттә, музыка. Әйтәйек, беҙ йәштәргә яҡын формала йырлап, электрон, рок, ҡайһы берҙә джаз, поп-музыка яңғырашин файҙаланып, сығышыбыҙҙы оолларға түгел, йәштәргә төбәйбеҙ. Һәм йәштәр ҡыҙыҡһына, ә бына ауылығыҙҙа йырлаған йырҙарҙы йырлағыҙ әле, тип һорай башлай. Аралашыуҙың еңел формалары аша беҙ тамашасыны сығанағына, тамырҙарына алып ҡайтабыҙ.

Бөгөн китапханала ултырырға, өйҙә китап тоторға ваҡыт юҡ, барыһы ла интернетты, гаджеттарҙы файҙалана. Ә ҡалын-ҡалын һүҙлектәрҙе күтәреп йөрөп булмай. Шуға күрә, барлыҡ ҡағыҙ баҫмаларҙың мобиль ҡушымталары булырға тейеш. Бәлки, ябай ғына уйындар кәрәктер, унда ябай һүҙҙәр туған телдәрҙә менәр тапҡыр ҡабатланһа, барыһы ла аңлаясаҡ. Минеңсә, әлегә быларҙың береһе лә юҡ. Быны мин туған эрҙән телен өйрәнеү тәжрибәмдән һәм нимә кәрәклегенән сығып әйтәм: Дағстанда, Англияла, Эстонияла йәки башҡа ерҙәрҙә булғанда ла эрҙән телен онлайн өйрәнергә мөмкин, әммә быны өсөн мөмкинлектәр булырға тейеш, ә эрҙән-рус, рус-эрҙән һүҙлектәре әлегә телефон ҡушымталарында юҡ.

Ә милли мәҙәниәт - ул һоҡланғыс! Сит илдәрҙән килеүселәр Рәсәйҙә нимәгә иҫтәре китә - күп милләтлелеккә, күп теллелеккә, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең күплегенә. Улар: һеҙ бик күпте беләһегеҙ, күпте һаҡлайһығыҙ һәм үҫтерәһегеҙ, ә беҙ күп нәмәне юғалтҡанбыҙ, ти. Ысынлап та, ҡайҙалыр Лондонда булғанда үҙеңдең Рәсәйҙән булыуың, милләтең эрҙә икәнлеген әйтеп, ошо хаҡта ҡыҫҡаса ғына һөйләгәндә күңелдә ғорурлыҡ тойғоһо уяна. Әлбиттә, һорау бирә башлаһалар, әлегерәк минең инглиз телендәге һүҙ байлығым етмәй ине, хәҙер бындай һорауҙарҙы бик күп һәм йыш бирәләр, шуға күрә яуаптарым да киңәйә бара. Һәм "Ойме" командаһынан һәр кем музыка, инглиз теле, хәрәкәттәр, мимика, хис-тойғолар аша халҡыбыҙҙың ғына түгел, Рәсәйҙә йәшәгән башҡа халыҡтарҙың традицияһы, башҡа үҙенсәлектәре тураһында һөйләй. Һәм был бик яҡшы! Ышанығыҙ, теләк булғанда һәр кем үҙенең милләтенең, тыуған ерҙең иленең патриоты була һәм үҙенең күп милләтле ватаны менән ғорурлана ала.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

АФАРИН!

# УРАЛ БАТЫР БӨРККӘН ТЕРЕҺЫУҒА...

## йөрәк тауышын ҡушты балалар

(Башы 1-се биттә).



Быйыл егерменсе тапҡыр үткәрелгән йыйын - юбилей бәйгеһе тип иғлан ителде. Иң тәүгеләренән бер нимәһе менән дә айырылманы кеүек ул - ҡобайырға тереһыу бөркөргә, уны яңғыратыр өсөн хәтер, йөрәк һәм күңел көсөн йәлләмәҫкә генә кәрәк ине... Баһалама төркөмө генә түгел, бик күп тамашасы, уҡытыусылар, ярышсылар тыңларға әҙер уны. Ә бар тәбиғәт, ҡуҡтәге Ҡояш, бейек зәңгәрлектә йөҙгән Самрау батша һәм Инсебикә ҡаяһына мөхәббәт йырын йырлап уҙған уйсан серле Ағиҙел - иң мөһиме, улар һәммәһе лә беренсе турҙа сығыш яһаясаҡ балаларға рәхмәтле һәм тел асҡысы теләй...

Беренсе булып Архангел районы Оҙонлар ауылынан Луиза Әйүпова сәхнәгә күтәрелә: "Борон-борон борондан, кеше-маҙар килмәгән, килеп аяҡ баҫмаған..." Тәүге ҡобайыр юлдарын кинәнеп тыңлайбыҙ, күңелдәр күтәрелә, бер-беребеҙҙе ҡотлайбыҙ... Ләкин күктә ҡара болоттар ҡуйыра, ел көсәйә... Һауа торошо ныҡ үҙгәрәсәк, тинеләр шул. Тимәк, Бөрйән урманы юҡҡа гөжләмәй. Сәхнәлә торған микрофон таяғы болғана, ел сәхнәне йолҡҡолай...

Икенсе булып сығыш яһарға тейешле Учалы ҡыҙы Ләйсән Золотарева ни хәтле генә тырышмаһын, тәбиғәт ҡөҙрәтен еңә алманы, дауыл көсәйгәндән-көсәйҙе, жюри ҡыҙҙы һөйләүенән туҡтатып, икенсе ышыҡ сәхнәгә күсергә ҡарар итте. Ярты сәғәттән һуң ҡойма ямғыр шауы, ел геүләүе аҫтында беҙ Ләйсәнде артабан тыңланыҡ. Үҙен ҡыйыу һәм тыныс тота ул, ышанысы сығыш яһай, ҡобайыр геройҙарының бөтә ажарын, әрнеүен, хәсрәтен нисек тауышына күсерә ала ул бала? Ләйсән эпосты тулыһынса ятлауы хаҡында иғлан иткәс, бөтә дүрт мең ярым ҡобайыр юлдарын барлап-бүлеп киттек. Талантлы ҡыҙыбыҙ баһамандарҙы һөйөндөрөп, тамашасыны ҡул саптырып, юғары балдар яуланы. Биш минуттан ул серле шаман ҡыҙыныҡы кеүек сәхнә ҡулдәгән алмаштырып, донъяһын онотоп интәштәре менән уйнай, йүгереп-шаярып йөрөй ине... Ләкин дүртенсе класты ғына тамамлаған баланың эпосты тулыһынса ятлауы көтөлмәгән яңылыҡ булды.

Шулай итеп, быйыл беренсе турҙа 48 бала ҡатнашты, йәмғеһе 41 ҡыҙ һәм 7 ир бала, шуларҙың бишәүһе ҡобайырҙы тулыһынса ятлап иштеттерҙе. Айырыуса иҫтә ҡалғандары бар. Әйткәндәй, был турҙа балалар рәхәтләнеп микрофонһыҙ, үҙ тәбиғи тауышы менән сығыш яһаны.

Йылайыр районы Һабыр мәктәбенән Алтынай Атанғолова сығыш яһай башлағайны, беҙ уның килешле сәхнә хәрәкәттәре эпос геройҙарын характерын асырға бик ныҡ ярҙам иткәнен күрҙек. Һабыр мәктәбе республика бәйгеһе тарихында ике гран-при (2001 йылда - Гөлсәсәк Торомтаева менән 2003 йылда - Айрат Атанғолов), бер-нисә призер менән лайыҡлы дан яуланы (уҡытыусылары Фәндиҙә Ҡоҙашева).

Башланғыс синыф уҡыусылары эпосҡа ниндәйҙер балаларса ихласлыҡ, яҡтылыҡ бирә - Ейәнсуранан Илзиҙә Әбделғужина матур, йомшаҡ тауышы менән әкиәти сәхнә күренеше яһаны, Туймазынан Фәрит Яратов ғәжәйеп сағыу, тәүәккәл сығышы менән бик ҙур өмөттәр уятты, киләсәктә ул "Урал батыр" бәйгеләрен күтәреп-башлап йөрөүсе ег булыр, тинек. Шишмәнән килгән Айһылыу Ғаймалова үҙенең сығышын ҡурай моңо менән биҙәне, Туймазы ҡыҙы Айгизә Ғәлиуллина (8 йәшлек!) саф көмөш тауышы менән сәхнәне сыңлатып ебәрҙе. Хәйбулла районы Вәзәм ауылы балаларына был конкурста ҡатнашыу таныш: сөнки уларҙың Әбеш мәктәбенән ике уҡыусы гран-при яуланы (2006 йылда - Александр Щуплов, 2011 йылда - Ғәзиз Ишмөхәмәтов, уҡытыусылары Әминә Юнысова), әле килеп 1-се кластың тамамлаған Искәндәр Байгилдин көмөш ҡыңғырау кеүек асыҡ тауышы менән Йәншишмә ауазын иштеттерҙе. Искәндәрҙең уҡытыусыһы Айгөл Ҡырғыҙбаева өсөн бик өмөтлө, бәрәкәтле юл асылды - киләһе бәйгеләргә ул вәзәмдәрҙең иң дәртлеләрен һәм аҡыллыларын алып киләсәк.

Бөләкәй балаларҙан Көйөргәҙе ҡыҙы Гөлгөнә Һәүбәнова баһамандарҙы ғәжәпкә ҡалдырҙы: өс мең юллыҡ эпосты бер тында һөйләп бирерлек яҡшы хәтерле булыуына күҙ тейməһен, тимәк, киләсәктә уны тағы иштербеҙ әле... Баҡалы районынан Миләүшә Дусеева шулай уҡ башланғыс класс уҡыусыһы, ул эпостың үҙенә оҡшаған һәм яратҡан өҙөктәрен бик ихласлап, килештереп, бирелеп һөйләне. Стәрлетамаҡтан Ләйлә Тимерғәлиева сығыш яһағанда, был бик тә ҡыйыу һәм үткер ҡыҙ киләсәктә кем булыр икән, "Урал батыр" ҡобайырын белеү уға ни хәтле аҡыл, сабырлыҡ бирһә, Ләйлә лә шул тиклем ҙур маҡсаттарына ирешәсәк, тип уйлап ултырҙыҡ. Ә Өфө ҡалаһынан 122-се мәктәп уҡыусыһы Наҙгөл Ғарифуллина үҙенең думбыраһына ҡушылып, иҫ киткес тасуири биҙәктәр менән, өҙөлөп-өҙөлөп һайраған ҡош шикелле, ҡобайыр әйтеп ташлағас, баһалама төркөмөнөң уға һоҡланыуының сиге юҡ ине... Бөрйән ҡыҙы Сара Истәкованың сығышында мәшһүр ҡобайырҙың аҡылы, балаларса уйын ҡатыш фәлсәфәһе һәм образлылығы ҡыуандырҙы...

Ғөмүмән, ҡобайыр һөйләгән һәр бер бала - бөгөнгө башҡорт теленең, Башҡортостандың көҙгөһө. Ҡобайыр хәтле ҡобайырға тотонған йәштәребеҙ - һанаулы ғына, бөртөкләп кенә йыйылған аҫылташтар, халыҡ байлығы. Беҙгә, өлкәндәргә ҡарағанда, йәш ҡобайырсылар быны нығыраҡ аңлай кеүек тойола ҡайсағында. Юғары синыфтарға еткән һайын улар эпосты һөйләүгә яуаплыраҡ, оҫтараҡ һәм талапсаныраҡ ҡарай. Сибай егете Тимур Байрамғолов ҡобайыр ритмын бөгөнгө сәхнә, эстрада талабына тура килтереп, рэп алымы менән башҡарып күрһәтте. Егеттәрсә ҡыйыу яңылыҡ булды был күренеш. Мин "ҡобайыр башҡарыуҙағы традицион алымдар", "сәсәндәр мәктәбе" һ.б. кеүек әле бер кем тарафынан сикләнмәгән һәм нигеҙләнмәгән теорияларға төшмәй генә шуны әйтә алам: тере тел тирбәлгән, сәсәнһүҙ майҙан тоткан урында бары оҫталыҡты шымартырға һәм халыҡ күңелен арбарлыҡ дәрәжәлә ышанысы сығыш яһау ғына кәрәк.

Был йәһәттән ҡобайырсы-новатор, яңыса вәзен (стиль) таптан бер-нисә сығыш иҫтә ҡалды: Межгорьенан Ләйсән Үтәбаева кеүек оҫта көйләп һөйләүселәр һирәк осрай. Стәрлетамаҡтан Элина Ғәлина кеүек һөйкөмлө һәм тулҡынландырғыс энергетикалы ҡобайырсылар шулай уҡ күп түгел - уны бер күрһәң һәм тыңлаһың, онотоп булмай. Элина биш йәшенән башлап "Урал батыр" менән яҡын "дуҫ", уның һис яңылышмай, ҡошсоҡтай талпынып-илһамланып эпос геройҙарына "йәнен ҡушып" һөйләүе электән күптәрҙе уйға һала ине... Быйдай сығыш һаҡ алыу күптәрҙең хыялы. Өфө ҡалаһынан РИЛИ мәктәбе уҡыусыһы Таһир Шаһморатов сәхнәгә сыҡҡас, баһамандар еңел һулап ҡуйҙы - "ҡобайыр һөйләү - ир-уҙамандар һөнәре". Нимә генә әйтһәң дә, ҡатын-ҡыҙҙар башҡарыуында эпик әҫәрҙең яңғырашы икенсерәк... Егеттәр һөйләй башлаһа, ҡобайыр ысынлап та уяна һәм уята ала.

Әммә ҡобайыр сәхнәгә бер менгән икән, илһам ҡошо талпына, артынан әйҙәй... "Урал батыр" эпосын башҡарыусылар республика бәйгеһен һәм юғары кимәлгә күтәргән һәм был мәғрифәти-мәҙәни-фәнни-халыҡсан сараның бөтә асылын асҡан бер-нисә сығыш була. Бәйгенең башойотҡо һалыусы ойоштороусыһы һәм легендар баһалама рәйесе Әхмәт ағай Сөләймәнов аяғүрә тороп ҡул саблырлыҡ, һөйөнсөләп оран һалырлыҡ сағыу һәм фәһемле сығыштар ҙа була. Егерменсе бәйгелә ифрат тәплө һәм ныҡлап әҙерләнгән ҡыйыу ҡыҙҙар сығышы булды. Улар эпос геройҙары булып күҙ алдында ҡалды: Йылайырҙан Гөлнәзирә Мәхмүтова әҫәрҙе тулыһынса ятлаған, уның Һомайы ғәжәп бер фәнтәзи сағыу байрамса образ. Өфө районынан Ғәлиә Вәлишина сәхнәүи артистарса драматик сығыш яһай ала. Учалынан Лениза Шәйхетдинованың күҙ алдында нисә төрлөгә әйләнеп, һәр образға йөрәк хисен ҡушып, йомарт асылыуын күреп, һоҡланмай мөмкин түгел. Кем, ҡасан, нисек өйрәтә был балаларҙы, тип уйлап ҡуяһың да, күптәре ҡобайыр эсендә үҙ теләктәре һәм һәләттәре менән йәшәүен күреп, йәнә ғәжәп итәһең... Халыҡ ижадының сихри көсө ошо микән?

Ейәнсура ҡыҙы Азалия Шаһмөхәмәтованың, Бөрйәндән Илгизә Йәрмөхәмәтованың, Баймаҡтан Рәзинә Шаһмөхәмәтованың, Күмертауҙан Гөлназ Үтәгәнованың ҡобайыры ҡолаҡта сыңлай. Улар үҙ тауышын тапҡан, тиергә кәрәк. Был юлы Тәтешле ҡыҙы Һылыу Фәтхетдинованың дәртле һәм сая сығышы яҙғы шишмә һыуы кеүек ташып-ярһып торҙо. Хәйбулла ҡыҙы Мәзинә Аҡилова үткер артист һәләте менән һөйөндөрҙө. Дәүләкән ҡыҙы Илнура Сафина "ниндәй батыр, шәп ҡыҙ!" тигән баһа алды, ҡобайырға бөрккән тереһыуға үҙ йөрәк тауышын һис йәлләмәй ҡушты ул.

Һәр бәйгенең бер асышы була. Егерменсе конкурста Ишембай ҡалаһының Зәки Вәлиди исемендәге 2-се гимназия-интернат уҡыусылары үҙ оҫталығын йәнә бер-нисә мәртәбә иҫбат итте. 2010 йылда Рәсилә Хисмәтуллина, 2014 йылда Ислам Төхвәтуллин, 2016 йылда Гөлфруз Хисмәтуллина, быйыл иһә - 2018 йылда Гөлсәсәк Шәрипова - гран-при хужалары булды. Уларға эйәреп, Ғәлиә Шәрипова 1-се урынды яуланы. Уҡытыусылары Рифат Әйүпов, Гөлнур Аҙнабаева, Фәгөл Әмирханова йылдар буйы ваҡытын-илһамын биреп өйрәткән йәш ҡобайырсылар бит улар!

Әйткәндәй, быйылғы баһамандар араһында ике элекке еңеүсе ултырыуы бик шатлыҡлы яңылыҡ ине. Ислам Төхвәтуллин менән Гөлнара Ҡаҙарбаева үҙҙәре эпосты тулыһынса белә, телгән урындан тотоп һөйләй ала, сәхнәлә башҡарып күрһәтә... Мәғариф министрлығының бәйгене яңы заманса форматтарға уңышлы күсереүенең бер яғы был. Килер заман, баһалама төркөмө тик уларҙан - йәшлек аҡылын, дәртен һалып халыҡ ҡобайырын ятлаған һәм ил алдына баҫып үҙ оҫталығын иҫбат иткән сәсәнһүҙ эйәләренән торор. Миненсә, йәштәребеҙ үлемһеҙ ҡобайырҙан рухланып, донъяуи белемен арттырып, халҡыбыҙ өсөн ғәзиз ҡомартҡыны һаҡлаусы һәм яҡлаусы мөстәҡил көс булыр. Киләсәктә "Урал батыр" - башҡорт халыҡ ҡобайыр сәнғәтен өйрәнеү һәм үҫтереү фәнни-тикшеренеү институты асылыр, бөгөнгө бәйгеселәр уның төп хеҙмәткәрҙәре, фән докторҙары булыр.

Артабан егерменсе бәйгенең икенсе туры башланды. Егерме төркөм егерме төрлө сәхнә тамашаһы алып килгән. Йәкмәткеләрендә - башҡорт эпостарынан күренештәр. Әлбиттә, "Урал батыр" ҡобайыры персонаждары - балалар уйнап туймаҫлыҡ, танһыҡ матур образдар. Күмертау, Сибай, Ҡырмыҫҡалы, Баймаҡ, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Әбйәлил, Ғафури, Салауат, Ишембай, Белорет, Бөрйән районы ижади төркөмдәре ҡобайырҙың төп ваҡиғаларын сәхнәләштергән. Араларында Мәләүез Һомайы, Әбйәлил Урал батыры, Учалы Шүлгәне, Ишембай Шүлгәне, Сибай Урал батыры, Белорет Һомайы менән Зәрҡумы, Бөрйәндең Алтын өйрәге, Хәйбулланың Һомайы, Күмертауҙың Йәнбирҙеһе тигән сағыуҙары балҡыны.

Башҡа башҡорт эпостарынан инсценировкалар уйнаған төркөмдәр ҙә хәтерҙә ҡалды: Өфөнән Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының ғәжәп динамикалы, теүәл сәхнәүи хәрәкәтле, йырлы-уйынлы "Ҡара юрға" мюзиклы, Шишмәнән талғын һәм ягымлы "Заятүләк менән Һыуһылыу" сәхнәһе, Дыуандан "Уҙаҡ менән Туҙаҡ" иртәгенән драматик күренештәр - һәр ҡайһыһында балаларҙың ижади эҙләнеүе, сәм һәм һәләтлелек ярылып ята. Эпик әҫәрҙе сәхнәләштереүҙең ниндәй ҡатмарлы эш икәнен театр белгестәре яҡшы белә, әммә беҙҙең киҫәк балалары һәр йыл һайын Урал батыр тәглимәте менән рухланып, уға эйәреп тәүәккәлләп, эпостарҙы сәхнәгә сығара... Мәктәп драма коллективтарын илгә таныткан фиҙакәр етәкселәр - режиссерҙар һәм ҡуйыусыларға ихлас күңелдән рәхмәт әйтке килә: Илнур Лоҡманов (Өфө), Гөлдәр Сафиуллина (Учалы), Сәриә Ҡаһарманова (Белорет).

"Урал батыр" ҡобайырын яттан һөйләүсе мәктәп уҡыусылары әлегә сәсән дә түгел, сәсән мәктәбенә лә йөрөмәйҙәр, бары тик улар үлемһеҙ эпик ҡомартҡыбыҙға тағы ла йән өрөп, ҡанат ҡуйып, телгә алып, халыҡ алдына сығарыусы ғәжәйеп бер быуын, замана балалары. Был сауаплы эштәре бушҡа китмәҫ. Башҡорттоң һәләтле һәм аҡыллы йәштәре халыҡ ижадының иң ҡиммәт өлгөләрен бер ҡасан да ситкә ҡуймаҫ, урап-тапап үтмәҫ. "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы артабан Уралтау буйлап ижади сәйәхәткә сығасаҡ, яңы төбәктәрҙә яңы дуҫтар табыу һәм Урал батыр рухташтарын арттырыу бурысы менән тулы был бәйге Башҡортостанда башҡорт теленең һәм башҡорт тарихының иң тамырлы, иң тәңһыллы тотҡаһы һәм һаҡсыһы булып ҡаласаҡ.

**Сәрүәр СУРИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҺИМЕРЕҮ ЙОҒОШЛО

■ Бөтөн донъя сәләмәтлек ойошмаһы ауырыуҙар исемлегенә видео һәм цифрлы уйындарҙа уйнарға яратыуҙы ла индергән. Дөрөҫөрәге, ул хәҙер рәсми сир. Ун йыл дауамында төҙөлгән был исемлектең ошо көндәрҙә 11-се баҫмаһы донъя күрҙе. Әгәр ҙә уйындар көндәлек башҡа эштәрҙән, кешенең ҡыҙыҡһыныуҙарынан өҫтөн ҡуйыла башлай икән, уны сир тип иҫәпләргә мөмкин. Тик уны сир тип таныр алдынан был ғәҙәттең шәхси, ғаилә һәм социаль тормошона зыян килтереүе һәм бер йыл тирәһе дауам итеүе кәрәк. Ҡайһы бер илдәрҙә күптән был сирҙән дауалау алымдары ла эшләнгән.

■ Массачусетс дауаханаһы белгестәре даими рәүештә йоҡоһо туймаған үҫмерҙең һимереүе ихтимал тип белдерә. Бынан тыш, уның ҡан баҫымы ла күтәрелә. Былар иһә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен арттыра. Тикшеренеүҙәрҙә 829 үҫмер ҡатнашҡан. Улар 10 көн дауамында йоҡо сифаты һәм физик әүҙемлекте күҙәткән ҡоролмалар йөрөткән. Бил үлсәме, ҡан баҫымы үлсәнгән, холестерин һәм инсулинға ҡаршы тороу кимәле тикшерелгән. Үҫмерҙәрҙең яртыһы төүлегенә 7,4 сәғәт йоҡлаған. Уларҙың 2 проценты 8 йәки 9 сәғәт йоҡлаған. Ҡатнашыусыларҙың күбеһенең йоҡо сифаты түбән булып сыҡҡан. Яҡшы йоҡлау өсөн ҡан быҫымы нормала, ә бил үлсәме, холестерин кимәле түбән булырға тейеш.

■ Гуэлф университеты белгестәре эндокрин һәм йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһаған ризыҡтарҙы асыҡлаған. Йәшел һәм ҡыҙыл яҫы борсаҡты йышыраҡ ашарға кәрәк, тигән фекерҙә улар. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың беренсе төркөмө дөгө һәм картуф менән туҡланған, икенсе төркөм картуф менән дөгөгә ҡушып яҫы борсаҡ ашаған. Ашарҙан алда һәм ашағандан һуң уларҙың ҡанындағы шәкәр кимәле һәм ҡан баҫымы тикшерелгән. Икенсе төркөмдөң һөҙөмтәләре күпкә яҡшыраҡ булып сыҡҡан. Мәҫәлән, картуфтың үҙен генә ашағанда шәкәр кимәле ныҡ күтәрелә, ә яҫы борсаҡ ҡушып ашағандан һуң уның кимәле 35 процентҡа түбәнәйгән. Бынан тыш, яҫы борсаҡ холестерин кимәлен түбәнәйтә, ҡан баҫымын нормаға килтерә. Сөнки ул витаминдар һәм микроэлементтарға бай.

■ Көньяҡ Калифорния университеты белгестәре һимереү кешенән кешегә күсә ала, тип иҫбатлай. Кем һимеҙ кешеләр менән йышыраҡ аралаша, уның үҙенә лә һимереү хәүефе янай, имеш. Был теорияны улар түбәндәге эксперимент аша раҫлай. Үҫмерҙәрҙең сәләмәтлегенә уларҙы уратып алған мөхиттең йоғонтоһо һәм туҡланыу ғәҙәттәренең үҙенсәлеген тикшереүгә арнала ул. Һынауҙарҙа ата-әсәһе (бөтәһе 1300 кеше) Американың хәрби базаларында хеҙмәт итеүсе 1111 бала ҡатнаша. Һимеҙ балаларҙың һаны уларҙың ниндәй округта йәшәүенә лә бәйле булыуы асыҡлана. Мәҫәлән, бер штатта һимеҙлек менән яфаланыусы үҫмерҙәр 21 процент булһа, икенсе штатта 38 процентҡа етә. Етмәһә, базала хеҙмәт итеүселәр араһында һимеҙҙәр күп булһа, балалар араһында ла улар күберәк булып сыҡҡан. Ғалимдар бының сәбәбен шунда күрә: кешенең туҡланыу ғәҙәтен уны уратып алғандар булдыра.

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ



# УРМАНДАРҒА КЕРҺӘМ,

## аҙаштиһәм...

**Йәй - отпускылар мәле. Сит ил тауарҙарын һәм хеҙмәттәрен ватан етештереүсеһенеке менән алмаштырыу башланғас, күптәр диңгеҙ яры урынына Башҡортостан урмандарын һайланы. Туристар хәҙер нигеҙҙә Бөрйән һәм Белореттың тәбиғәт ҡосағына күпләп ағыла. Республикала ауылдар араһы 30 километр тирәһе, бик теләгәндә лә аҙашыу мөмкин түгел. Әммә кешеләр бик йыш аҙаша, хатта юғала ла. Шуға ла был яҙмамдың кемгәләр файҙаһы тейеүе лә бар, тигән уйҙан сығып яҙам. Мин үҙем туристан бигерәк, һунарсымын. Ләкин урман ҡанундары барыһы өсөн дә бер.**

Бәлки, иң тәүге кәңәшем ябай тойолор, әммә тап ошо элементар ҡағиҙәне белеү зарур. Һәр ваҡыт (хатта аҙашырға планлаштырмаһағыҙ ҙа) барасаҡ ерегеҙ менән карта буйынса, кешеләрҙән һорашып, ныҡлап танышығыҙ. Шулай уҡ донъя яҡтары буйынса ла йүнәлеш билдәләргә өйрәнегеҙ. Мәҫәлән, тирә-яҡтағы иң бейек тау базанан (һеҙ сығып киткән урындан) төньяҡта урынлашҡан икән, тимәк, база һәр саҡ унан көньяҡта буласаҡ. Һәр саҡ шундай бер нисә билдәле ориентир билдәләгеҙ. Ул йылға булыуы ла мөмкин. Мәҫәлән, базанан йылға үренә китһәгеҙ, кире уның ағышы буйлап барырға кәрәк. Мотлаҡ тирә-яҡтағы барлыҡ ауылдарҙың һәм уларҙың бер-береһенән нисә километр алыҫлыҡта урынлашҡанын асыҡлап, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Һәр ваҡыт донъя яҡтары һәм поход дауамында даими ориентирҙар менән йүнәлеште тикшереп тороу мөһим. Төркөм етәксеһенән йәки урманда күп йөрөгән кешенән сәғәт йәки ике сәғәт һайын әлеге ваҡытта ҡайһы тирәлә булыуығыҙҙы, базаның ҡайһы яҡта ҡалыуын, уға тиклем нисә саҡрым икәнлеген, теге йәки был ауылдың ҡайһы яҡта булыуын һәм уға тиклем нисә километр ҡалғанын белешеп тороғоҙ. Тиҙҙән бындай тәжрибә һеҙҙә геолокация тойғоһон тәрбиәләйәсәк.

### Кәрәк-яраҡ

Барлыҡ әйберҙәрҙе мин өс категорияға бүләм:

1. Ҙур рюкзакка (йәки бер нисә сумкала) тултырылғандары. Уларҙы барлыҡ, хатта уйламағанда килеп тыуған осраҡтарҙа ла ҡулланырға була.

2. Бәләкәй рюкзактағы әйберҙәр. Ул һәр саҡ һеҙҙең менән, уға ҙур һунар бысағы, тоҙ, кружка, мини-аптечка, уртаса фонарь, полиэтилен чехолдағы шырпы йәки брезент тышлыҡтағы зажигалка, ярты рулон сүп-сар пакеты (төрлө осраҡта файҙаланырға мөмкин, хатта һыу биҙрәһе итеп тә), ҡоро паек туплanмаһы, тент-гамак, ярты рулон бәҙрәф ҡағыҙы (ҡулланылышы киң), еүеш салфеткалар һәм... запас носкиҙар, футболка. Носки һыуланырға, аяҡты өйкәргә йәки һалҡын алдырыуға сәбәп булырға мөмкин. Походта футболка ла тирҙән еүешләнә. Шуға уларҙы мотлаҡ алмаштырыу кәрәк.

3. Кеҫәгеҙгә (рюкзактың юғалыу ихтималлығы ла бар) бәләкәй, әммә ҡеүәтле фонарь, тағы ла шырпылар (шулай уҡ полиэтилен пакетта), бәләкәй, асылмалы бысаҡ, ике пачка ҡағыҙ ҡульяулыҡ, төрлө төҫтәге ракеталар тупланмаһы менән һунарсылар ракетницаһы һәм GPS юлдаш программаһы яҙҙырылған телефон, тағы ла сәғәт һәм куртка замогына элеп ҡуйырлыҡ бәләкәй компас һалығыҙ.

### Әгәр аҙашһағыҙ...

Был осраҡта ла ябай ҡағиҙәләрҙе ҡабатлайым. Был турала күп яҙалар һәм шәхси тәжрибәмдән сығып, шуны әйтә алам: уларҙың барыһы ла дөрөҫ.

1. Паникаға бирелмәгеҙ. Бындай осраҡтарҙа был иң ябай кәңәш һәм уны үтәргә кәрәк. Үҙем өс тапҡыр һунарҙа аҙаштым һәм өсөһө лә ҡышын булды. Хатта һуңғыһында иптәштәрем, минең аҙашҡанымды аңлап, эҙләргә лә уйламағандар, үҙемдең юлды табырыма ышанғандар. Бары тик юлдар сатында бер янып, бер һүнеп тороусы фонарҙе маяҡ урынына ғына ҡалдырғандар. Уға юлыҡҡас, мин эҙҙәр буйынса уларҙың артынан ауылға тиклем урман эсенән 12 километр ара барырға тейеш булғанмын.

**Әйтеүе еңел, әммә кеше, ғәҙәттә, паникаға бирелеүсән. Быға юл ҡуймаҫ өсөн ҡайһы бер нәмәләрҙе хәтергә һалып ҡуйырға кәрәк:**

- Башҡортостанда ауылдар араһы 30 километр самаһы. Ҡайһы бер ваҡытта унан да әҙерәк. Был арауыҡты бер көндә үтергә мөмкин;

- Паникаға бирелмәйенсә, бер-нисә дөрөҫ ғәмәл башҡарғанда, тиҙ арала дөрөҫ юл табырға була. Был турала һуңыраҡ аңлатырмын;

- Башҡортостанда аҙашҡан кеше бер ваҡытта ла һыуһыҙлыҡтан интекмәйәсәк, сөнки һыу сығанаҡтары бик күп;

- Ул бер ваҡытта ла астан үлмәйәсәк, был турала ла саҡ ҡына һуңыраҡ;

- Иң мөһиме: Башҡортостанда йәшәүсе ҡырағай хайуандар кеше өсөн ҡурҡыныс түгел. Был хаҡта ла саҡ ҡына һуңыраҡ.

2. Аяҡтарығыҙҙы, битегеҙҙе (күҙегеҙҙе) һәм тәнегеҙҙең башҡа ағзаларын һаҡлағыҙ. Ҡайһы берҙә кешеләр паникаға бирелеп, ян-яҡҡа бәргеләнеп, сәбәләнеп, ботаҡтарға, аяҡ аҫтына ҡарамай саба, һөҙөмтәлә йәрәхәт ала. Ә тәбиғәттә яңғыҙ ҡалғанда кешегә һаулыҡ ныҡ кәрәк. Бигерәк тә аяҡтарҙы һаҡлағыҙ: йәрәхәттән, еүешләнеүҙән, өйкәләүҙән.

3. Ориентир табырға тырышығыҙ. Иҫегеҙҙә төшөрөгөҙ: тау-ориентир, йылға-ориентир һ.б.

4. Дуҫтарығыҙға тауыш сигналы бирегеҙ. Тауҙарҙа тауыш алыҫҡа тарала, хатта улар ағас менән ҡапланған булһа ла.

Әгәр бер нәмә лә яҙҙам итмәне һәм һеҙ аҙашҡанлығығыҙға ныҡлап инанһағыҙ, был хәлдән үҙаллы сығырға тырышығыҙ.

### Урмандан нисек сығырға?

Аҙашҡан кеше алдағы барлыҡ кәңәштәргә лә күҙ йомдо һәм урында донъя яҡтары буйынса ориентир таба белмәй икән, ти. Ундайҙарға нишләргә?

Тағы ла мөһим әһәмиәткә эйә бәләкәй генә сер: барлыҡ бәләкәй генә йылғалар ҙурыраҡ йылғасыҡтарға ҡоя, ә улары - тағы ла ҙурырағына. Йылғасыҡ йәки йылға яры буйлап барғанда мотлаҡ ниндәйҙер торлаҡҡа юлығырға мөмкин. Шуға күрә, һәр саҡ йылға ағымы буйлап барығыҙ һәм ныҡлышмаҫһығыҙ.

Ә бәләкәй йылғасыҡты нисек табырға? Уның өсөн үҙән эҙләгеҙ. Теләһә ниндәй үҙән яҙғыһын ҡар һыуы аҡҡан урынға ағып төшәсәк. Һыу йыйған юл һеҙҙе яҡындағы йылғаға алып барасаҡ. Йылға - ҙур йылғаға, ҙур йылға - торлаҡҡа алып сығасаҡ. Был бик ябай, әммә һөҙөмтәле ысул. Үҙән эҙләгеҙ!

Тағы шуныһы: һеҙҙе эҙләйҙәр икәнен дә онотмағыҙ һәм уларҙың эшен еңеләйтегеҙ: мөмкин тиклем күберәк эҙ ҡалдырығыҙ (тәмәке төпсөктәре, кейем киҫәктәре, дымлы урында аяҡ кейеме эҙҙәре). Улар һеҙҙең йүнәлеште күрһәтергә тейеш. Шулай уҡ ағастарҙа, ботаҡтарҙа йүнәлеш уғы эшләгеҙ.

Бер ваҡыт һунарҙа бер дуҫыбыҙ аҙашып ҡалды. Уны көн үҙәгендә һунар урынынан алыҫта, сигнал атыуҙан һуң иң күренгән урынға һалып ҡалдыра барған гильзалар, үҙе эшләгән юл күрһәткестәре буйынса таптыҡ. Эҙләй башлағанда уның атыу тауыштарын ишетмәнек, әммә гильзалар һәм юл күрһәткестәре бик ныҡ ярҙам итте. Һуңынан атыу тауыштарын да ишеттек һәм шулай аралаштыҡ.

Шулай уҡ сигнал биреүҙең яҡтылыҡ ысулы ла бар. Хәҙер һатыуҙа ҙур булмаған, әммә ҡеүәтле, ҙур радиуслы светоид фонарҙар бар. Уларҙың нурын төнгө һауаға йүнәлтһәң, уны алыҫтан күрергә мөмкин. Бигерәк тә ямғыр, ҡар ваҡытында яҡтылыҡ яҡшы күренә. Беҙ бындай ысулды төнгө һунарҙа ҡулланабыҙ. Хатта үҙебеҙҙең шартлы сигналдар барлыҡҡа килде. Рация һәм кеҫә телефондары булғанда ла, ориентирҙар булмағанда, ҡайҙа икәнлегеңде яҡшы итеп аңлатып булмағанда, был ысул бик ҡулай.

✓ *Әгәр кемдер үҙенә был прививка эшләнгәнме, юҡмы икәнен иҫләмәһә, участка терапевтына мөрәжәғәт итеп тикшертә ала. Әгәр иммунитетығыҙ яҡшы булһа, прививка эшләтергә кәрәкмәй.*



## Урманда ҡунырға тура килһә

Минеңсә, әгәр ҡараңғы төшкәнсе кеше эшмәкәрлеге билдәләрен осратмағанда (урман ыҙаны, урман юлы, алыҫтан ишетелгән тимер юлы тауышы, төнгө күктә шәфәҡ ҡыҙыллығы булып сағылыш тапҡан ауыл уттары), бушҡа ваҡыт әрәм итмәгеҙ. Шырпығыҙ бар икән, усаҡ тоҡандырығыҙ. Шырпығыҙ булмаһа, серем итеп алырға тырышығыҙ, сөнки былай шарттарҙа йоҡлап алыу бик икеле. Нисек кенә булмаһын, серем итеп, хәл алырға кәрәк. Кискә ҡарағанда таң яҡшыраҡ, сөнки көн яҡтыһында урманда кеше йөшөгән ерҙе табыуы еңелерәк. Әгәр быны төндә эшләргә теләһәгеҙ, бары тик көсөгөҙҙө генә әрәм итәсәкһегеҙ. Матур ҡыуыш ҡорорға ла өлгөрмәйәсәкһегеҙ, сөнки ҡараңғы төшкәнсе юл эҙләйәсәкһегеҙ. Әммә ямғыр булһа, ниндәйҙер ышыҡ урын эшләргә мөмкин.

Төнгө урманда кеше бигерәк тә йыртҡыс хайуандарҙан ҡурҡа. Әммә тулы ышаныс менән шуны белдерәм: Башҡортостанда төнгө урман кеше өсөн хәүефле түгел. Иң ҡурҡыныс январ булып айыу иҫәпләнһә лә, ул да балаларына хәүеф янағанда ғына һөжүм итә. Йоҡлаған йәки серем иткән кешегә ул һөжүм итмәй. Шулай ҙа, һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тигәндә лә иҫегеҙҙән сығармағыҙ: ҡурай еләге үҫентеләре, муйыл ағасы тирәһен, көҙөн имән урманы һәм һоло, бойҙай баҫыуын һайламағыҙ. Ҡыҫҡаһы, урманда аҙашһағыҙ, ҡырағай хайуандар тарафынан хәүеф янауы тураһындағы мифты башығыҙҙан сығарып ташлағыҙ. Айыуҙар ҙа, бүреләр ҙә, ҡабандар ҙа ҡурҡыныс түгел, иң хәүефлеһе - йыландар. Шуға күрә аяҡ аҫтына ҡарап йөрөгөҙ.

## Асыҡһағыҙ...

Башҡортостан урмандарында аҙашһағыҙ ҙа, һис ҡурҡыныс түгел. Кеше ризыҡһыҙ 10-14 көн йәшәй ала. Өҫөнсө көнгә асығыу тойғоһо бөтөнләй юғала һәм хатта ашағы ла килмәй башлай. Был - әгәр бер тәгәм дә ҡапмаған осраҡта. Шул уҡ ваҡытта хәл-торош ҡәнәғәтләнерлек була, бер аҙ хәлһеҙлек һиҙелә, әммә ҡурҡыныс түгел.

Әммә урман асығырға бирмәҫ, сөнки ҡырағай тәбиғәттә бөтөн нәмәне ашарға мөмкин: ҡырмыҫҡаларҙы, уларҙың йомортҡаларын, ер ҡорттарын, тәлмәрйендәрҙе, ағас ҡуҫҡарҙарын, ҡырағай ҡоштарҙы һәм уларҙың йомортҡаларын, туҙбаш йыландарҙы, хатта мүкте лә. Мүктең беҙҙә 40 төрө үҫә һәм ул туҡлыҡлылыҡ сифаттары буйынса картуфҡа яҡын. Бары тик уны дөрөҫ итеп әҙерләргә генә кәрәк. Урманда шулай уҡ ашҡаяҡ та (ағастың ҡабыҡ аҫтындағы йәш ҡатлауы) бик туҡлыҡлы һәм астан үлтермәҫ. Ҡайын, уҫаҡ, шыршы, ҡарағас ашҡаяғын ашарға мөмкин. Сей килеш тә, бешереп тә ҡулланырға була.

Гәзит уҡыусыларҙың күпселеге, урманда аҙашҡан хәлдә лә, ҡорттарҙы һәм мүк ашауы бик икеле. Шуға күрә, миҙгелгә ярашлы, еләк-емеш, бөшмәктәр сыҡмаған ваҡытта нимә ҡулланырға була икәнлеген яҙып үтәм.

**Йыуа.** Уны ҡыҙғылт һуған тип тә атайҙар, сөнки һабағы йәшел булһа ла, һуған өлөшө ҡыҙғылт төҫтә. Һабағын да, һуғанын да ашарға ярай. Тау битләүҙәрендә күп үҫә.

**Ҡымыҙлыҡ.** Тәме әскелтем. Һабағын һыҙырып ҡулланалар. Таулы урмандарҙа улар шул тиклем күп үҫә, организмға кәрәкле С һәм башҡа витаминдарға бай.

**Оҫҡон йыуаһы.** Тәме һарымһаҡтыҡына оҡшаш.

Әммә был үҫемлектәрҙең береһенең дә составында организмда оҙайлы ваҡыт көс һаҡлаусы аҡһым юҡ. Ләкин урманда аҡһымға бай һәм туйындырыусы бер үҫемлек бар. Ул - **һарына.** Элегерәк, картуф булмаған саҡтарҙа, башҡорттар уны ҡышҡылыҡҡа тоҡлап әҙерләгән. Һарына халыҡты аслыҡ йылдарында ла һаҡлап алып ҡалған. Башҡортостан урмандарында ул күп үҫә. Уны таныған кеше урманда бер ваҡытта ла ас ҡалмаясаҡ.

Ошо ябай ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә, урманда аҙашмаясаҡһығыҙ, аҙашҡан хәлдә лә унан нисек сығыу юлдарын табасаҡһығыҙ һәм ас булмаясаҡһығыҙ. Ә шулай ҙа, йәйге ялдарығыҙ бер мажараһыҙ, матур һәм күңелле үтһен!

**Артур ИҘЕЛБАЕВ.**

### СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ



# ОНОТОЛҒАН СИРҘЕҢ...

## ҡабат баш ҡалҡытҡаны

**Башҡортостан буйынса йыл башынан ҡыҙылса (корь) менән ауырыуҙың 6 осрағы теркәлгән, шул иҫәптән, Туймазы районында (Мәскәүҙән ҡунаҡҡа килгән ҡыҙ) - 1, Өфө районында (Бурцево ауылы) - 2, баш ҡалала - 3 осраҡ. Белгестәр быны ата-әсәләрҙең һуңғы 20 йылда балаларға мотлаҡ булған прививкалар эшләтеүҙән баш тартыуына бәйләй. Ҡыҙылсаны бары тик вакцинация ысулы менән генә еңеп буламы, әллә башҡа профилактика ысулдары ла бармы? Был хаҡта Башҡорт дәүләт медицина университетының йоғошло сирҙәр кафедраһы доценты Лира АРЫҪЛАНОВА аңлатма бирә.**

- Ҡыҙылса - ул инфекция ауырыуы, һауа-тамсы юлы аша тарала һәм уға ҡаршы прививкаһы булмаған һәр кеше ауырый. Бары тик ике тапҡыр эшләнгән прививка ғына сирҙән һаҡлай ала. Йәғни прививка ошо сиргә ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килтерә. Ләкин һәр организмдың иммунитеты үҙенсәлекле икәнен дә онотолорға ярамай. Шуға күрә, вакцинациянан һуң да 5 процент кешелә иммунитет барлыҡҡа килмәүе, йәиһә тиҙ арала бөтөүе мөмкин. Әммә күпселектә ул гүмер дауамында ҡыҙылсаға ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килтерә. Шулай уҡ бер тапҡыр ауырығандан һуң организмда тотороҡло иммунитет формалаша һәм икенсе тапҡыр сирләү осраҡтары бик һирәк.

Ҡыҙылса ҡасандыр киң таралған ауырыу булһа, уҙған быуаттың 1968 йылдарында (Рәсәйҙә 1987 йылда) уға ҡаршы вакцинация яһай башлайҙар. Шунан һуң сир онотола. Һуңғы икетиҫтә йылда ата-әсәләрҙең балаларына прививка эшләтеүҙән баш тартыуы, шул уҡ ваҡытта миграция процестары көсәйеүе күҙәтелә. Һөҙөмтәлә "йоҡоға" талған сирҙәр ҡабаттан баш ҡалҡыта.

Сирҙе ҡуҙғытыусы булып парамиковирус тора. Ул организмдан ситтә йәшәй алмай, ультрафиолет нурҙары, ҡоро һауала тиҙ үлә, әммә түбән, хатта Цельсий буйынса минус 70 градусҡа ла сыҙам. Шуға күрә сир кешеләр ҡояшта түгел, ә биналарҙа булған миҙгелдә - октябрҙән апрелгәсә тарала. Сир башланған осоронда һәм тәнгә ҡыҙыл таптар сыҡҡанға тиклем, клиник билдәләр буйынса аныҡ диагноз ҡуйып булмаған ваҡытта хәүефле. Сирле тирә-яҡтағылар өсөн 7-10 көн хәүеф тыуҙыра. Вакцинация эшләнмәгәндә сирле менән бәйләнештә булыусыларҙың барыһы ла сирләй. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ йөклө ваҡытта ҡыҙылса менән ауырыһа, уның балаға кәсеү осраҡтары ла бар. Шуға күрә бала табырға планлаштырған, көслө иммунитетҡа эйә булмаған ҡатын-ҡыҙҙарға ла вакцинация тәҡдим ителә.

Ҡыҙылсаның тәүге билдәләре булып балаларҙа ла, ололарҙа ла юғары температура тора. Шул уҡ ваҡытта тымау, йүтәл күҙәтелә, һуңға табан ул ҡаты йүтәлгә әйләнә. Тауыш бөтөүе лә ихтимал. Хатта конъюнктивит башланыуы мөмкин. Бит, ҡабаҡтар шешенә. Былар барыһы ла башланғыс осорҙа күҙәтелә. Тәнгә ҡыҙыл таптар сыға, улар төрлө дәүмәлдә була һәм берберенә менән тоташырға ла мөмкин. Был күренеш 4-5 көнгә һуҙыла һәм һуңынан таптар ағара, дәүмәле, төҫө үҙгәрә. Сирленең хәле яҡшыра, әммә сир тәндә тап булып дауам итә.

Ҡыҙылса - вируслы һәм бик етди сир. Ваҡытында дауаламағанда уның пневмонияға, ҡолаҡ шешеүенә, үҙәк нервылар системаһы зарарланыуға, хатта үлемгә килтереүе мөмкин. Йыл һайын ҡыҙылсанан 150 мең кеше, бигерәк тә 10 йәшкә тиклемге балалар үлә. Шуға күрә, тәүге билдәләр күренеү менән медиктарға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Вирус организмға тын юлдарындағы лайла һәм күҙҙәр аша инә. Өс көндән һуң ҡан тамырҙарына эләгә, лимфа буйлап тарала, талаҡҡа ултыра һәм 7-10 көн дауамында үрсей. Инкубация осоро тамамланғас, парамиковирустың яңы быуыны бөтөн организм буйлап тарала, тирене, конъюнктиваны, ашҡаҙан-эсәк тракты ағзаларын, тын юлдарын һәм нервылар системаһын зарарлай.

Сир юғары вируслы булғанлыҡтан тиҙ арала сара күрергә, йәғни халыҡҡа иммунизация үткәрергә кәрәк. Сирле менән бәйләнештә булыусыларға 72 сәғәт эсендә прививка эшләнергә тейеш. Әгәр кемдер үҙенә был прививка эшләнгәнме, юҡмы икәнен иҫләмәһә, участка терапевтына мөрәжәғәт итеп, иммунитетын ҡыҙылсанан һаҡлау титры бармы, юҡмы икәнен тикшертә ала. Әгәр иммунитетығыҙ яҡшы булһа, прививка эшләтергә кәрәкмәй, әгәр түбән булһа, ҡыҙылса менән элек ауырығанһығыҙмы, юҡмы - барыбер прививка эшләтеү зарур.

Сир билдәләре күренһә, тиҙ арала медицина хеҙмәтенә мөрәжәғәт итегеҙ: поликлиникаға үҙаллы бармағыҙ, табиптың өйөгөҙгә килгәнен көтөгөҙ. Хәлегеҙ ауыр булһа, тиҙ ярҙам саҡыртығыҙ; табип килгәнсе ғаилә ағзалары, кешеләр менән аралашыуҙы кәметегеҙ; әгәр ҡайҙалыр ял итеп ҡайтһағыҙ, был турала табипҡа әйтегеҙ; үҙ белдегегеҙҙә дауаланмағыҙ!

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

### СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Аҡһым нисек ярҙам итә?

Организмда тимер етешмәүе хәтәр юғалыуға килтерә. Ул бауырҙа, һыйыр малы телендә, ҡуян һәм күркә, һарыҡ итендә, шафталыла (персик), өрөктә (абрикос), арпала, петрушкала, картуфта, башлы һуғанда, ташҡабаҡта, сөгөлдөрҙә, алмала, айвала, грушала, ноҡот борсағында, яҫы борсаҡта, талҡанда, тауыҡ йомортҡаһында, шпинатта, киптерелгән аҡ бәшмәктә күп.

Организмда йод етешмәһә, матдәләр алмашыныуы боҙола, балаларҙың буй һәм аҡыл үҫеше тотҡарланға. Йөклө ваҡытта йод етешмәүе бала төшөүгә, бәләкәй буйлы, һаңғырау-телһеҙ, аҡыл үҫеше тотҡарланған балалар тыуыуға килтереүе ихтимал.

## Йод нисек ярҙам итә?

Йод - ҡалҡан биҙе гормондарын: тироксин менән трийодтиронинды синтезлауҙа ҡатнашыусы микроэлемент. Эндемик боғаҡ үҫешен иҫкәртеү өсөн уның кәрәк булған көндәлек нормаһы 100-150 мкг тәшкил итә. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тәҡдим иткән тәүлек күләме - 150-300 мкг. Ғәҙәттә, йод организмға ризыҡ, тире аша инә. Органик булмаған йод нәҙек эсәктә үҙләштерелә, ә тире аша - бик аҙ инә һәм уны контролләп булмай. Хәҙерге саманан тыш таҙартылған продуктлар аша беҙ барыбыҙ ҙа кәрәкле күләмдән аҙыраҡ йод алабыҙ.

Организмға йод етерлек күләмдә инмәгәндә гипотиреоз башлана. Был сир ваҡытында барлыҡ матдәләр алмашыныуы йәйлана, йөрәк-ҡан тамырҙары, үҙәк нервылар системаһы зыян күрә, аҡһым, май алмашыныу процестары боҙола (кеше бер сәбәпһеҙ һимерә), шешенеү күҙәтелә, эс ҡата, хәтер насарлана. Шулай уҡ сәс ҡойолоуы, хәлһеҙлек тойолоуы, көндөҙ йоҡо килеүе мөмкин.

Эндемик имен булмаған райондарҙа йод сығанағы булып йодланған аш тоҙо тора, уны даими рәүештә көнөнә 5 грамм (1 балғалаҡ) ҡулланыу организмдың тәүлек ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә.

Йодланған тоҙ - барлыҡ кешегә лә иңғай йоғонто яһаусы профилактика продукты. Әммә шуны оноторға ярамай, ваҡыт үтеү менән йодланған тоҙ ҙа (бик тиҙ, йыл ярым - ике йыл), фармакология препараттары ла (тоҙға ҡарағанда әкеренерәк) активлығын юғалта. Шуға күрә уларҙы ҡараңғы урында, ябыҡ һауытта һаҡларға кәрәк.

Йодлы тоҙҙан һәм йод препараттарынан тыш, аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла йодҡа бай ризыҡтар, тәү сиратта - диңгеҙ балыҡтарын, кальмар, креветка, мидия, диңгеҙ кәбеҫтәһенең һәм ылымыҡтарының төрлө төрҙәрен ҡулланырға кәрәк.

Әммә шуны ла оноторға ярамай: эндокрин системаһы сирле барлыҡ кешеләргә, йөклө һәм бала имеҙгән ҡатындарға, 50 йәштән өлкәндәргә, ауыр хроник сирлеләргә препараттарҙы ҡабул итер алдынан табип-эндокринолог менән кәңәшләшергә кәрәк.

**С. КУЗИНА.**

**(Дауамы бар).**



### 9 ИЮЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.10, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 00.45 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 03.20 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.40 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
23.40 "Sпарта". Детективный сериал, 1-я серия (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Месть как лекарство". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
01.00 "Муж счастливой женщины". Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45, 23.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Бай бакса" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 10 ИЮЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55, 02.05, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18,25, 00.40 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 03.20 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
20.20 "Время".
21.30 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
23.35 "Sпарта". Детективный сериал (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.35 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.35 "Селфи". Драма (12+).
22.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/2 финала.
00.55 "Поддубный". Спортивная драма (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 20.30, 23.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Учим башкирский язык".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә".**

### 11 ИЮЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.05, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 23.35 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
17.50 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
22.30 "Sпарта". Сериал (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40 "Вести-Башкортостан".
12.00, 02.40 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.35 "Дуэлянт". Драма (12+).
22.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/2 финала.
00.55 "Вычислитель". Худ. фильм (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**16.45 "Замандаш" (12+).**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Учим башкирский язык" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-сағa" (6+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 12 ИЮЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55, 01.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 00.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.55 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын". Драматический сериал, 1-2-я серии (16+).
23.25 "Sпарта". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Куда уходят дожди". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
00.50 "С чистого листа". Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал.**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 20.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Байтус" (6+).**
**15.45 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кэрзэ".**
**16.45 "Замандаш" (12+).**
**17.00 "Валерий Золотухин. Домовой Таганки" (12+).**
**17.30 "Орнамент".**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Корнуэль". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 13 ИЮЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 04.50 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 03.55 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сын". Сериал. 3-4-я, заключительная серии (12+).
23.25 "Городские пижоны". "Ингмар Бергман" (16+).
00.30 "Мой король". Мелодрама (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!" (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.55 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Юморина". Юмористический фестиваль (12+).
24.00 "Торжественная церемония открытия XXVII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
01.55 "Нинкина любовь". Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.00 "Агния Барто. Читая между строк" (12+).**
**10.45 "Учим башкирский язык".**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Т.Гарипова. "Девушка с монистами" (12+).**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Выше всех!" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.30 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**24.00 "Путь дракона". Худ. фильм (12+).**
**02.15 Ф.Бурнаш. "Молодые сердца" (12+).**

### 14 ИЮЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.40 "Лучик". Сериал (16+).
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Ирина Мирошниченко. "Я знаю, что такое любовь" (12+).
11.10 "Теория заговора" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Михаил Пуговкин. "Боже, какой типаж!" (12+).
13.20 "Свадьба в Малиновке". Комедия.
15.10 "Спортлото-82". Комедия.
16.55, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
18.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Матч за 3-е место. Прямой эфир из Санкт-Петербурга.
21.00 "Время".
23.00 "Развод". Комедия (12+).
01.15 "Белая ночь, нежная ночь..." Худ. фильм (12+).
02.55 "Модный приговор".
03.55 "Мужское / Женское" (16+).
04.50 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.20 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк" (16+).
13.55 "Последняя жертва Анны". Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Счастье по договору". Мелодраматический сериал (12+).
01.05 "45 секунд". Худ. фильм (12+).
03.15 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Клуб Винкс. Тайна морской звезды". Анимационный фильм.**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (6+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Бай бакса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 "Йатаган" (12+).**
**17.45 "Эх, сабантуй! Баймакский район" (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Песня года" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 02.15 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018" (12+).**
**24.00 "Костяной томагавк". Худ. фильм (16+).**

### 15 ИЮЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.15, 06.10 "Лучик". Сериал (16+).
06.00, 10.00 Новости.
07.30 "Смешарики. ПИН-код".
07.45 "Часовой" (12+).
08.15 "Здоровье" (16+).
09.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.10 "Зинаида Кириенко. "Я в кино настрадалась" (12+).
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Александр Домогаров. Рыцарь печального образа" (16+).
13.20 "Белая ночь, нежная ночь..." Худ. фильм (16+).
15.15 "Большие гонки" с Дмитрием Нагиевым (12+).
16.40 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
17.30 "Лучше всех!" Избранное.
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок во Владивостоке (16+).
00.35 К Чемпионату мира по футболу. Гала-концерт звезд мировой оперы. Трансляция из Большого театра.
02.40 "Антиганг". Боевик (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "45 секунд". Худ. фильм (12+).
13.10 "Быть в игре". Док. фильм (12+).
15.00 "Легенда № 17". Спортивная драма (12+).
18.00 "Вести".
19.30 Футбол. Чемпионат мира-2018. Финал. Прямая трансляция из Москвы.
23.00 "Тренер". Спортивная драма (12+).
01.50 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики". Мультсериал.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Творческий вечер заслуженного деятеля искусств РФ и РБ, профессора Фарзаны Сагитовой (12+).**
**20.00 "Лидеры региона" (12+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Свидание с джазом" (6+).**
**00.15 "Цирк". Худ. фильм (12+).**
**02.15 В.Войнович. "Путем взаимной переписки" (12+).**

✔ *Күп ашап күбенгәнсе, аҙ ашап буйыңа һеңдер.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# ХӘҘЕР БАЛАЛАР ВЕЛОСИПЕД ТҮГЕЛ,

## атай-әсәйенән уҡ-ян һорай икән...



(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Бөгөн Мәргән уҡсы, Күсмәндәләр уйындары, Милли спорт уйындары кеүек милли традицияларға нигеҙләнгән бәйгеләр популярлашты. Нисек уйлайһығыҙ, был үҙенә күрә бер мода булып ҡына үтеп китмәсме икән?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Бөгөн үҙ милләтенең вәкиле булыу модаға ғына түгел, традицияға инде. Был күренеш бер беҙҙең милләттә генә булһа, бәлки, үтеп тә китергә мөмкин, тип уйлар инек. Ә бит был бөтөн донъя халыҡтарында ла күҙәтелә. Хәҙер халыҡтар тотошлайы менән үҙ асылына ҡайта. Был донъяның яңырыуы, минеңсә. Уҡ атыуға балалар ылыға. Яртышар йылда үҙ категорияһында чемпион дәрәжәһенә еткән ҡыҙҙар-малайҙар күп. Ата-әсәләрҙән ишеткәнем бар, балалар хәҙер уларҙан велосипед йәки икенсе нәмә һорамайҙар, ә уҡ-ян һорайҙар икән. Киләсәктә, Алла бирһә, балалар ат һорай башларҙар әле. Һәр малай үҙенең атҡа атланырға тейеш икәнлеген төшөнә, аңлай башлаһа, ҡалай ҙур алға китеш булыр ине.

**Урал Мортазин:** Быны мине әле урамда, ян алам, тип килгән бер малай көтөп йөрөй. Малайҙарҙы, мәҫәлән, уҡ атыуҙан да мажаралыраҡ, азартлыраҡ булған ниндәй уйын менән ҡыҙыҡһындырып була! Ә уның файҙаһы һуң! Бына, мин, мәҫәлән, уҡ атыуға әүрәп, теҙәгендә һылыш өҙөлмәһен өсөн тәмәке тартыуҙы ла ташланым.

**Рушан Хәсәнов:** Оло дала һулышы - ул ат. Сөнки далала һин атһыҙ бер кем дә түгел. Дала халҡы алдында башҡорттоң да ат менән бер бөтөнлөгөн күрһәтеү өсөн мин дә, әҙерләнеп барып, сарала һыбай уҡ атыу ярышында ҡатнаштым. Һәм йәйләп үҙебеҙҙә лә уҡ атыуҙы ла, һөңгө ташлау, ҡылыс һәм башҡалар менән эш итеүҙе мотлаҡ һыбай башҡарыуға оҫтарыу кәрәгәсәк.

**Төрки халыҡтар араһына сәйәхәткә сыҡҡанда йыш ҡына интернетҡа бейеү өлгөләрен һалаһығыҙ. Әле һуңғыһынан алынған яҙманы ла ҡарайым да, ни өсөндөр майҙанда бейеүселәр янына башҡорт егеттәре килеп төшһә, башҡалар ситкә китеп бөтә лә ҡуя. Был беҙгә тойола ғынамы, әллә мин арттырып ебәрәмме?**

**Урал Мортазин:** Хореограф булараҡ, мин яуап бирәйем әле. Күп төрки халыҡтарҙың ир-егеттәр бейеүендә батырҙар (героический) һыҙаты үҫешмәгән, хатта бөтөнләй юҡ. Улар ҡоштар булып, үҫемлектәр, аттар булып бейеп тик йөрөй. Хәрәкәттәре талғын, һалмаҡ йәки аурындарын ғына уйнатыуға ҡайтып ҡала. Ҡалмыҡтар, монголдар, ҡырғыҙҙар, мәҫәлән, ярым эйелгән хәлдә бейейҙәр, был уларҙың мәжлестәрә тирмә сиктәрендә генә үткәнен аңғарта. Ҡаҙаҡтарҙың ир-егеттәре бөтөнләй бейемәй икән. Ә беҙҙең һәм Кавказ халыҡтарының ир-егеттәр бейеүе башлыса егетлектән, аугирлыҡты һынландырыуҙан тора бит. Шуға ла беҙ был тәңгәлдә харизма, дәрт, ярһыулыҡ менән алдырабыҙ.

**Әле һеҙ йөрөп килгән фестиваль киләлендәге сараны үткәреү өсөн беҙгә ниндәй әҙерлек кәрәк? Йәки беҙ үткәрә алабыҙмы бындай йыйынды?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Бының өсөн иң беренсе беҙгә аттар кәрәк. Ябай йылҡы түгел, ә менгегә өйрәтелгән аттар. Һәр бер ауылда булырға тейеш бер егермеутыҙлаған ат. Һәр ауылда булырға тейеш бишәр ысын тирмә. Әлеге ваҡытта беҙ йәйләп-йәйләп әле йүгәнле, әле ҡылыслы, әле итекле булып тупланабыҙ. Бына Рушан Ҡаҙағстандан эйәр алып ҡайтты. Һәр беребеҙ шулай һыбайлы булырға әҙерләнәбеҙ. Денис йылҡы үрсетә бит инде. Беҙ шул базала аттар өйрәтеп алыу һәм һыбайлы аугирҙар булып йөрөрлөк дәрәжәгә ынтылабыҙ.

**Рушан Хәсәнов:** Һыбай атышта өс тәүге урынды ла йәш кенә ҡаҙаҡ егеттәре алды. Улар был аттары менән ҡуша үҫкән һәм ҡуша йөрөп өйрәнгән. Аттар хужаларының һәр хәрәкәтен аңлап тора. Ҡарап торам, былар аттарын ҡыумайҙар ҙа, бар иғтибарҙары сәптә, ә аттары үҙҙәре белеп хәрәкәт итә. Бына беҙгә лә шул кимәлгә еткереп тәрбиәләнгән аттар кәрәк.

**Артур Батыршин:** Унан, әлбиттә, бындай сараларға иғтибар, ихтирам булыуы һәм уларҙың мөһимлеген аңлау бурыс. Ҡаҙаҡ-ҡырғыҙҙар, мәҫәлән, был бәйгеләрҙең милли уҙаң өсөн ниндәй файҙа килтереүен аңлап, сараларҙы дәүләт ярҙамында уҙғара. Уларҙың бөтөн финанс мәсьәләләре юғары кимәлдәрҙә хәл ителә. Уйлап ҡарағыҙ, бер аҙнала беҙ Алма-Атала фестивалдә булдыҡ, киләһе аҙнаһына Астанала шундайыраҡ сара көтөлә ине.

**Урал Мортазин:** Беҙҙең милли кейемдәрҙә йөрөүебеҙ, милли уйындар ойоштороуыбыҙ, милли кейемдәрҙә фотокүргәҙмәләр яһап ҡуйыуыбыҙҙың да маҡсаты шул - халыҡтың рухын күтәреү. Реформалар, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, оптималләштереү тип бигерәк төшөнкөлөккә бирелеп киттек. Ә инде рух юғары булғанда күп бәләләр үҙенән-үҙе юҡҡа сыға ул. Халыҡтың дәрте бар ул беҙҙә, теләге лә бар. Бына ике йылда ғына уҡ атыуҙа күпме халыҡ йыйып алдыҡ, ошо ғына ла сағыу бер күрһәткес. Бары тик хөкүмәттең халыҡ ихтыяждарына ҡолаҡ һалыуы ғына бурыс. Бына, мәҫәлән, ҡырғыҙҙар уктан атҡан өсөн акса ала. Улар беҙҙең йырсылар, бейеүселәр кеүек шөғөлләнеп, сығыштар яһап, сараларҙа ҡатнашып, эш хаҡы алып йөрөй.

**Юлай Ғәлиуллин:** Егерменсе йылда Башҡортостанда Бөтөн донъя фольклориадаһы үтәсәк, әммә уға әҙерлек эштәре тойолмай әлегә. Был оло сараны йыр-бейеү менән генә үткәреп ебәреп булмай. Беҙҙең мәҙәниәт тә, сәнғәт тә батырҙарҙан, аугирлыҡтан айырым ҡаралмай. Ә беҙҙә улар айырылып, ҡоро йыр-моң булып ҡына ҡалып, халыҡты артыҡ көсһеҙләндереп, сөсөләндереп күрһәтә һымаҡ. Был етешһеҙлекте кисекмәҫтән иҫкә алыу, төҙәтеү кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шундай уй-кисерештәр, фекер-һығымталар менән ҡайтҡан фестивалдән беҙҙең егеттәр. Ҡайтҡандар ҙа тағы ла дәртләнеберәк, сәмләнеберәк эшкә тотонғандар. Пландарында яңы проекттар, бәйге-ярыштар. Был ышаныслы, мөһимлекте уларға аралашып ҡайтҡан төрки дуҫтары биргән. Бер көнлөк тормош, бер йыллыҡ киләсәк менән генә йәшәмәй шуға ла уғатарҙар, улар үҙҙәренең маҡсатында милләтебеҙҙең киләсәген күҙаллай.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЫРНАҠ БУЙЫ ХАТА,

## беләк буйы яфа

Күп ашап күбенгәнсе, аҙ ашап буйыңа һеңдер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хәүефһеҙлек ҡаһарманлыҡты һәм тиҙлекте кәметмәһен өсөн, бөйөк эштәрҙе уйламаҫтан аткарыу кәрәк.

**(Юлий Цезарь).**

Ерҙә кешеләр йәшәгәндә, яманлыҡ та йәшәр.

**(Тацит).**

Әйтелгән һүҙ өсөн үкенергә тура килде, әйтелмәгәне өсөн - юҡ.

**(Ксенократ).**

Ни өсөн беҙ техник вуздарҙа материалдарҙың ҡапма-ҡаршылығын өйрәнәбеҙ, ә педагогик уҡыу йорттарында тәрбиә барышында шәхестәрҙең ҡапма-ҡаршылығын өйрәнмәйбеҙ?

**(А. Макаренко).**

Эш урыныңды ваҡытында ҡалдырыу кәрәк. Ижадының һүрәнләнә башлауын тамашасы тоймаҫ элек сәхнәне ҡалдырған балет бейеүсеһе һымаҡ.

**(В. Оствальд).**

Хәл-ваҡиға менән көрәшеүсе уның ҡолона әүерелә.

**(Сенека).**

Өлгөргән еләкте ҡунаҡҡа ике төрлө биреп була: бысраҡ ҡулдарҙа йә ялтырап торған тәрилкәлә - уларҙың тәме төрлөсә буласаҡ.

**(Леонид Сухоруков).**

Ахмаҡҡа уның ахмаҡ икәнен хатта аҡыллы ла иҫбат итә алмаясаҡ.

**(Л. Гаврилов).**

Ни тиклем күберәк үҙгәргән һайын, шул тиклем күберәк бөтәһе лә иҫкесә ҡала.

**(Француз мәҡәле).**

Аҡылһыҙҙар менән идара итеүгә ҙур аҡыл, наҙандар менән идара итеүгә ҙур белем кәрәкмәй.

**(Эстебан де Эсмир).**

**Шулай итеп, риүәйәт: "Бер сит ил илсеһе Екатерина II-нән шулай тип һорай икән: "Һеҙ, Ғәли йәнәптәре, нисек итеп үҙегеҙҙең тыңлауһыҙ дворяндарығыҙҙы тыңлата алыуға өлгәшәһегеҙ?" Екатерина II шулай тип яуап биргән: "Мин уларҙы бер ваҡытта ла уларға файҙалы булмаған эште эшләргә мәжбүр итмәйем".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Лəйсəн НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 1181/07